ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Кискә Өфө

10-16 сентябрь (һарысай) 2016

№37 (715)

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Заманыбыҙ мәғрифәтселәре...**



5-6

**Рәсәй тарихындағы...**

тәүге автономиялы республика ул - Башҡортостан





8-9

**Һүҙ-ҡанатҡайҙарым, көҙрәт бир...**



11

**Ҡорбан салыу...**

Аллаһыға яҡынлашыу ул



12

**Һайлауҙар** 14

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! Ҡыуаныслы хәбәребеҙ бар: Рәсәй почтаһы яҙылыу хаҡтарына бер аҙ ташлама яһаны, йәғни хәҙер беҙ 50665 индексылы гәзитебеҙгә - 485 һум 40 тингә, 50673 индексына (предприятиелар һәм ойошмалар өсөн) 515 һум 40 тингә яҙыла алаһығыҙ. Сентябрҙә 2017 йылдың тәүге яртыһы өсөн "Кискә Өфө"гә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәрҙән 10 кеше 2017 йылға "Башҡортса дини календарь", дүрт кеше "Бураҡаевтар ижады", шулай уҡ башҡа китаптарға лайыҡ буласаҡ.***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Гены үҙгәртелгән аҙыҡ-түлек ҡулланыуға күпселек ҡаршы. Рәсәйгә сит илдән ГМО-орлоҡтар индереү һәм уларҙы үҫтереүҙе тыйыусы өр-яңы закон да шул нигеҙҙә ҡабул ителде. Рәсәй баҙарына күпләп индерелеүсе ГМО-аҙыҡ-түлек хаҡында һеҙ ниндәй фекерҙә?

***Фәриҙә САДИҠОВА, Өфө лимонарий-тәжрибә хужалығы мөдире, биология фәндәре кандидаты:*** Ил етәкселеге кимәлендә бындай мәсьәлә ҡуҙғатыла икән, тимәк, уның етди сәбәптәре, нигеҙләмәһе бар. Юғиһә бит, ысынлап та, һуңғы йылдарҙа кешелеккә ГМО-продукция ныҡлап һөжүмгә күсте: баҙар тулы бутафор уйынсыҡтарға оҡшаған алма, слива, әфлисун, лимон, башҡаһы тулып ята. Сит илдәр беҙҙе күптән инде гендары үҙгәртелгән соя һәм кукуруз менән һыйлай. Һәм, ғөмүмән, илебеҙ аҙыҡ-түлек баҙарында ГМО-продукция 70 процент самаһы тәшкил итә, ти белгестәр. Рәсәйгә ГМО-орлоҡтар һәм үҫентеләр индереүҙе тыйыу дөрөҫ, тип уйлайым, сөнки бының ниндәй эҙемтәләргә килтереү ихтималлығын бәрәү ҙә, хатта ҙур-ҙур ғалимдар ҙа өҙөп кенә әйтә алмай. Билдәһеҙлек - ул һәр ваҡытта ла хәүеф менән бәйле. Нисек кенә булмаһын, гены үҙгәртелгән продукция үҙенсәлектәре тулыһынса өйрәнелмәгән, уның һөҙөмтәләрен күҙәтеү өсөн күп йылдар кәрәк булыр ине. Шулай ҙа ген инженерияһы юлы менән алынған аҙыҡ-түлек кеше гендарына һәләкәт хәүефе менән янай, тип уйларға нигеҙ бар: күҙәнәк кимәлендә һүҙ бара бит. Интернет материалдарҙан күренеүенсә, ГМО-кукуруз менән туҡландырылған тәжрибә объекттары - ҡомаҡтар ҡот осҡос яман шеш сиренә дусар булғандар. Гены үҙгәртелгән орлоҡтар индереүҙе, уны сәсеп үҫтереүҙе тыйыу менән генә эш бөтмәй, минеңсә. Әйтеүҙәренсә, аҙыҡ-түлек баҙарындағы продукцияның 70 процентҡа яҡыны тап ана шул ситтән индерелгән гены үҙгәртелгән "ризыҡ"тан ғибәрәт хәҙер. Хатта көндәлек тормошобоҙҙа ҡулланылған иген, ярма культуралары - бойҙай, арпа, ҡарабойҙай, соя, кукуруз, көнбағыш, хатта сөгөлдөрөнә тиклем - күпләп ситтән индерелеүсе ГМО продукциялар икәне бер кем өсөн дә сер түгел. Бындай продукция етештереүсе сит ил компаниялары, минеңсә, бер генә маҡсатты күҙҙә тота: ул да булһа, күберәк уңыш алып, һатыу, байығыу. Шуға күрә ярты юлда туҡталып ҡалырға түгел, ә аҡрынлап ГМО аҙыҡ-түлек индереүгә лә юлды ябырға кәрәк. Мөғайын, астан үлмәбеҙ. Үҙебеҙ таҙа, тәбиғи продукция етештереп ҡулланайыҡ. Бының өсөн беҙҙә бөтөн мөмкинлектәр ҙә бар.

**(Дауамы 2-се биттә).**

ШАҒИР ҺҮҘЕ

# ҺАРЫСАЙ




***Йүгерә-атлай бәрәү килә***
***Урамдарҙы тултырып.***
***Үҙе кеүектәрҙе күрһә,***
***Көлә ауыҙын йырып.***
***Аҡ алъяпҡыс тағып алған,***
***Икенән үргән сәсен.***
***Япраҡ манырға һайлаған***
***Буяуҙың сағыу төҫөн.***
***Муҡсайына тейәп алған***
***Дәфтәрҙәр һәм китаптар.***
***Ҡыҙҙың кәйефен улар ҙа***
***Тоя, аңлай һымаҡтар.***
***"Мәктәп" һүҙен яҙып ҡуйған***
***Хәрефтәр алтаҡтаға.***
***Күңелдәрҙе дәртләндереп,***
***Гөлләмәнән йыр аға.***
***Хәрефтәр уйнай һикереп,***
***Бейергә төшкән һандар.***
***Ҡыңғырау сыңына ҡушыла***
***Тәбиғәттә бар моңдар.***
***Ҡулында ҡыҙҙың - "Әлифба",***
***Түгел инде уйынсыҡ.***
***Тыуған ерем буйлап атлай***
***һарысай тигән ҡыҙсыҡ.***

**Лариса АБДУЛЛИНА**

12+

**✓ ГМО-орлоҡтар, йәнәһе лә, төрлө ауырыуҙарға, ҡоротҡостарға ҡаршы тора ала, теләһә ниндәй һауа шарттарына сыҙам, күп уңыш бирә. Ә бит үҙебеҙҙең сорттар тап ана шундай сифаттары менән дан тота ине лә!**



ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# АҠЫЛЛЫ ҠАТЫНДЫҢ ИРЕ...

## ғаиләһендә баш булыр

***Нәзиә БИКБОВА, Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы:*** Халҡымдың киләсәге булған йәштәр тураһында бик борсолам. Бөгөн йәмғиәттәге барлыҡ проблемалар тәрбиәһеҙлектән килә. Йәштәрҙең насар ғәҙәттәргә бирелеп китеүе, ғаиләләр тарҡалыуы, ир-ат һәм ҡатын-ҡыҙҙың йәмғиәттәге урыны, ғаиләләге роле алмашыныуы ла тәрбиәгә бәйле. Йәшәйеш ҡиммәттәре үҙгәреүенә, матди байлыҡ артынан ҡыуған кешеләргә ҡарайым да, ҡайһы саҡта башҡорт халҡының аҫыл ир-егеттәре бихисап һуғыштарҙа, ихтилалдарҙа башын һалып, тамыры менән йолҡоп алынып бөткәнме әллә, тигән борсоулы уйҙарға талам. Бөгөн беҙҙең арала бары тик әпкәләйҙәр генә тороп ҡалған төҫлө. Әлбиттә, халыҡ мәнфәғәтен ҡайғыртыусы милләттәштәр ҙә бар, ләкин улар һирәк. Ир-атты бөгөн атайҙар урынына әсәйҙәр тәрбиәләй бит. Ҡыҙғанысҡа күрә, йыш ҡына ғаилә башлығы - атай өлгөһөндә түгел, киреһенсә, атайыңа оҡшама, тип өйрәтәләр. Ғаиләлә атай кешенең абруйы булырға тейеш. Бына беҙгә әсәйем атайым ашарға ултырмайынса, хатта өҫтәл янына килергә рөхсәт итмәй торғайны. Тәүҙә атайым килеп ултыра, шунан ғына беҙ уны тирәләтеп теҙелешеп китәбеҙ. Ир-аттың юлын ҡыйып, алдынан да үтергә ярамай, ти ине әсәйем. Ә хәҙерге заманда нисек? Ҡатын-ҡыҙҙар ир алдынан сығып эшләй, ярышып аҡса таба, һыр бирмәйем, тип, донъя көтә, һүҙ һөйләгәндә лә беренсе башлап телмәр тота. Шулай эшләгәс, ысын ир-егеттәр бөткән, тип зарланырға хаҡы ла юҡтыр ҡатын-ҡыҙҙың. Был турала хатта риүәйәт тә бар бит. Иблис кеүек ир һәм фәрештә кеүек тәрбиәле ир өйләнергә булған, ти. Беренсеһе фәрештә кеүек ҡатынды, икенсеһе иблистәй яман ҡатынды хәләл ефете итеп һайлаған. Бер аҙҙан иблистәй яуыз ирҙе лә фәрештә ҡатыны үҙе кеүек игелекле итеп үҙгәртеп алған. Ә бына иблис ҡатын иренән үҙенә оҡшаш әҙәмде яһаған. Ҡатын-ҡыҙҙың рухи көсө сағылыш тапҡан был риүәйәттә. Ул үҙе теләгәнсә әйләндереп ала ирҙе. "Ир күңеле быяла, төшөп китһә ыуала", тигән башҡорт халыҡ мәҡәле бар. Бына был һүҙҙәрҙә уларҙың бөтә асылы һалынған, сөнки ир-егеттәр бөгөлмәй, улар һына. Ҡатын-ҡыҙҙар төрлө ситуацияға яраҡлаша белә, юҡҡа ғына ҡырҡ йәнле тимәйҙәр уларҙы. Шуға күрә кейәүгә сығып, икенсе ғаиләгә барып ингәс тә ҡыҙ кеше яраҡлашырға, ундағы ғәҙәттәргә, йолаларға күнегергә тейеш. Күп кенә йәш ғаиләләрҙең тарҡалыуы тап бына килендәр үҙ ғаиләһен өлгө итеп, ирен ата-әсәһенә ҡарап һанға һуҡмай башлауына бәйле. Ҡапыл ғына ҡырҡа талаптар ҡуйып, ирҙе үҙгәртеп булмай, шуны аңлаһын ине йәш ҡыҙҙар һәм килендәр. Иблис ирҙе фәрештәгә әйләндереү өсөн дә, фәрештә ирҙе насар юлға баҫтырыу өсөн дә ваҡыт кәрәк. Беләгенә ятып, ҡолағына өрөп ятҡан ҡатын ғына быны атҡарып сыға ала. Ә ундай гүзәл заттар бер ҡасан да ирен түбәнһетмәй, ғаиләләге абруйын төшөрмәй. Шуға ла тәү сиратта ҡыҙҙарҙы әхлаҡлы, иманлы, ихтирамлы итеп тәрбиәләргә кәрәк. Һуңынан инде ул үҙе лә ошо тәрбиәне балаларына бирәсәк, ирен дә ипләп кенә үҙенең арбаһына ултыртып аласаҡ. Ғаиләлә әсә роле ҙур, әммә аҡыллы ҡатын ирен өҫтөнөрәк ҡуя белергә тейеш. Бәхетле ғаилә, уңышлы ир, нәзәкәтле ҡатын, тәрбиәле балалар, милләт киләсәге - быларҙың барыһы ла ҡатын-ҡыҙҙан тора.

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *Гены үҙгәртелгән аҙыҡ-түлек ҡулланыуға күпселек ҡаршы. Рәсәйгә сит илдән ГМО-орлоҡтар индереү һәм уларҙы үҫтереүҙе тыйыусы өр-яңы закон да шул нигеҙҙә ҡабул ителде. Рәсәй баҙарына күпләп индерелеүсе ГМО-аҙыҡ-түлек хаҡында һеҙ ниндәй фекерҙә?*

**(Башы 1-се биттә).**

***Кадир МӘҒӘФУРОВ, биолог, иҡтисадсы, ауыл хужалығы фәндәре докторы, профессор:*** Рәсәйгә сит илдән гены үҙгәртелгән орлоҡтар индереү һәм уларҙы үҫтереүҙе тыйыу тураһында закон ҡабул итеп, ил етәкселеге дөрөҫ эшләне, сөнки бөгөн беҙҙә бөтөн иҡтисад, сәнәғәт, ауыл хужалығы һәм башҡа өлкәләрҙең эре транснациональ корпорациялар эшмәкәрлегенә бәйлелеге көсәйә бара. Ауыл хужалығы культураларының байтаҡ төрҙәре сит ил технологиялары буйынса сәселеп, эшкәртелеүгә күсеп бөтөп бара, ни өсөн тигәндә, улар әлеге ситтән килтерелгән гены үҙгәртелгән орлоҡтар нигеҙендә эш итә. Донъялағы аграр етештереү өлкәһендә бындай ГМО-орлоҡ материалдарын сығарыусы һәм төрлө илдәрҙе уның менән тәьмин итеүсе транснациональ компанияларҙың штаб-квартиралары Рәсәйгә ҡаршы санкцияларҙы хуплаусы илдәрҙә (АҠШ, Германия) урынлашҡан. Ошо бер нисә биотехнологик гигант ГМО-орлоҡ баҙарын тотош үҙ ҡулдарына алып, уны даими контролдә тота. Шуға күрә лә ГМО-орлоҡ продукцияһын Рәсәйгә индереүҙе тыйыуҙы, бер яҡтан, санкцияға ҡаршы яуап аҙымы тип тә баһаларға мөмкиндер. Икенсе яҡтан, беҙгә күптән үҙ тамағыбыҙҙы үҙебеҙ туйҙырырға өйрәнергә ваҡыт, юғиһә етештермәй, әҙерҙе (хатта уның сифаты ниндәй булыуға ла ҡарамаҫтан) һатып алыуға ғына һалыштыҡ тамам.

Совет замандарынан хәтерләһәгеҙ, беҙҙең илдә элек-электән бынамын тигән селекция мәктәбе уңышлы эшләп килде. Миҫал өсөн үҙебеҙҙең данлы Шишмә селекция үҙәген генә алып ҡарайыҡ: ваҡытында бында легендар агроном-селекционер - Социалистик Хеҙмәт Геройы Сабир Ҡунаҡбаев эшләне һәм ужым арышының бөтөн донъяға билдәле ҡыҫҡа һабаҡлы "Сулпан" сортын уйлап сығарҙы. Аҙаҡ ошо сорт нигеҙендә генә лә 30-ҙан ашыу яңы сорттар сығарылды. Һәм, ғөмүмән, Шишмә селекция хужалығында бойҙай, ҡарабойҙай, борсаҡ, кукуруз, күп йыллыҡ үләндәр, шулай уҡ емеш-еләктәрҙең яңы сорттарын етештереү буйынса бик күп билдәле селекционерҙар, шул иҫәптән, Л. Стреляева, В. Хангилдин, А. Биктимеров, Р. Болотина һәм башҡалар эшләне. Тимәк, шундай көслө селекция мәктәбен яңынан гөрләтеп эшләтеп ебәрергә форсат тыуҙы, тигән һүҙ! Ниңә әле беҙ, ВТО баҫымына бирешеп, серегән бай капиталистарҙы байытып, уларҙан орлоҡ һатып алып ятабыҙ? ГМО-орлоҡтар, йәнәһе лә, төрлө ауырыуҙарға, ҡоротҡостарға ҡаршы тора ала, теләһә ниндәй һауа шарттарына сыҙам, күп уңыш бирә. Ә бит үҙебеҙҙең сорттар тап ана шундай сифаттары менән дан тота ине лә! Минеңсә, үҙебеҙҙең селекция мәктәбен кисекмәҫтән тергеҙергә, был өлкәгә иғтибар, шулай уҡ уны финанслауҙы бермә-бер арттырыу ғына кәрәк. Санкция ҡыҫымынан сығыуҙың, ГМО-нан бойондороҡһоҙлоҡтоң әмәлен мин фәҡәт шунда күрәм.

***Фәрзәнә ИБРАҺИМОВА, хеҙмәт ветераны:*** Ғүмерем буйы колхозда эшләп, пенсияға сыҡтым, ауылда үҙ йортом, баҡсам бар. Бөгөн үк ауылға ҡайтып китер инем, ҡыҙымды йәлләйем: кейәү менән икеһе лә йәштәр әле, шуға ейәнемде ҡарашып, уларға хәлсә ярҙам итеп йөрөүем. Картуф сәсеп киткәйнем, ҡайтып ҡарарға ла форсат юҡ: йә ҡыҙым, йә сабый сирләп китә. Сирләрһең дә! Ҡала ризығына үҙем дә өйрәнә алмай бер булдым. Баҙар алыҫ, шуға картуфты магазиндан алып, бер нисә рәт һемәйҙем. Бәләкәй генә сетка-тоҡтарҙа матур ғына күренеп ятҡас, ҡарап-нитеп тормай алғайным да, ҡайтҡас, уны сәғәт буйы бешерергә тура килде, унда ла тышы бешә, эсе - сей. Тоғондағы ваҡ ҡына яҙыулы ҡағыҙын уҡып ҡараһаҡ, Мысыр бәрәңгеһе булып сыҡты был. Аптырағанымды күрһәгеҙ: ҡомлоҡта нисек үҫтерәләр икән ул картуфты? Магазинда тағы ла Израилдән килтерелгән укроп, йәшел һуған, кишер ҙә күреп ҡалғайным. Кейәүем уҡыған кеше, төшөндөрөп бирҙе мин наҙанға: ҡомда ла, ашламаһыҙ ҙа үҫә, колорадо ҡуңыҙы уға яҡын да килмәй, сирләмәй ҙә, серемәй ҙә, ҡоролоҡтан да ҡурҡмай торған картуф, имеш. ГМО тигән нәмә булып сыҡты был. "Ҡәйнәм, картуфты башҡаса магазиндан алма, баҙарҙан ауылдыҡын алып ҡайтырмын", ти кейәү, ә мин тамам ҡурҡыуға ҡалдым: ундай ризыҡ ашатып, ниндәй бала үҫтерер һуң былар? Шулай тағы баяғы магазинға инһәм, ҙур һыуытҡыс тулы киҫәк-киҫәк туң бауыр өйөлөп ятҡанын күрәм. Ҡыҙымдың гемоглобины түбәнәйеп киткәйне, бик һәйбәт булды әле, тип ҡыуанам. Туҡта, был юлы шулай ҙа ҡағыҙын уҡырға булдым: Аргентинанан килтергәндәр! Кейәү орошор, тип алманым тегене. Әйткәндәй, быныһын да популяр телдә аңлатып бирҙе кейәү. Сит илдәрҙә малдарҙы ла әлеге ГМО-үҫемлек һәм культуралар менән аҫрайҙар, көтөүлеккә лә сығармайҙар, торған-ятҡан урындарында ғына һимертәләр икән. Бына һиңә - мә! Ысын ризыҡ ҡалмай килә түгелме һуң был ҡала магазиндарында? Алыҫ булһа ла, баҙарға йөрөргә тура килер, ауылдыҡы - ауылдыҡы инде. Ейәнем атлай башлаһа, уны ауылға алып ҡайтып, үҙем ҙурайтып бирермен, тип ниәтләп торам. Һыйыр йә кәзә алып ебәрермен, ҡош-ҡорт бар. Бөтәһе лә үҙебеҙҙеке: таҙа, тәбиғи, файҙалы ризыҡ...

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Валерий Исхаҡов Башҡортостан иҡтисади үҫеш министрының беренсе урынбаҫары итеп тәғәйенләнде. Валерий Рим улы Исхаҡов 1979 йылда Ишембай ҡалаһында тыуған. 2001 йылда Өфө дәүләт авиация техник университетын тамамлаған. Хеҙмәт эшмәкәрлеген 2002 йылда Башҡортостандың Иҡтисад һәм монополияға ҡаршы сәйәсәт министрлығында әйҙәүсе белгес булып башлай. Һуңғы эш урыны - республиканың иҡтисади үҫеш министры урынбаҫары.

✓21 сентябрҙә Өфө "Донъя йүгереүе" халыҡ-ара факел эстафетаһын ҡаршылай. Сара көндөҙгө сәғәт 1-ҙә Еңеү паркында уҙа. Ойоштороусылар хәбәр итеүенсә, илдең Европа өлөшөндә, Урал һәм Себер сигендә урынлашҡан баш ҡалала эстафетаны ябыу тантанаһы була. Рәсәйҙә эстафета Владивосток, Севастополь, Пермь, Мәскәү ҡалаларында башлана һәм уның оҙонлоғо яҡынса 19 000 саҡрым тәшкил итә.

✓Башҡортостандың Үҙәк һайлау комиссияһы рәйесе Хәйҙәр Вәлиев республика һайлаусылары менән тура бәйләнешкә сыҡты. Билдәләнеүенсә, Межгорье ҡалаһынан тыш, һигеҙ ҡала округы Советына (Ағиҙел, Күмертау, Нефтекама, Октябрьский, Салауат, Сибай, Стәрлетамаҡ, Өфө); 54 муниципаль район һәм 10 ҡала биләмәһе Советтарына (Баймаҡ, Бәләбәй, Благовещен, Дәүләкән, Дүртөйлө, Ишембай, Мәләүез, Туймазы, Учалы, Яңауыл); Асҡын, Белорет, Бишбүләк, Бөрө, Благовар, Йәрмәкәй, Ейәнсура, Ҡалтасы, Кушнаренко, Мәләүез, Нуриман, Салауат районларындағы 41 ауыл биләмәһе Советтарына депутаттар һайлау була. 2-се Инорс бер мандатлы һайлау округы һәм 19-сы Нарыш бер мандатлы һайлау округы буйынса Башҡортостан Республикаһының Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттарын өҫтәмә һайлау тәғәйенләнгән.

✓Башҡортостанда ата-әсәләр мәктәптәрҙә һәм балалар баҡсаларында аҡсаны законһыҙ йыйыу тураһында хәбәр итә ала. Был аҙнала республика Мәғариф министрлығында "ҡыҙыу линия" эшләй башланы. Дүшәмбе - йома иртәнге сәғәт 9-ҙан киске 6-ға тиклем ведомство белгестәре (347) 218-03-28 телефоны буйынса ата-әсәләрҙән шылтыратыуҙар ҡабул итә. Төшкө тәнәфес - көндөҙгө сәғәт 1-ҙән 2-гә тиклем. Башҡортостан юлдаш телеканалындағы "Власть яуап бирә" тапшырыуында мәғариф министры Гөлназ Шафиҡова бының миҙгелле күренеш булыуын билдәләне.

✓ *Туймазы районында йәшәүсе ханым туғанына самолетҡа интернет аша осһоҙло билет алырға теләп, 5 мең һумдан ашыу аҡса күсерә. Билет алыуы тураһында мәғлүмәт тә килә, әммә... билет ялған булып сыға.*



ҺАҠ БУЛЫҒЫҘ!

**Тормошта алдауҙарға ла урын бар икәнен беләбеҙ. Әммә халҡыбыҙ, ни күрһәк тә, ил күргәнде күрербеҙ, тип йәшәп өйрәнгәнлектәнме, һәр төрлө алданыуҙарға ла бик иҫе китмәй, иң мөһиме, һуғыш булмаһын, тип, уртын сәйнәп, ҡайышын ҡыҫыбыраҡ бәйләп йәшәй бирә.**

# РӘХӘТЛӘНЕП...

## төп башына ултырабыҙ



Әшулай ҙа көндәлек тормоштағы алданыуҙарҙан барыбер һаҡланырға кәрәктер ул. Полиция мәғлүмәттәренә ҡараһаң, иҫең китә: республикала халыҡты рәхәтләнеп төп башына ултырталар, имеш. Ана, Ауырғазы районында трассала картуф һатып торған 70 йәшлек пенсионер ҡатындан юлсылар ике биҙрә картуф алып, биш меңлек купюра менән иҫәпләшәләр. Һатыусының ул тиклем сумманан ҡайтарып бирер аҡсаһы булмауын белгәс, күпме бар, шунса сумманы - 1 мең һум алып, ары китәләр. Бары тик аҙаҡтан ғына пенсионер ҡатын 5 меңлек яһалма аҡса менән ултырып ҡалғанын, етмәһә, 1 меңлек ысын аҡсаһынан ҡолаҡ ҡаҡҡанын аңлай.

Ә бына Салауат ҡалаһынан 90 йәшлек пенсионер былтыр дүрт йыл элек телевизорҙан экстрасенстарҙың хеҙмәте тураһында реклама иғланы күреп ҡала ла, уларҙың ярҙамына мөрәжәғәт итә, 40 мең аҡса күсерә. Ошо көндәрҙә уға, йәнәһе лә, Мәскәүҙең хоҡуҡ һаҡлау органдарынан шылтыраталар һәм үҙҙәрен экстрасенс тип атап, мутлыҡ менән шөғөлләнеүсе банданың ҡулға алыныуы, олатайҙың ҡасандыр ошо төркөм хеҙмәте ҡорбаны булыуы һәм уға 4 миллион һум компенсация түләнергә тейешлеге, әммә аҡсаны алыу өсөн төрлө сығымдарҙы ҡаплау кәрәклеге хаҡында хәбәр итәләр. Пенсионер улар әйткән иҫәпкә 575 мең һум аҡса күсерә һәм үҙенең алданғанын бары тик бер нисә айҙан һуң ғына аңлап ҡала.

Пенсионерҙар ғына төрлө мутлыҡ ҡорбаны була икән тип уйлай күрмәгеҙ. Мутлыҡтан һәм алданыуҙан берәү ҙә азат түгел. Мәҫәлән, Туймазы районында йәшәүсе ханым туғанына Санкт-Петербург - Өфө самолетына интернет аша осһоҙло билет алырға теләп, 5 мең һумдан ашыу аҡса күсерә. Билет алыуы тураһында мәғлүмәт тә килә, әммә... билет ялған булып сыға. Быны улар туғаны самолетҡа ултыра алмағас ҡына аңлап ҡала.

Ә бына Стәрлебаш ауылынан 39 йәшлек ҡатын "Авито" интернет сайты аша йөк машинаһына запас частар һатылыуы тураһында иғлан күреп, һөйләшеүҙәр алып бара һәм үҙенә кәрәкле запчастарҙың булыуын белгәс, 27 мең һум аҡса күсерә. Тәжрибәле автоһәүәҫкәрҙә бер ниндәй ҙә шик тыумай. Тик аҡса күсеү менән һатыусы һыуға төшкәндәй юҡҡа сыға. Ғөмүмән, һуңғы ваҡытта "Авито" сайты аша алыш-биреш итеүселәрҙең бик йыш ярыҡ ялғаш эргәһендә ҡалыу осраҡтары йышайҙы. Ошо көндәрҙә Салауат ҡалаһынан 31 йәшлек ҡатын сайт аша Корея автомобилен һатып алырға була. Унын тормош иптәшенә хаҡтың автобаҙарҙағынан күпкә түбәнерәк булыуы хуш килә. Телефон аша аралашҡанда һатыусы машинаны һатып алыусы барлығын, әммә ғаилә аванс күсергән осраҡта, техниканы Өфөнән Салауатҡа килтерәсәген белдерә. Ваҡиғаның бындай боролош алыуын ишеткәс, ҡатын менән ир шунда уҡ автомобиль хужаһының банк картаһына 25 мең һумдарын күсереп тә ҡуя. Шул уҡ көндә килергә вәғәҙә иткән һатыусы бер сәғәттән һуң ҡабаттан шылтыратып, тағы ла 10 мең күсереүҙе һорай, йәнәһе лә, уға ер участкаһы һатып алыу өсөн был ғына аҡса етмәй. Был үтенес салауаттарҙы шикләнергә мәжбүр итә һәм улар алыш-бирештән баш тарта. Һатыусы уларға аҡсаларын 20 минут эсендә кире күсерергә вәғәҙә итеп, карта номерын һорап ала, әммә шунан һуң ул зым-зыя юҡ була. Зыян күреүсе уның телефонына шылтыратып ала алмағас, бер тәүлектән һуң полицияға хәбәр итә.

Мәләүез районының Богородское ауылынан бер ҡатын сусҡа бәрәстәре һатыу тураһында иғлан бирә. Бер нисә көндән һатып алыусы ла табыла һәм хатта ҡуйылған хаҡтан юғарыраҡ хаҡ тәҡдим итә. Үҙенең икенсе ҡалала булыуын, ә хайуандарҙы өләсәһенә бүләк итергә уйлауын әйтә һәм икенсе берәү алып ҡуймаһын өсөн, 15 мең һум аванс күсерергә теләге барлығын белдереп, банк картаһы номерын һорай. Үҙенең картаһы булмағанлыҡтан, ҡатын күршеһенә мөрәжәғәт итә. Әммә ир аҡса күсереү өсөн бер нисә операция башҡарырға кәрәклеген әйтә. Ҡатындар уның ҡушҡанын үтәй, әммә ниндәйҙер бер мәлдә күршеһе шиккә төшә һәм тиҙ генә телефонын һүндереп, банктың ярҙам хеҙмәтенә шылтырата. Шулай итеп, ул үҙенең аҡсаһының күп өлөшөн һаҡлап алып ҡала, әммә 5 меңе менән хушлашырға тура килә.

Белорет районынан ейәненән вундеркинд яһарға тырышыусы өләсәй "экстрасенс"-тарға мөрәжәғәт итеп, 55 мең һум аҡсаһынан ҡолаҡ ҡаға. Ә Өфөнән 76 йәшлек ҡатын үҙенең кешегә изгелек эшләргә тырышыуы арҡаһында алдаҡсылар ҡорбанына әүерелә. Уға урамда йәш кенә ҡатын килеп, сәғәт нисә булыуын һорай. Пенсионер кеҫә телефонын сығарып, экранын күрһәтә. Мөрәжәғәт итеүсе, минең шундай һәләтем бар, мин һеҙҙә боҙом күрәм, ти. Шул ваҡыт икенсе ҡатын килеп, уға ярҙамы өсөн рәхмәттәр уҡый башлай. Пенсионер оҫта ҡуйылған спектаклгә ышанып, боҙомдан нисек ҡотолоп була икәнлеген һораша. "Дауалаусы" боҙомдоң өйөндәге аҡсала булыуын һәм таҙартыу өсөн уларҙы тиҙ генә килтерергә кәрәклеген белдерә. Ышаныусанлығы арҡаһында пенсионер 185 мең һумынан яҙа.

Шулай уҡ социаль хеҙмәткәрҙәр битлеге артына йәшенеп пенсионерҙарҙан аҡса урлаусылар ҙа юҡ түгел. Мәләүез ҡалаһында ике ҡатын аҡсалар үҙгәрәсәк, шуға күрә барлыҡ ҡулаҡсаларҙы алмаштырып ҡалырға кәрәк, тип алдап, бер ҡарсыҡтың 45 мең һум аҡсаһын алып китә. Үҙҙәренең ҡара эшен ҡылғанға тиклем уларҙың береһе пенсионерҙы урамда туҡтатып, үҙен социаль хеҙмәткәр тип таныштыра, уның йәшәү шарттары, сәләмәтлеге менән ҡыҙыҡһына. Бушлай дарыуҙар алыу мөмкинлеге барлығын, әммә быныҡ өсөн ниндәй препараттар кәрәклеген белеү мотлаҡ икәнлеген белдерә. Һуңынан улар пенсионерҙың өйөндә осрашырға һүҙ ҡуйышып, айырыла. Бер ни тиклем ваҡыттан һуң пенсионер өйөнә ҡайтһа, уны ике ҡатын-ҡыҙ көтөп тора. Фатирға ингәс, бушлай дарыуҙар алыу өсөн анкета тултыра башлайҙар, һуңынан деноминация буласағы хаҡында хәбәр итәләр. Улар өйҙә һаҡланған аҡсаларҙың номерҙарын яҙырға тәҡдим итә, йәнәһе, ирҙәгә яңы банкноталар килтерәсәктәр. Пенсионер уларға аҡсаларын бирә, тегеләре һәр банкнотаның номерын яҙып, аҡсаларҙы эскәтер аҫтына тыға. "Социаль хеҙмәткәрҙәр" хушлашып сығып киткәс, пенсионер эскәтер аҫтын ҡарай, әммә купюраларҙан елдәр иҫкән була...

Бындай алдауҙар социаль селтәрҙәргә лә үтеп инеүе бер кемгә лә сер түгел. Уларҙа даими рәүештә ашығыс рәүештә аҡса йәки ярҙам һорап мөрәжәғәт итеүҙәр күбәйҙе. Стәрлетамаҡ ҡалаһынан бер ханыма ла "Бәйләнештә" селтәрендәге бер танышынан ниндәйҙер мәсьәләне хәл итеү өсөн аҡса кәрәклеге тураһында хәбәр килә. Ҡатын аҡса күсерә һәм һуңынан ғына хәл белешеп шылтырата. Асыҡланыуынса, танышына бер ниндәй ҙә ярҙам кәрәкмәгән һәм ул социаль селтәрҙә бер кемгә лә мөрәжәғәт итмәгән булып сыға. Барлыҡ был ваҡиғалар буйынса еңәйәт эше асылған һәм тикшереү, мутлашыусыларҙы асыҡлау бара.

Алдашыуҙар ғына түгел, урлашыуҙар ҙа хәҙер киң таралды. Бигерәк тә йәйгеһен малдар көтөүҙә түгел, ә иркен йөрөнә, уларға "хужа" табылырға ғына тора. Күптән түгел Дыуан һәм Учалы райондарында берәр баш ат юғалыуы тураһында хәбәр итәләр Эске эштәр министрлығының ошо райондарҙағы бүлектәренә. Бындай күренештәр бигерәк тә көтөү ойошторолмаған, малдар ирекле йөрөгән урындарҙа күҙәтелә.

Йәнүдтәрҙә шундай бер аҡыл йәшәй: "Хоҙайым, аҡсалата алыуың өсөн рәхмәт!" Ә башҡорттар: "Башҡа килер бәлә малға килә", - ти. Ике әйтемдән сығып ҡарағанда ла, матди юғалтыу - башҡа килер бәлә эргәһендә бер тин тормай, әлбиттә. Ә шулай ҙа ул бәләне булдырмаҫҡа ла мөмкин бит. Тик... Донъяла төрлө алдаҡҡа ҡоролған реформалар, үҙгәртеп ҡороуҙар, һайлауҙар, һуғыштар булып тора, донъя карусель кеүек әйләнә, тик кеше һаман да шул ылыҡтырғыс тамашала ҡатнашырға атлығып тора...

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ әҙерләне.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Ҡырғыҙстанда үткән Икенсе Бөтөн донъя күсмә халыҡтар уйындарында башҡорт көрәшсеһе Рөстәм Арыҫланов командаға төүге еңеү - алтын миҙал алып килде. Ул алышҡан ҡаҙаҡ көрәшендә барлығы 17 илдән 58 көрәшсе ҡатнашҡан.

✓Рихард Зорге урамындағы урман һыҙатында "Өфө йүкәләре" тигән сәләмәтлек һуҡмағы асылды. Уның оҙонлоғо - 2 километр. Һуҡмаҡ һыҙымында велосипедсылар юлы, футбол майҙансығы һәм гимнастик күнегеүҙәр комплексы ла урынлашҡан.

✓Өфөнөң 90 йәшкә етеүсе бар ҡарттарына ла Рәсәй Президентының махсус ҡотлауы һәм Өфө ҡала округы хакимиәте башлығынан иҫтәлекле бүләктәр тапшырыла. Был көндәрҙә үҙенең 100 йәшлек юбилейын билдәләүсе Бөйөк Ватан һуғышы ветераны Сергей Петров ошондай ҡотлауҙарға лайыҡ булды. Уның оҙаҡ йәшәү сере ябай: бер ваҡытта ла тәмәке тартмаған, алкоголле эсемлек эсмәгән, физик яктан әүҙем булған.

✓Ике йыл эсендә Башҡортостанда 6,5 мең кеше 264 авария хәлендәге торлаҡтан күсерелгән. Граждандарҙы авария хәлендәге торлаҡ фондынан күсереү буйынса адреслы программа 2013 йылда эшләй башланы. Ул 2012 йылдың 1 ғинуарына тиклем йәшәү өсөн яраҡһыҙ тип танылған торлаҡты һүтеүгә иҫәпләнгән. Был - 387 мең квадрат метр. Биш йыл дауамында 28,3 мең кешене иҫке торлаҡтан күсереү күҙаллана. Программаны финанслауҙың дөйөм күләме - 14,3 миллиард һум. 2015 йылдан дөйөм майҙаны 55,4 мең квадрат метрлыҡ торлаҡтан дүрт меңдән ашыу кешене күсереү буйынса өҫтәмә дүрт йыллыҡ проект башланған.

✓Өфөлә ҡуртымға бирелеүсе иң ҡиммәт фатир - 155 мең һум. Ул - К.Маркс һәм Революция урамдары киҫелешендәге йорттоң юғары ҡатында урынлашҡан дүрт бүлмәле студия. Иң арзаны - алты мең һумға "Башҡортостан" лайфстайл үҙәге янындағы йортта бер бүлмәле фатир. "Фатирҙар донъяһы" порталы аналитиктары ҡуртымға биреү баҙарындағы хәлде тикшергәндән һуң, иң ҡиммәт хаҡтар Мәскәүҙә (иң ҡиммәте - 1,9 миллион, иң арзаны - 20 мең һум) һәм Ҡаҙанда (375 мең һәм ете мең һум) булыуын асыҡлаған. Өфө, һәр ваҡыттағыса, рейтинг уртаһында.

ТӨРЛӨҺӨНӨН

# ҺАЙЛАРҒА ҒЫНА ҠАЛДЫ

**Башҡортостанда һайлау бюллетендәре баҫыла башланы. Дәүләт Думаһы депутаттарын һайлауҙа тауыш биреү өсөн бөтәһе алты миллиондан ашыу бюллетень әҙерләнә. Улар рус, башҡорт һәм татар телдәрендә "Белая река" нәшриәтендә баҫыла.**

Республиканың Үҙәк һайлау комиссияһы секретары Марина Долматова һөйләүенсә, бюллетендәр бер-береһенән айырыла. Һәр документҡа участка һайлау комиссияһының мисәте һәм уның ике ағзаһының ҡултамғаһы ҡуйыла. "Быйыл Дәүләт Думаһы депутаттарын һайлау өсөн 182 һайлау участкаһы ойошторолған һәм уларҙа КОИБ-тар эшләйәсәк. Автоматлаштырылған комплекс өсөн бюллетендә мисәт өсөн урын аныҡ билдәләнгән, әммә марка икенсе яғында ҡуйыла, юғиһә, мәғлүмәт уҡылмай. Бер мандатлы округ буйынса бюллетендең алғы яғы аҡ, әммә һаҡлағыс селтәр арткы яғына төшөрөлгән. Бындай документты бөкләргә ярамай, юҡһа, эшкәртҡән саҡта ҡамасаулыҡ тыуҙырасаҡ", - тип аңлатма бирҙе Марина Долматова.

Быйыл яңылыҡ та бар - һайлаусының кем өсөн тауыш биргәнен бер кем дә күрмәһен өсөн бюллетендең яҙыулы яғын эскә ҡаратып бөкләргә кәрәк.

"Бында бөтә республика һәм Өфө ҡала округы Советы өсөн һайлауға бланктар баҫыла. Беҙ әсәнсә йыл ошо заказды үтәйбеҙ. Эш бик ҡыҫҡа ваҡыт эсендә башҡарыла, цех тәүлек әйләнәһенә ике сменала эшләй. Заказ 13 сентябргә әҙер буласаҡ", - тип һөйләне нәшриәт директоры Олег Лищенко.

# РӘСӘЙ КИМӘЛЕНДӘГЕ ЭКСПЕРТТАР

**Өфө ғилми үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты хеҙмәткәрҙәре Рәсәй Фәндәр академияһы экспертары итеп раҫланды**

Улар - Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты директоры вазифаһын башҡарыусы, география фәндәре докторы, профессор Айбулат Псәнчин, филология фәндәре докторы, профессор Фирҙәүес Хисаметдинова, тарих фәндәре докторы Рима Сөләймәнова, институттың лингвистика һәм мәғлүмәт технологиялары лабораторияһы мөдире, башҡорт теленең машина фонды булдырыусы Зиннур Сиражетдинов, филология фәндәре кандидаты Шамил Нафиҡов, филология фәндәре кандидаты Гөлназ Баһауетдинова-Йәғәфәрова. Рәсәй Фәндәр академияһы эксперттары экспертиза объекттарына, шул иҫәптән ғилми-техник программалар һәм проекттарға, ғилми ойошмалар эшмәкәрлегенең ғилми һөҙөмтәләренә, ғилми һәм ғилми-техник һөҙөмтәләргә, фән, фәнни-техник һәм инновация эшмәкәрлеге, интеллектуаль милекте һаҡлау өлкәһендәге норматив-хоҡуҡи акттарға, ғилми-техник ҡарарҙарға экспертиза үткәреүҙә әүҙем ҡатнашасаҡ.

Эксперттар көҙ көнө үк эшкә тотонасаҡ. 2016 йылдың ноябренән 2017 йылдың февраленә тиклемге осор айырыуса ҡыҙыу булмаҡсы. Рәсәй Фәндәр академияһы төрлө ведомствоға ҡараған дәүләт ойошмалары эшмәкәрлегенең 100 һөҙөмтәһенә экспертиза үткәрергә һәм федераль ҡаҙна аҡсаһы иҫәбенә булдырылған биш мең ғилми һәм ғилми-техник һөҙөмтәләргә йомғаҡ яһарға тейеш. Бынан тыш, Рәсәй Фәндәр академияһы эксперттары фәнни, фәнни-техник һәм инновация эшмәкәрлеге, интеллектуаль милекте һаҡлау өлкәһендә норматив-хоҡуҡи акттарҙы анализлауға йәлеп ителә.

"100 ЙЫЛЛЫҠҠА - 100 ОБЪЕКТ"

# БАТЫРҘАРЫБЫҘҒА - ҺӘЙКӘЛ



**Һорау: "Үҙегеҙҙең районығыҙҙа, ауылығыҙҙа, ҡалағыҙҙа, Башҡортостандың баш ҡалаһында оло юбилейға арнап, ниндәй объекттар төҙөлөүе, реконструкцияланыуы мөһим, тип иҫәпләйһегеҙ?"**

***Фәнирә ҒАЙСИНА, РФА-ның Өфө ғилми үҙәге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының ғилми хеҙмәткәре:*** Башҡортостандың 100 йыллығына арнап 100 объект төҙөү йәки реконструкциялау акцияһында, минеңсә, тәү сиратта, Салауат Юлаев проспектындағы "Әр-Рәхим" мәсетен төҙөп бөтөрөү зарур. Сөнки барлыҡ мосолман илдәре үҙҙәренең мөһабәт һәм күҙ яуын алып торған мәсеттәре менән хайран итә, ә беҙҙә шулай "аһ" итерлек мәсет комплексы һаман да юҡ. Ләкин бының менән генә сикләнергә ярамай, ни тиһәң дә, Өфөлә мәсеттәр юҡ кимәлендә. Халҡы миллиондан ашҡан ҡала өсөн 7-8 генә мәсет бик аҙ. Бөгөн халыҡ диндә танып, Аллаһы Тәғәләнән һыйыныу һәм яҡлау эҙләгәндә, барлыҡ мосолмандарҙың ихтыяжын ҡәнәғәтләндереү зарур, тип уйлайым. Бының өсөн улар ҡаланың бер осонан икенсеһенә түгел, ә яҡын-тирәләге мәсеткә йөрөргә тейеш.

Икенсенән, оптималләштереү һылтауы менән республика буйынса күпме мәктәп, медпункт, поликлиникалар ябылды. Уларҙы нисек тә ҡабаттан асыу ысулдарын табырға кәрәк, минеңсә. Мосолмандар өсөн хәләл ашханалары булған айырым поликлиникалар, мәктәптәр, балалар баҡсалары төҙөлһә лә насар булмаҫ ине.

"100 йыллыҡҡа - 100 объект" акцияһы аныҡ ҡулланылыштағы объекттарҙы ғына күҙаллаймы икән, әллә уға рухиәт талабындағы объекттар ҙа инәме? Әгәр шулай булһа, мин йылдар дауамында башҡорт халҡының билдәле шәхестәренә, батырҙарына һәйкәл, бюстар ҡуйыу тураһында күтәрелгән тәҡдимдәрҙе тап бөгөн тормошҡа ашырыу ваҡыты етте, тип уйлайым. Сөнки республиканың оло юбилейында тап башҡорт батырҙары данланырға тейеш, минеңсә.

**Шәрифә САЛАУАТОВА**
**яҙып алды.**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ҺАЛЫМ КАНИКУЛЫ

**Бәләкәй бизнесҡа һалымдың нуль ставкаһына мөмкинлек биргән республика законы бер йыл эшләй. Шуға таянып, Башҡортостанда нисә эшҡыуарҙың "һалым каникулдары" менән файҙалана алаҫағы иҫәпләп сығарылды.**

Башҡортостан буйынса Федераль һалым хеҙмәте идаралығында билдәләүҙәренсә, сәнәғәт һәм көнкүреш хеҙмәтләндереүе тармағында тәүгә теркәлгән шәхси эшҡыуарҙарға ике йыллыҡ каникулдар ҡаралған. Льгота патент (аванс) йәки ябайлаштырылған системаны ҡулланған бәләкәй предприятиеларға бирелә. Ведомство мәғлүмәттәре буйынса, 13 айҙа республикала 15 меңгә яҡын эшҡыуар тәүгә тапҡыр теркәлгән. Шуларҙан 470 предприятие патент буйынса нуль ставкаһын алған. Дөйөм алғанда, улар 8 миллион һумды экономиялаған."Парикмахерҙарға һәм косметологтарға - 245, репетиторҙарға - 51, тегеү осталарына - 38, фитнес-тренерҙарға 24 патент бирелгән. Уларҙың ярҙыны тиерлек Өфөлә һәм Стәрлетамаҡта теркәлгән", - тип хәбәр иттеләр Башҡортостан буйынса Федераль һалым хеҙмәте идаралығында. Әлеге мәлдә ябайлаштырылған системаны ҡулланған 688 шәхси эшҡыуар тураһында һүҙ йөрөтөргә мөмкин. Улар - ауыл хужалығында, мәғлүмәт технологиялары, мәҙәниәт һәм спорт өлкәһендә эшләгән фирмалар, беҙрәханалар һәм матурлыҡ салондары, event-агентлыҡтар (ял һәм күңел асыу). Һалымдарҙың ябайлаштырылған системаһы буйынса льготаға эйә булыусыларҙың аныҡ һаны 2017 йылдың 30 апреленән һуң билдәле буласаҡ. Ошо ваҡытҡа һалым түләүселәр килемдәре тураһында отчет бирергә тейеш.

# ЙӘШ ҒАИЛӘЛӘР ӨСӨН

**Башҡортостанда ипотека кредиттары буйынса өҫтәмә субсидиялау индерелә. Проект ипотека ставкаһын йылына 10 процентҡа тиклем өҫтәмә субсидиялау иҫәбенә төҙөлөүсе торлаҡҡа ихтыяжды стимуллаштырыуға иҫәпләнгән.**

Республика Хөкүмәте Президиумы ултырышында хәбәр итеүҙәренсә, проект 2016 йылдың 1 июненән федераль программа буйынса бирелгән ипотека кредиттары буйынса процент ставкаһын өҫтәмә субсидиялауҙы күҙ уңында тота. Программала ҡатнашыусыларҙың исемлеге "Рәсәй ғаиләһе өсөн торлаҡ" программаһында ҡатнашыуға хоҡуҡлы граждандар менән сикләнгән. Бында торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға мохтаждар сифатында иҫәптә тороусылар, шулай уҡ 35 йәшкә тиклемге йәш ғаиләләр һәм күсемһеҙ милектәре булыу-булмауға ҡарамаҫтан, ике һәм унан да күберәк балиғ булмаған бала тәрбиәләгән ғаиләләр инә. Сара республика ҡаҙнаһы аҡсаһы иҫәбенә финанслана. 2016 йылда ошо маҡсатҡа 27,7 миллион, киләһе йылдарҙа йыл һайын 50 миллион һум бүлеү ҡаралған. Башҡортостан Хөкүмәтенең матбуғат хеҙмәтендә аңлатыуҙарынса, финанслау күләменән сығып, программаға 1800 самаһы кредитты индерергә мөмкин. Ҡабаттан иҫәпләгәндә, өҫтәмә торлаҡ төҙөү яҡынса 97 мең квадрат метр тәшкил итәсәк.

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Рәсәй банкының 200 һәм 2000 мең һумлыҡ яңы банкноталары өсөн символдар һайлау буйынса конкурстың финалына сыҡҡан ҡалалар иғлан ителде. Рәсәй банкының сайтында хәбәр итеүҙәренсә, исемлектә Владимир, Волгоград, Алыҫ Көнсығыш, Иркутск, Ҡаҙан, Түбәнге Новгород, Петрозаводск, Севастополь, Сергиев Посад, Сочи бар, әммә Өфө төшөп ҡалған. 5 сентябрҙә һайлап алыуҙың өсөнсө этабы башланды.

✓Бөгөн Өфөнөң И. Якутов исемендәге паркында республика умартасылары ҡатнашлығында "Баллы төбәк" йәрминкәһе ойошторола. Быйылғы йәрминкәлә умартасылыҡ буйынса бушлай кәңәштәр һәм оҫталыҡ дәрестәре ҡаралған. Һораусарға Башҡорт дәүләт аграр университеты профессорҙары, шулай уҡ ветеринар-санитар экспертиза лабораторияһы вәкилдәре яуап бирә. Йәрминкәне ойоштороусылар - Башҡортостандың Умартасылыҡ һәм апитерапия буйынса ғилми-тикшеренеү үҙәге менән берлектә Өфөнөң Совет районы хакимиәте.

✓Бөгөн Өфөләге "Ҡашҡаҙан" мәҙәниәт һәм ял паркында "Беренсе класс уҡыусылары аллеяһы" барлыҡҡа киләсәк. Бында "Балалар - беҙҙең киләсәгебеҙ" тип аталған байрам уҙғарыла. Ойоштороусылар - "Уфанет" компанияһы һәм ҡала хакимиәте. Тематик аллеяны яҡынса 12 мең уҡыусының фотоһүрәттәре биҙәйәсәк. Былтыр Өфөлә 11 мең беренсе класс уҡыусыһы 360 метрлыҡ аллеяның геройы булды.Ойоштороусылар билдәләүенсә, алты йыл эсендә проект илдә балаларҙың көтөп алған байрамдарының береһенә әүерелдә. Быйыл акция 30 ҡалала үткәрелә. Байрам көндөҙгө сәғәт 12-лә башлана.

✓Башҡортостан халҡына кизеүгә ҡаршы прививка яһай башланылар. Һаулыҡ һаҡлау министрлығының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, быйыл белгестәр 1,2 миллион кешегә прививка яһарға ниәтләй (республика халҡының 30 проценты). Шул иҫәптән 300 мең балаға прививка эшләнәсәк. Өлкәндәр араһында тәү сиратта медицина һәм мәғариф ойошмалары (140 меңдән ашыу), транспорт өлкәһе (11 мең самаһы), торлаҡ-коммуналь хужалыҡ (өс мең самаһы) хеҙмәткәрҙәренә, 60 йәштән үткән кешеләргә һәм хроник сирлеләргә прививка яһала.

ЙӘШЛЕК ЙӘШНӘҮҘӘРЕ

# ЗАМАНЫБЫҘ МӘҒРИФӘТСЕЛӘРЕ

**Башҡорт йәштәрен туплаған ойошмалар үткәргән төрлө сараларҙа ҡатнашып, уларҙың эшмәкәрлеген йыш ҡына гәзит биттәрендә яҡтыртып торабыҙ. Быға тиклем был осрашыуҙар йыр-бейеүгә, спорт ярыштарына арнала, ял итеүгә ҡорола, һәр ойошма үҙ сараһын айырым уҙғара ине. Ниһайәт, йәштәр ошо ҡалыптан сығып, бөтөнләй яңы юҫыҡта - тиҫтерҙәре өсөн мәғариф киңлеген булдырыу йәһәтендә уртаҡ көс менән эш башлап ебәрҙе. Республика Хөкүмәте фатихаһы менән Мәскәү һәм Санкт-Петербург ҡалаларындағы Башҡортостан студенттары һәм аспиранттары ассоциацияһы, Силәбе өлкәһенең Башҡорт йәштәре иттифаҡы, Башҡорт асыҡ КВН лигаһы, БР Йәш яҡташтар берлеге ассоциацияһы, "Башҡорт проекттары" берләшмәһе #UfaForum йәштәр мәғариф форумы уҙғарҙы. Башҡортостандың төрлө ҡала һәм ауылдарынан, Силәбе өлкәһенән һәм Татарстан Республикаһынан, Мәскәү һәм Санкт-Петербург ҡалаларынан йыйылған 600-ҙән ашыу кеше өс көн дауамында белемен камиллаштырҙы, үҙ-ара танышып аралашты.**



## Был һабантуй түгел!

#UfaForum йәштәр мәғариф киңлеге үткәрелеүе тураһында интернет селтәрендә йәшен тиҙлеге менән таралған мәғлүмәт бөтәһенең дә иғтибарын йәлеп итте. Уны ойоштороған йәштәрҙең "Был һабантуй түгел!" тигән ҡыйыу белдереүе лә күптәрҙә ҡыҙыҡһыныу уятты. Хатта сараға арнап шиғыр яҙыу конкурсында ҡатнашыусыларҙың береһе Марат Дауытов: "Башҡорттарым, #UfaForum кәрәк, #UfaForum кәрәк! Арабыҙҙа һабантуй күп, мәғрифәтселек һирәк!" - тигән юлдар ҙа ижад итте. Әйткәндәй, был сара ярҙамында тиҫтерҙәренә уңыш ҡаҙанырға, белемен арттырырға, бизнес һәм яңы технологияларҙың айышына төшөнөргә, үҙ юлын табырға булышлыҡ итергә ниәтләнгән йәштәрҙе заманыбыҙҙың мәғрифәтселәре, тип атарлыҡ. Форумға Рәсәйҙә һәм республикала билдәле иң көслө белгестәрҙе саҡырып, бушлай дәрестәр үткәртеүгә өлгәшеүселәрҙе башҡаса атау мөмкин дә түгел шул. "#UfaForum" сараһының төп маҡсаты - йәштәргә һәр эштә беренсе, уңышлы, лидер булыу өсөн белемен камиллаштырыуҙың, өлгөлө шәхестәрҙең тәжрибәһен уртаҡлашыуҙың мөһимлеген аңлатыу ине. Ҡатнашыусылар өс көн дауамында бизнес, үҙ эшеңде асыу, мәғариф, социаль технологиялар, инновациялар, PR, үҙеңде үҫтереү, мәҙәниәт, әҙәбиәт, башҡа көнүҙәк мәсьәләләр буйынса лекция һәм тренингтар тыңланы, белгестәрҙең яуабын ишетте һәм фекер алышты. Яңы белем көсәп килеүселәр араһында мәктәп уҡыусылары, студенттар һәм хатта тормошта үҙ юлын табып, эшләп йөрөүселәр ҙә күп ине. Шуларҙың береһе БДУ профессоры, философия фәндәре докторы Гүзәл Вилданова форум тамамланғас, интернетта былай тип яҙып сыҡты: "Мин эҙләнеүсән кеше, ошо эҙләнеүҙәрем мине #UfaForumға алып килде лә инде. Сығыштар ҡыҫҡа булыуға ҡарамаҫтан, тулы, мәғлүмәтле, мәғәнәле, практик әһәмиәтле ине. Уңышлы бул, лидер бул, һинең ҡулыңдан барыһы ла килә, тигән фекер һәр сығыштың төп мәғәнәһен тәшкил итте. Быларҙы тулыландырып, тағы ла шуны әйтер инем: бер кем дә ҡапыл ғына яҡшы, тәрән аҡыллы йәки көслө булып китә алмай. Был сифаттар барыбыҙға ла тыуымыштан бирелһә лә, уларҙы яйлап асырға кәрәк. Мин форумда ҡатнашҡан оло быуын кешеләренең береһе булдым, ҡыҙыҡлы шәхестәр менән таныштым, өс баламды ла алып килдем. Ойоштороусыларға рәхмәт!" Ысынлап та, тәүге тапҡыр ғына үткәрелеүгә ҡарамаҫтан, #UfaForum йәштәр мәғариф киңлеге олоһоноң да, кесеһенең дә күңеленә хуш килде. Башҡорт йәштәренең ошондай эшлекле осрашыуҙарға, тәрән белем тупларлыҡ етди сараларға әҙерлеген күреп, ойоштороусыларҙың да күңеле күтәрелде.

#UfaForum сараһын асыу тантанаһында БР йәштәр сәйәсәте һәм спорт министры Андрей Иванюта һәм уның урынбаҫары Руслан Хәбибов, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың Мәғариф, мәҙәниәт, спорт һәм йәштәр сәйәсәте комитеты рәйесе Эльвира Айытҡолова, Өфө ҡала округы хакимиәтенең Йәштәр эштәре буйынса комитеты рәйесе Радик Юлбаев, БР мәғариф министры урынбаҫары Венера Вәлиева ла был матур инициативаны хуплауын белдерҙе. Иң әүҙем, фекерле йәштәрҙе бер урынға туплаған сараны киләсәктә даими ойоштороrға ниәтләнеүҙәрен дә еткерҙеләр. "Бында бөгөн үҙ һөнәренең оҫталары, үҙ артынан башҡаларҙы әйҙәртеүсе шәхестәр йыйылған. Форумдың программаһын тормош ҡуйған һынауҙарға яуап бирергә ярҙам итерлек итеп төҙөүегеҙ иғтибарға лайыҡ, бында алған белемдәрегеҙҙе башҡа тиҫтерҙәрегеҙгә лә еткерегеҙ. Йәштәрҙең төрлөһө бар, һеҙҙең кеүек белем даирәһен киңәйтеп, йәмғиәткә файҙалы эштәр атҡарырға тырышып торғандары ла, үҙен генә хәстәрләгәндәре лә етерлек. Утыҙ йәшкә етеп тә бер ниндәй яҡшылыҡ та, насарлыҡ та эшләмәгән битарафтар ҙа юҡ түгел. Матур башланғыстың киләсәктә ҙур проектҡа әйләнеүен теләйем", - тине үҙ сығышында Эльвира Айытҡолова.

БР йәштәр сәйәсәте һәм спорт министры Андрей Иванюта һәм уның урынбаҫары Руслан Хәбибов әүҙем, алдынғы ҡарашлы йәштәр менән берлектә эшләргә, яңы проекттарға федераль бюджеттан гранттар яуларға ярҙам итергә әҙерлектәрен белдерҙе. Бынан тыш, ауыл йәштәренең мәнфәғәттәрен ҡайғыртыу йәһәтенән ниндәй саралар күрелеүе, йәштәрҙең бөтә йәмәғәт ойошмаларын бер урында туплаусы "Йәштәр йорто" бинаһы ҡайҙа урынлашасағы, республикала үтәсәк спорт ярыштары тураһында ла яуап ишеттек. Ҡыҫҡаһы, #UfaForum йәштәр мәғариф киңлеге нигеҙендә власть органдары һәм башҡорт йәштәре үҙ-ара аңлашылыҡ майҙансыҡ булдырылыуы, киләсәктә форумды тағы ла ҙурыраҡ масштабта үткәреү күҙ уңында тотолоуы ҡыуандырҙы.

## Иң шәп спикерҙар килде

#UfaForum йәштәр мәғариф майҙансығында бөтәһе ҡырҡ биштән ашыу белгес-спикер сығыш яһаны. Тәүге көндә РФ Милләттәр эше буйынса федераль агентлыҡтың идаралыҡ етәксеһе урынбаҫары Александр Ненашев, СКОЛКОВО Мәскәү идара итеү мәктәбе стартап академияһы педагогы Игорь Дубинников, "Exact Farming" компанияһында эшләүсе Илдар Кинйәбулатов лекция һөйләне һәм йәштәр менән аралашты. Сығыш яһаусыларҙың һәр һүҙен ҡолағына киртеп ултырған йәштәр бигерәк тә Игорь Дубинниковтың "Аңлы эшҡыуарлыҡ" тигән тема буйынса сығышын яратып ҡабул итте. Спикер был тормошта үҙ урыныңды табыу ун йыл ғүмереңде экономиялай һәм шәхес булараҡ үҫешергә ярҙам итә, тигән фекерҙә. Үҙ-үҙеңде табыу, маҡсаттарыңды билдәләү өсөн тәү ҡарамаҡҡа ябай ғына күренгән тесты үтергә кәрәк. "Һин миңә ниндәй файҙа килтерә алаһың? Эшеңде ташлап, матди яҡтан мохтажлыҡ кисермәй йәшәй башлаһаң, нимә менән шөғөлләнер инең? Бер бай туғаның ун һигеҙ миллион аҡсаны һеҙгә васыят итеп ҡалдырған, тик был аҡсаның яртыһын ҡайҙалыр хәйер итеп тапшырырға, ҡалған туғыҙ миллионын ғына үҙ мәнфәғәтеңдә тотонорға ярай. Был аҡсаларҙы кемгә бирер һәм үҙ өлөшөгөҙҙө нимәгә тотонор инегеҙ?" - тигән һорауҙарға йәштәр бергәләп яуап эҙләне. Игорь Дубинников әйтеүенсә, күптәрҙең яуаптары бөтөнләй бер-береһенә бәйле булмай сыға, был тормошта үҙ юлын тапҡан бик һирәктәр генә тап килгән яуаптар яҙа. Шуға күрә, һәр кем түбәндәге иҫкәрмәләрҙе хәтереңдә торға тейеш: "Тормош - ул марафон. Һинә әле нисә йәш булыуы мөһим түгел. Шәхес - әйткән һүҙе, эше һәм ҡылған ғәмәлдәре өсөн яуап бирә алған кеше. Ваҡыт - бик сикләнгән ресурс. Сәғәт һәм компас икеһе лә мөһим. Һәм оҙайлы ваҡытҡа иҫәпләнгән стратегия булырға тейеш". Мәскәү ҡунағынан һуң йәштәрҙе тағы ла ҡыҙыҡлыраҡ аралашыу көтә ине. Яҡташыбыҙ, Мәскәүҙә "Exact Farming" компанияһында эшләүсе Илдар Кинйәбулатов ауыл хужалығы өлкәһендә кәрәкле һәм мөһим IT-технологиялар уйлап сығарыу буйынса эшләүе, нефть осоро үткәс, Башҡортостан ниндәй юҫыҡта үҫешәсәге тураһында мауыҡтырғыс лекция һөйләне. Унан һуң, #UfaForum йәштәр мәғариф киңлегендә ҡатнашыусыларға уйында йөрөткән идеяларын тормошҡа ашырыу өсөн "Umarta" проекттар оҫтаханаһында эшләү тәҡдим ителде.

(Дауамы 6-сы биттә).

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Ангина

❖ 100 мл йылы һыуға 1 балғалаҡ картуф крахмалы, 1 балғалаҡ глицерин, 2-3 тамсы йод ҡушып, яҡшылап болғатырға ла, тамаҡты сайҡатырға. Йоторға ярамай! Процедураны көнөнә 3-4 тапҡыр ҡабатларға. 2-3 көндән ангина үтә.

### Стоматит

❖ Стоматит, гингивит һәм ауыҙ ҡыуышлығының башҡа сирҙәрен тиҙерәк дауалау өсөн көнөнә бер нисә тапҡыр аир тамыры сәйнәргә кәрәк. Сәйнәгәндә бүленеп сыҡҡан төкөрөктө йоторға.

### Остеохондроз

❖ Остеохондроз ваҡытында күп осраҡта ауыртыу йөрәккә бирә һәм кеше йөрәгем ауырта тип уйлап хаталана. Бындай ваҡытта ябай ғына туҡыма күлдәк кейергә һәм ишектең ағас яңағына арҡа менән "ышҡылырға" кәрәк. Был үҙенсәлекле массаж түбәндәгесә яһала: арҡаны тәүҙә уңға-һулға, һуңынан өҫкә-аҫҡа йөрөтәһең. Умыртҡа бағанаһына баҫым яһарға ярамай.

### Температура күтәрелһә…

❖ Йөн туҡымаға аш һеркәһе, зәйтүн һәм камфара майҙары ҡатнашмаһын һөртөп, төнгөлөккә күкрәккә ҡуйырға.

### Стенокардия

❖ 5-6 тамсы аҡ шыршы майын (пихтовое масло) усҡа тамыҙып, уның менән йөрәк тәңгәлен ыуғаҙ, стенокардия өйәнәге тиҙ үтер.

### Люмбаго

❖ Люмбаго - бил тәңгәлендәге ҡыҫҡан ауыртыу өйәнәге, күпселектә бил тәңгәле умыртҡа-ара дискылары остеохондрозы һөҙөмтәһендә була. Был осраҡта "Тройной" одеколонын, дарыухананан алынған 2 флакон бесәй үләне (валериана) төнәтмәһен, 3-4 бөртөк әсе борос ҡуҙаҡын ҡушып, 5 көн төнәтергә. Һыҙлаған урындарға һөртөргә. Был урындар ныҡ әсетер, ә быны ауыртыу үтер.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

✓ *Лев Толстойҙың: "Орлоҡ күренмәй, әммә унан ҙур ағас үҫеп сыға. Шуның кеүек фекер ҙа һиҙелмәй, әммә фекерҙән кешелек тормошондағы бөйөк ваҡиғалар үҫеп сыға", - тигән һүҙҙәре бар.*



ЙОЛАЛАРЫБЫҘ

# ХАЛЫҠ МЕДИЦИНАҺЫ

XIX быуаттың урталарына тиклем башҡорттар нигеҙҙә малсылыҡ менән көн күргән. Һунарсылыҡ та киң таралған булған. Шуға ла халыҡ медицинаһында байтаҡ дауалар хайуандарҙан алынған. Һөт продукттары, йорт һәм ҡырағай хайуандарҙың ҡайһы бер ағзатуҡымалары, физиологик шыйыҡсалары ҡулланылған.

Һөт продукттарынан ҡымыҙ дауалау сараһы булараҡ айырыуса ҙур әһәмиәткә эйә булған. Был ғәжәп тәмле лә, енелсә иҫерткес эсемлек бик күптән билдәле. Боронғо кусмә халыҡтар - скифтар, монголдар һәм башҡа дала халыҡтары ла ҡымыҙҙы белгән. Бынан ике мең ярым йыл элек йәшәгән атаҡлы грек тарихсыһы Геродот та ҡымыҙ хаҡында яҙған. Бөгөн дә ҡымыҙ киң таралған эсемлек. Тарихтан күренеүенсә, ҡымыҙ дауа булараҡ тәү башлап башҡорт халҡында ҡулланылған. Шуға күрә тәүге ҡымыҙ дауаханаларының Башҡортостан ерендә барлыҡҡа килеүе осраҡлы күренеш түгел. Д.П. Никольский: "...башҡорттар иҫәпләүенсә, нык ябыҡҡан, хәлһеҙләнгән организмды аяҡҡа баҫтырыуҙа, көс һәм һаулыҡты ҡайтарыуҙа ҡымыҙ иң яҡшы сара", - тип яҙа. Башҡорттар ҡымыҙҙы нык ябыҡҡанда, ҡан аҙайғанда, үпкә сирләгәндә, боғаҡ ауырыуы булғанда, нервылар ҡаҡшағанда эскән. Ҡайһы бер ололар иҫәпләүенсә, ҡымыҙ бөтөн ауырыуҙарҙан да дауалай. Әгәр сирле кешегә йәйге ваҡытта ҡымыҙ эсеп тә һаулыҡ ҡайтмаһа, тимәк, уның хәле үтә етди.

Дауалау өсөн ҡулланыла торған ҡымыҙҙы башҡорттар үҙенсәлекле әҙерләгән. Әгәр кәйеф күтәреү, һыуһынды баҫыу өсөн ҡымыҙ әҙерләгәндә бейә һөтөнә һыу өҫтәлһә, дауа ҡымыҙы бейә һөтөнән генә яһалған. Әле генә һауып алынған бейә һөтөн күн йәки ағас һауытҡа һалып, ҡымыҙ әсеткеһе өҫтәп, махсус бешкәк менән оҙаҡ ҡына бешкәндәр, 2-3 көндән һуң ҡымыҙ ҡулланыуға әҙер булған.

Ҡымыҙҙың шифалы булыуы тураһында беренсе рәсми хәбәрҙәр XIX быуат урталарында була. 1843 йылда баҫылып сыҡҡан "Нечто о кумысе" тигән мәҡәлә илебеҙ йәмғиәтендә айырыуса ҙур резонанс тыуҙыра. Уның авторы - табип, атаҡлы ғалим, яҙыусы, этнограф, киң билдәле булған "Рус теленең аңлатмалы һүҙлеге" тигән монументаль хеҙмәттең төҙөүсеһе В.И. Даль. Ырымбурҙа хеҙмәт иткәндә ул башҡорттар менән күп аралаша, ҡымыҙ эсә, уны өйрәнә лә. Телгә алынған мәҡәләһендә Даль ҡымыҙҙы маҡтай. "Ҡымыҙҙы теләһә ниндәй ваҡытта, күпме теләһәң, шул тиклем эсеп була, әммә ул бер ҡасан да эсте күптермәй, аш һеңдереү юлында бер ниндәй ауырлыҡ тыуҙырмай. Быңа ни өсөн ашҡаҙан туҡлыҡлы һәм еңел үҙләштерелеүсән аҙыҡҡа мохтаж булғанда, ҡымыҙ үҙенә генә хас файҙа бирә. Үпкә һәм тын юлдарының хроник ауырыуы булғанда, ҡымыҙ бигерәк шифалы. Ҡымыҙҙың ыңғай тәьҫире бер аҙнанан, ҡайһы ваҡыт иртәрәк тә беленә башлай. Ҡымыҙ эскәндән һуң шат күңеллелек, һаулыҡтың яҡшырыуын һиҙәһең, кешенең йөҙө матурлана. Минеңсә, ҡымыҙҙы алыштырырлыҡ башҡа бер ниндәй ҙә ашамлыҡ-эсемлек табыуы мөмкин түгелдер", - тип яҙа Владимир Иванович.

Ҡымыҙҙы башлап Н.В. Постников өйрәнә. Уның ғилми тикшеренеүҙәре донъя күргәс, Башҡортостанға үпкә сирлеләрҙең ағымы көсәйә. Бөйөк рус яҙыусылары Л.Н. Толстой, А.П. Чехов Башҡортостанға килеп, ҡымыҙ эсеп һаулығын яҡшырта.

**Варис ҒҮМӘРОВ.**
**"Башҡорт халыҡ медицинаһы".**

ЙӘШЛЕК ЙӘШНӘҮҘӘРЕ

# ЗАМАНЫБЫҘ МӘҒРИФӘТСЕЛӘРЕ

**(Башы 5-се биттә).**

### Икенсе көндө...

#UfaForum сараһының икенсе көнөндә бер юлы өс майҙансыҡ эш башланы. Күптәр өсөн шәмбе ял көнө булыуға ҡарамаҫтан, иртүк килеп еткән спикерҙар: филология фәндәре кандидаты, БДУ-ның өлкән уҡытыусыһы Искәндәр Сәйетбатталов, АҠШ-та үҙенең "Code Knight" IT компанияһын асҡан Денис Уйылданов, БР Гуманитар тикшеренеүҙәр институтында этнология бүлеген етәкләүсе, тарих фәндәре кандидаты Юлдаш Йосопов тәүге лекцияларҙы башлап ебәрҙе. Был көндә #UfaForum йәштәр мәғариф киңлегендә Милләттәр эше буйынса федераль агентлыҡ белгесе Азат Бердин, Малайзияла грант буйынса белем алыусы яҡташыбыҙ Раушания Юнысова, "Орбита" IT мәктәбе уҡытыусыһы Марат Әхмәтшин, "Вымпелком" ойошмаһының тышҡы коммуникациялар буйынса әйҙәүсе белгесе Татьяна Славкина, Башҡортостанда "Һин - эшҡыуар" программаһының координаторы Елена Петрова, "Арғымаҡ" этно-рок төркөмө солисы Ринат Рамазанов, Германияла Johannes Gutenberg-Universitat Mainz аспиранты Лира Ниғмәтуллина, журналист, эшҡыуар Гөлдәр Ишҡыуатова, Берләшкән Милләттәр Ойошмаһы хеҙмәткәре Айһылыу Йәнтурина, шәхси эшҡыуар Ренат Хилажев, "ECM" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәттең баш технологы Тимур Иҙрисов, "Неовакс" компанияһы етәксеһе Наил Яҡупов, этикет буйынса белгес Әлиә Мәмбәтова, БР Драматургия һәм режиссура үҙәгенең генераль директоры Әлиә Яхина, халыҡ-ара FMCG компанияһында төп клиенттар менән эшләүсе менеджер Ринар Тавхутдинов, "Керн" ғилми-производство предприятиеһының генераль директоры, "Инновацион проекттар, инвестициялар һәм хәүефтәр менән идара итеү" программаһы буйынса MBA дәрәжәһенә эйә Камил Хисмәтуллин, "Таргин Механосервис" яуаплыгы сикләнгән ойошманың генераль директоры Рәмил Хисмәтуллин, кинопродюсер Рияз Исхаков, Рәсәйҙә "YouTube" каналында видеоның популярлығын арттырыу буйынса белгес Эльдар Ғөзәйеров, ӨДНТУ-ның технопаркы, Samsung IT мәктәбе уҡытыусыһы, физика-математика фәндәре кандидаты Руслан Исаев, театр режиссеры һәм педагог Зиннур Сөләймәнов, "Муравейник" интернет-маркетингы студияһы етәксеһе Андрей Буйлов һәм башҡа спикерҙар бик йөкмәткеле, файҙалы һәм мауыҡтырғыс лекцияларын һөйләне, тренингтар ойошторҙо. Уның араһында башҡорт әҙәбиәте менән ҡыҙыҡһыныусылар Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаев, шағирәләр Лариса Абдуллина, Таңсулпан Рәсүл ҡатнашлығында түңәрәк өҫтәлгә йыйылды һәм "Башҡорт поэзияһында менталитет сағылышы" темаһына әңгәмә ҡорҙо.

#UfaForum йәштәр мәғариф киңлегендә сығыш яһаған спикерҙар тураһында һөйләгәндә, Камил һәм Рәмил Хисмәтуллиндарҙың "Эре холдингтар һәм вертикаль интеграцияланған корпорациялар сиктәрендә инновацияләр һәм стартаптарҙы үҙләштереү ысулдары" темаһына арналған бер сәғәтлек лекцияһын телгә алмай булмай. Эре компаниялар менән етәкселек итеп, уларҙы юғары үҫеш кимәленә еткереү йәһәтенән бик тәжрибәле спикерҙар үҙ эшен асырға теләгән йәки инновацион проекттарын тормошҡа ашырыу өсөн гигант предприятиеларға мөрәжәғәт итергә уйы булған йәштәргә фәһемле тренинг үткәрҙе. Хатта иҡтисад, бизнес өлкәһенән алыҫ торған кеше лә төшөнөрлөк итеп аңлатҡан шәп спикерҙарҙың тренингтарына бүтәндәр долларлап аҡса түләп йөрөүен иҫәпкә алһаң, #UfaForumға килгән йәштәргә көнләшергә сәбәп бар. Ғөмүмән, #UfaForum йәштәр мәғариф форумының икенсе көнө ошондай иҫтә ҡалырлыҡ дәрестәргә бай булды.

### Өсөнсө көндө...

#UfaForum йәштәр мәғариф киңлегенә йомғаҡ яһала торған көндә иртәнсәктән алып "Президент отель" ҡунаҡханаһының "Канцлер" һәм "Парламент" конференциялар залында спикерҙар сығыш яһай торҙо. Был көндә йәштәр Хәйбулла районы онкологы Даян Солтанғужиндың "Ауыл-райондарҙа кешеләр һәм кадрҙан потенциалын күтәреү" темаһына арналған сығышын тыңланы. Бынан тыш, #UfaForum йәштәр мәғариф киңлеге директоры Әлфир Илбактин, "АйВи-Системз" компанияһы вәкиле Виталий Иванов, Сәйәси мәғлүмәт үҙәге аналитигы, сәйәси консультант Азамат Лоҡманов, "Башнефть" пресс-секретары Руслан Йосопов, "Опора России" Башҡорт региональ бүлегенең директор вазифаһын башҡарыусы Тимур Лоҡманов, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай ҡарамағындағы Йәштәр йәмәғәт палатаһы ағзаһы, "БР йәш журналист мәктәбе" проекты етәксеһе Елена Арямнова, "Восток-1" SSM-агентлығын асыусы Антон Горбик һәм Татьяна Комарова, "Тамыр" балалар студияһы тапшырыуҙарын алып барыусы Ләйсән Мәзитованың сығыштарын тыңланы. Шулай уҡ йәмәғәт ойошмалары өсөн түңәрәк ҡор уҙғарылды. Уртаҡ тел табып, юғары кимәлдә бер сараны үткәреүгә өлгәшкән ойошма етәкселәренең был кәңәшмә барышында ла һүҙҙәре беректе.

### "Umarta" проекттар оҫтаханаһы

#UfaForum йәштәр мәғариф киңлегендә йәштәр төрлө спикерҙарҙың сығышын тыңлап йөрөү менән генә сикләнмәне. Ойоштороусылар уларға үҙ идеяларын, проекттарын тормошҡа ашырыу мөмкинлеге бирҙе. "Umarta" проекттар оҫтаханаһында тәүҙә утыҙға яҡын идея теркәлде. Артабан йәштәр уларҙы проект кимәленә тиклем уйлап еткерергә, һуңынан һәр йәһәттән анализлап, талап ителгән сығымдарҙы, йәмғиәткә килтергән файҙаһын иҫәпләп, компетентлы жюри ағзалары хөкөмөнә ҡуйырға тейеш ине. Әйтергә кәрәк, иң һуңғы этапҡа ни бары ун алты команда ғына барып етә алды. "Umarta" проекттар оҫтаханаһында үҙ проекттарын тормошҡа ашырыу ниәтендә бик әүҙем эшләгән командалар эште башынан аҙағына тиклем еткереп башҡарырға, фекерҙәштәр табып, берләшергә өйрәнде. Ойоштороусылар "Өфө саралары" һәм "Кей" кейем бренды проекттарын иң яҡшы, тип тапты һәм еңеүселәргә 30-ар мең һумлыҡ приз бүләк итте. Тәүге проект Республика инженер лицей-интернатының 9-сы синыф уҡыусылары Алмас Ғиниәтуллин һәм Александр Батыргәрәевтыҡы булып сыҡты. Был йәш программистар хәҙер бөтәһенә лә билдәле "Китаптар" сайтын еренә еткереп эшләп бөтөрөүселәр. "Беҙ бындай хакатондарҙа алдан да ҡатнашҡаныбыҙ бар, әммә бөгөн еңеү яуларбыҙ тип һис уйламаныҡ. "Өфө саралары" программаһында баш ҡалала үткәрелгән бөтә саралар картала күрһәтелеп, үткәрелгән көнө һәм ваҡыты яҙылып барасаҡ. Ҡала кешеләре буш ваҡытында күңелле, файҙалы һәм күңеленә яткан менән шөғөлләнә алһын өсөн эшләнде", - тине Александр, был шәп идея дуҫы Алмастың уйына килеүен аңғартып. "Кей" кейем брендын Хәмдиә Ҡунаҡҡолова, Гүзәлиә Тулыбаева, Ләйсән Йәмилова һәм Ринат Манапов бергәләшеп уйлаған. "Umarta" проектар оҫтаханаһында ҡатнашыусыларҙың береһе лә бүләкһеҙ ҡалманы, барыһына ла инглиз телен өйрәнеүгә сертификаттар, БР Йәштәр сәйәсәте һәм спорт министрлығының махсус бүләктәре тапшырылды.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**
**Лев Толстойҙың: "Орлоҡ күренмәй, әммә унан ҙур ағас үҫеп сыға. Шуның кеүек фекер ҙа һиҙелмәй, әммә фекерҙән кешелек тормошондағы бөйөк ваҡиғалар үҫеп сыға", - тигән һүҙҙәре бар. Быңа ике аҙна элек кенә башҡорт йәштәренең оло мәғариф форумын ойоштороуы теләк кенә булһа, бөгөн ул шаулап-гөрләп үтеп тә китте. Киләсәктә лә #UfaForumдың ойоштороусылары - Әлфир Илбактин, Фатима Янбаева, Илдар Кинйәбулатов, Роберт Дәүләтшин, Азат Бадранов, Даян Солтанғужин, Айгөл Хафизова, Владислав Габов, Ринар Тавхутдинов, Миңзәлә Аҫҡарова, Урал Кәримов, Рүзилә Йәмилова һәм башҡа аҡыллы, инициативалы йәштәребеҙ ниәтләгән ошондай матур мәғариф саралары үткәрелеп, етәкселәр тарафынан бөгөнгөләй аңлау һәм яҡлау табып торһон, тип кенә теләргә ҡала.**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**




*Проект еңеүселәрен бүләкләү.*

✓ *Алтын ҡашлы эйәр, алтын башлы йүгән, алмас ҡылыс... Ошо бәләкәй генә эпос өҙөгөнән башҡорт халҡы тураһында әллә күпме хазина табырға була!*



*ТАРИХЫҢДЫ ТАНЫТ...*

**2004 йылда баш ҡалабыҙ Өфөнөң 430 йыллығы билдәләнеп, байрам тантаналары ойошторолғайны. Эйе, 1574 йылда Иван Грозный әмеренә буйһоноп, Мәскәү баяры Иван Нагой командалығы аҫтында бында килгән батша стрелецтары Өфө ҡәлғәһенә нигеҙ һалғанын бер кем дә инҡар итергә йыйынмай. Әммә борон-борондан тап ошо урынды яҡын-тирәлә йәшәгән ҡәүемдәр төйәк иткән, уларҙың торлаҡ, оҫтахана, нығытма урындары әле лә табыла тора. Боронғо риүәйәттәр ҙә, тарихи документтар ҙа ошоға дәлилдер. Академик, тарих фәндәре докторы, билдәле археолог Нияз Мәжитов етәкселегендә асылған "Өфө-2" ҡаласығында табылған ҡомартҡылар ҙа ошо хаҡта һөйләй. Эҙәрмән-тикшеренеүсе Радик ВӘХИТОВтың "Сәмреғош ҡанаты аҫтына" исемле китабында бәйән ителгән, ошо мәсьәләгә арналған аналитик мәғлүмәттәр уҡыусыларыбыҙҙа ҡыҙыҡһыныу уятыр, тип уйлайбыҙ.**

# ӨФӨНӨҢ БАРЛЫҠҠА КИЛЕҮЕ -

## миф һәм ысынбарлыҡ



Өфө ҡалаһына1574 йылда урыҫтар тарафынан нигеҙ һалыныуы тураһындағы мифты башҡорт халҡының килеп сығышын күскенселек концепцияһына ярашлы аңлатыусы тарихсыларыбыҙ уйлап сығарған.

Хәҙерге Өфө территорияһында табылған һәм тикшерелгән археологик ҡомартҡылар бында таш быуат заманынан бирле кешеләр йәшәгән төйәк булғанын дәлилләп тора. Ағиҙел йылғаһының Ҡариҙел менән ҡушылыуынан хасил булған ярымутрау боронғо кешеләр өсөн ифрат уңайлы урын булған. Ошо йылғалар, уларҙың бейек һәм текә ярҙары бында йәшәгән кешеләрҙе дошмандарының кинәт һөжүм итеүенән ҡурсалап торған.

Бында бронза дәүере кешеләре лә йәшәгән, ә иртә тимер эпохаһында тәүге ҡаласыҡтар төҙөлгән. Уларҙың Өфө ҡаласығы тип аталған иң билдәлеһе хәҙерге "Йәшел сауҡалыҡ" санаторийы территорияһында урынлашып, Ҡариҙел йылғаһының уң яҡ ярындағы текә морондо биләп торған. Ҡаласыҡтың өс яғында текә битләү булһа, һөҙәк яғы ерҙән өйөлгән ур һәм 97 метр оҙонлоғондағы соҡор менән һаҡланған. Ур өҫтөндә бүрәнә ҡойма булған. Был ҡаласыҡ тураһындағы мәғлүмәт тәү тапҡыр XVIII быуатта билдәле сәйәхәтсе П. Паллас яҙмаларында бирелә. Археологтар шундай уҡ ҡаласыҡтарҙы Салауат Юлаев һәйкәле торған ерҙә һәм Воронки станцияһы янында таба.

Хәҙерге Өфө территорияһы Урта быуаттар башында, Башҡортостан әле Мәскәү дәүләтенә ҡушылмаҫ борон уҡ, бигерәк тә әүҙем үҙләштерелә. Пушкин һәм Воровский урамдары сатында ошо осорға ҡараған ҙур ҡаласыҡ табылды.

Өфө ярымутрауында кешеләрҙең оҙаҡ ваҡыттар дауамында һәм даими йәшәүенә бында күп һанлы ҡәберлектәр дәлил. Улар араһында XX быуаттың 30-50-се йылдарында Башҡорт дәүләт медицина университеты территорияһында һәм мосолман зыяратында табылған таш төрбәләр һәм ҡурғандар айырыуса ҡыҙыҡлы.

Иң боронғо 1154 йылғы Иҙриси картаһында Ағиҙел һәм Ҡариҙел ҡушылған урынға яҡын ерҙә ҡала билдәһе бар. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, карта фрагменттарының миңә билдәле күсермәһенән ошо ҡаланың исемен уҡып булманы.

XIV быуат башында башҡорттарҙың Алтын Урҙа составында милли мөхтәриәткә нигеҙләнгән Баскардия тигән дәүләте булған. Уларҙың мосолман хакимы, идара итеү аппараты ла булған. Тимәк, хөкөм итеү, яһаҡ йыйыу, почта һәм башҡа хеҙмәттәр урынлашҡан, башында хаким торған административ үҙәк ролен үтәгән баш ҡала ла булған.

Был Үзбәк хан хакимлығы дәүерендә Алтын Урҙала һатыу-һатып алыу сәскә атып, ҡалалар барлыҡҡа килеү ваҡытына тура килә. Был ҡалалар Европанан килгән сауҙагәрҙәргә, миссионерҙарға һәм сәйәхәтселәргә билдәле булған.

XIV быуаттың икенсе яртыһынан башлап бер туған Пицциганоларҙың (1367) һәм Авраам Крескестың (1377) боронғо карталарында Кама йылғаһы бассейнында Пасшерти (Паскатир, Башҡорт) һәм Сәғәтин тип билдәләнгән башҡорт ҡалалары күрһәтелә. Г. Меркатор картаһында (1554) Башҡорт (Пасшерти) ҡалаһы Ағиҙел һәм Ҡариҙел ҡушылған урында аныҡ билдәләнһә, Сәғәтин Ҡариҙел йылғаһы үрендә күрһәтелгән.

Күреүегеҙсә, хатта Урта быуат баштарында ла Өфө ҡалаһы урынлашҡан ер Ҡариҙел (Өфө) тамағы менән бәйле. Тәүҙәрәк ҡала ошонда йәшәгән халыҡ исеме менән Пасшерти, йәғни Башҡорт тип күрһәтелһә (ә был бигүк дөрөҫ түгел), һуңынан ҡала атамаһы картала билдәләнгән географик объект - Өфө йылғаһы тамағы менән бәйле рәүештә нығынып китә. Шулай итеп, йылға исеме ҡала атамаһына нигеҙ була.

Ә Өфө һүҙе ниҙе аңлата икән? Йылға атамалары йыш ҡына төрлө телдәрҙәге һыу, дым, ысыҡ, йылға мәғәнәһендәге һүҙҙәр менән бәйле: Дим - дым, Ыҡ - ысыҡ, Үҙән - йылға, Йүрүҙән - шәп ағымлы йылға, Иҙел - йылға -Волга, Ағиҙел - аҡ иҙел (уның урыҫса атамаһы ла ошонан -Белая Воложка), Ҡариҙел - ҡара (төньяҡ) иҙел.

Өфө йылғаһының атамаһын да ошолай аңлатып була. Был атама боронғо фин телендәге "Упе" - йылға һүҙенән килеп сыҡҡан, "упҡын" һүҙе уға тамырҙаш. Иҫке карталарҙа, мәҫәлән, Н. Сансондың 1688 йылғы Рәсәй картаһында был йылғаның исеме Уппа тип билдәләнгән. Өфө йылғаһының уң яғындағы ерҙәрҙә төрки-фин сығышлы өпәй ырыуы башҡорттары йәшәгән.

Ә хәҙер сәйәсәт йоғонтоһо ҡағылмаған бер боронғо документҡа иғтибар итәйек. Ул - "Ҙур Һыҙма Китабы" ("Книга Большому чертежу"). Беренсе тапҡыр Рәсәй картаһын төҙөргә ынтылыу - 1598 йылда, икенсеһе 1627 йылда була. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, карталар һаҡланмаған. Һыҙмаға ҡараған "Китап"тың "Волга йылғаһы" бүлегендә шундай юлдар бар:"... ә Белая Воложкала (Ағиҙелдә. -Р.В.) Кама йылғаһынан 120 саҡрымда Өфө ҡалаһы, ә ҡаланан аҫта Белая Воложкаға Өфө йылғаһы ҡоя".

Шулай итеп, XIV быуаттағы тәүге Европа карталарындағы кеүек үк, һуңыраҡ төҙөлгән Рәсәй карталарында ла Өфө ҡалаһы урынлашҡан ер Өфө йылғаһы тамағы менән бәйле. Боронғо картограф та Өфө ҡалаһы урынлашҡан ҡалҡыулыҡтан түбәндәрәк ул саҡта урыҫтар Белая Воложка тип атаған Ағиҙел йылғаһына Өфө йылғаһының ҡушылыуы тураһында яҙып ҡалдырған. Тимәк, борондан уҡ Өфө ҡалаһы Өфө йылғаһы тамағы өҫтөндә, хәҙер Иҫке Өфө тип аталып йөрөгән ерҙә урынлашҡан булған. Бында 1505 йылда Ҡаҙан ханы тарафынан ҡуйылған Өфө кенәзе Ҡара Килембәт йәшәгән. Ул ошонан Ҡаҙан ханлығының мөстәҡиллеге өсөн һатыулашыу маҡсатында урыҫ батшаһы Иван III Васильевичҡа барған, һуңынан Өфө нуғай ханы хакимлығы аҫтында ҡалған.

**Радик ВӘХИТОВ.**
**(Дауамы бар).**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Йәдкәр БӘШИРОВ*

# БӨЙӨК БАШҠОРТ ИЛЕ

Шулай итеп, беҙ был территорияла халыҡтарҙың ҡатнашыуы хаҡында һүҙ алып барабыҙ. Уралтау аша күсенеүселәрҙең бер өлөшө артабан көнбайышҡа юл алған, бер өлөшө урындағы аборигендар менән тороп ҡалған. Тарихи материалдарҙа һалҡын климат шарттарында йәшәүсе ҡәбиләләрҙең йылы яҡтарға күсенеүе тураһында ла әйтеп үтелә. Был осраҡта бай тәбиғәт ресурстары булған урындарҙа урындағы халыҡтар йәшәгән. Уларҙың үҫеш кимәле тәбиғи байлыҡтарҙы табырға һәм файҙаланырға, шуның ярҙамында көнкүрешен яйларға мөмкинлек биргән. Урындағы халыҡтың алдынғы ҡарашлы булыуын Көньяҡ Уралда асылған Һынташ комплексы дәлилләй. Был үҙенсәлекле киң пландағы түңәрәк торлаҡ-ҡоролмаларға (Һынташ, Арҡайым, Аланд һ.б.) инеү ишектәре ҡоролманың үҙәгенә ҡарай урынлашҡан. Уларҙың төҙөлөү принцибы бер үк, бүлмәләр бүленештәре лә стандарт. Күрәһең, торлаҡтарҙың бындай төҙөлөшө саҡырылмаған ҡунаҡтарҙың көтөлмәгән һөжүменән һаҡланыр өсөн ҡулай булғандыр. Күп һанда табылған ҡомартҡылар (руда, шлактар, металл тамсылары, заготовкалар, таштан эшләнгән сүкештәр, өлгөләр) тимер эшкәртеү булғанлығын аңлата (93, 94-се бит). Һынташ ҡоролмаһында фәҡәт Уралда осраған файҙалы ҡаҙылмаларҙан яһалған яу ҡоралдары, биҙәнеү әйберҙәре табылыуы урындағы халыҡтың ултыраҡ тормош менән йәшәүе һәм ныҡ алға киткәнлеге хаҡында һөйләй. Мәҫәлән, Ырымбур ҡалаһы янында Филиппов ҡәберлектәрендә табылған 500 ҡомартҡының күбеһе алтындан йәнлектәрҙе һынландырып эшләнгән. Баймаҡ районының ҡомташлы яҡҡылыҡтарында табылған рудалары алтынға, көмөшкә, барийға бик бай. Борон алтын был төбәктә бик еңел юл менән ерҙең өҫкө ҡатламынан табылған, уларҙы табыусы уғырбашҡорттар йомшаҡ металдарҙы яңыса ысул менән эшкәртеү һәләтенә лә эйә булған. Филиппов ҡурғандарында табылған ҡомартҡылар шул хаҡта һөйләй. Көньяҡ Уралда Арҡайым ҡаласығының һәм "Ҡалалар иле"нең башҡа ҡалалары табылыуы башҡорттарҙың ата-бабаларының ниндәй юғары кимәлгә өлгәшеүҙәре тураһында һөйләй. Үкенескә күрә, башҡорттарҙың боронғо ата-бабалары булған уғырҙарҙың был ҡаҙанышын ер йөҙөнән юҡҡа сыҡҡан икенсе бер халыҡтыҡы тип атайҙар.

Уралтауҙа йәшәгән халыҡтың меңәр йылдарға һуҙылған һәм үҫешкән мәҙәни традициялары бар. Боронғо башҡорт халыҡ эпосы "Урал батыр"ҙың сюжетында ла иҫбатлана был үҫеш:

*Йондоҙ һымаҡ атылып,*
*(Аҡбуҙ толпар атлығып,)*
*Күктән килеп төшкән, ти,*
*Һомай һылыу алдына*
*Килеп башын эйгән, ти.*
*Аҡбуҙ шунда туҡтаған,*
*Бөтә майҙан һоҡланған.*
*Һыртына эйәр һалынған, ти,*
*Эйәренең башына*
*Алмас ҡылыс тағылған;*
*Эйәренең ҡашы алтын,*
*Йүгәненең башы алтын...*

Алтын ҡашлы эйәр, алтын башлы йүгән, алмас ҡылыс... Ошо бәләкәй генә эпос өҙөгөнән башҡорт халҡы тураһында әллә күпме хазина табырға була!

**(Дауамы бар).**

✓ *Башҡорттар күп нәмәне килешеү менән хәл иткән. Уларға был һәләт тәбиғәт тарафынан һалынған. 1917-1919 йылдарҙа, шундай ҡатмарлы мәлдәрҙә лә милләттәштәребеҙ Килешеү нигеҙендә автономия яулауға ирешә!*



# РӘСӘЙ ТАРИХЫНДАҒЫ...

## тәүге автономиялы республика ул - Башҡортостан

**Рәсәй Президенты Владимир Путиндың 2019 йылда Башҡортостан автономияһы ойошторолоуҙың 100 йыллығын байрам итеү тураһындағы Указға ҡул ҡуйыуы хаҡында хәбәрҙарбыҙ. Эйе, 1919 йылдың 20 мартында Башҡортостан территориаль-милли автономияһын раҫлаған килешеү төҙөлә, ә инде 23 мартта килешеү тураһында мәғлүмәт матбуғатта баҫыла. Тап был көн Башҡорт автономияһы төҙөлөү көнө тип йөрөтөлә. Ошо тарихи акт Рәсәй федерализмына нигеҙ булып тора. Ерен, телен, ғөрөф-ғәҙәттәрен һаҡлап ҡалырға булышлыҡ иткән килешеүгә ҡул ҡуйыу халҡыбыҙ өсөн айырыуса әһәмиәтле дата. Был тарихи ваҡиғаны яҡтыртыусы һәм тикшереүсе фәнни эштәр ҙә, фекерҙәр ҙә аҙ түгел, әммә тарих ул шундай нәмә: ул ваҡыт үтеү менән майҙанға килеүсе йәш тарихсыларҙың яңыса ҡараштары, яңылыҡтар, асыштар менән байытылып тора. Беҙ ҙә бөгөн һөйләшеүгә йәш тарихсылар - Башҡортостан Республикаһының Китап палатаһы директоры Азат ЯРМУЛЛИН менән БДУ доценты Рәсих ЗӘЙТҮНОВты саҡырҙыҡ. Ошо өлкәлә әүҙем эшләүсе һәм төплө аналитик сығыштары менән айырылып тороусы йәш ғалимдарыбыҙ өсөн Башҡорт автономияһы темаһы ғилми эшмәкәрлектәрендәге мөһим темаларҙың береһе ул.**

▸ **Башҡортостан автономияһының 100 йыллығы темаһы һеҙҙең, был мәсьәләнең бөтөн яҡтарын да ентекле өйрәнгән һәм аңлаған кешеләр ҡарашынан сығып әйткәндә, көнүҙәкме? Мөһимме беҙҙең милләткә ошо сараны билдәләү? Әллә уны сираттағы байрамдарҙың береһе итеп кенә ҡабул итергә буламы? Тарихи баһаһы, ҡиммәте ни ҡәҙәр?**

**Азат Ярмуллин:** Был тарихи сараның 90 йыллығы ла яҡшы ғына билдәләнгәйне, шунлыҡтан, был көтөлмәгән яңы сара түгел. Йәғни, Башҡортостан автономияһының тарихи әһәмиәте бығаса ла баһаланды. Ә инде 100 йыллыҡҡа килгәндә, Указға Рәсәй Президенты ҡул ҡуйҙы, тимәк, был ил кимәлендәге мөһим ваҡиға һәм уға иғтибар ҙа ошо дәрәжәлә. Ни өсөнмө? Сөнки Башҡортостан Рәсәй тарихындағы беренсе автономиялы республика.

Мин әле Указ сыҡмаҫ элек үк ҡараштыра килә инем. Ошондай уҡ указдар Карел, Коми, Яҡут республикалары буйынса күптән ҡабул ителгәйне. Асылда, улар бит әле 1922, 1925 йылдарҙа ғына ойоша. Ә указдарына 2012-2013 йылдарҙа уҡ ҡул ҡуйҙыртып ҡуйғандар.

Был ваҡиғаның тағы ла бер уникаллеген хәтерләтәм: Рәсәй составындағы бөтә республикалар ҙа өҫтән төшөрөлгән декреттар буйынса төҙөлһә, Башҡортостан иһә Килешеү буйынса төҙөлгән берҙән-бер республика. 100 йыллыҡты билдәләгән саҡта ла ошоға баҫым яһалһын ине.

Был йыл да ҡабатлана торған сара түгел, әһәмиәтен самалап ултыра торған да ваҡиға түгел. Был беҙҙең халыҡтың ҡанлы тарихы, беҙ уны баһаларға түгел, ә белергә, ҡабул итергә һәм хөрмәтләргә генә тейешбеҙ.

Интернеттағы ҡайһы бер социаль селтәрҙәрҙә был ваҡиғаға һәм уны билдәләүгә негатив фекерҙәр ҙә яҙалар, әммә уларға иғтибар бирелмәһен ине. Башҡорт тарихын бысратырға теләүселәр аҙ түгел. Әммә беҙҙең ата-бабаларыбыҙ үткән юлда оялыр йә йәшерер сәбәптәре булған бер генә хәл дә юҡ.

**Рәсих Зәйтүнов:** Мин был Указ сығыуына ысын күңелдән ҡыуандым. Әлеге ваҡытта ҡайһы бер тарихсылар, был дата дөрөҫ түгел, юбилей 2017 йылға тура килә, тип тә әйтә. Әммә мин "дөрөҫ" тигән ҡараштамын, сөнки Башҡорт дәүләтселегенең төҙөлөүе 1917 йылдан башлап 1919 йылғаса дауам иткән. Әлбиттә, 1917 йылдың 15 ноябрендә автономия иғлан ителә һәм торараҡ башҡорттарҙың Ҡоролтайында раҫлана. 1918 йылда автономия бөтөн көсөнә эшләй, әммә шуныһы: "автономия" булғас, Үҙәк власть уны раҫларға ла тейеш бит. Ә 1918 йылда Үҙәк власть ҡайҙа? Һамарҙа Һамар хөкүмәте генә урынлашҡан була, уның менән ниндәйҙер килешеү була, тик уларҙың вәкәләттәре булмай әле. Шулай итеп, 1917-1918 йылдарҙа әле танылмаған автономия ғына була. 1919 йылда, ниһайәт, беҙҙең автономияны үҙәк власть рәсми рәүештә таный.

Азат Шәкирйән улы әйткәндәр менән килешеп, тағы ла өҫтәп китер инем: башҡорттар борон-борондан күп нәмәне килешеү менән хәл иткән. Уларға был һәләт тәбиғәт тарафынан һалынған. 1917-1919 йылдарҙа, шундай ҡатмарлы һәм дәшһәтле мәлдәрҙә, Көнсығыш фронты уртаһында тороп ҡалған, ағай менән ҡусты ҡара-ҡаршы алышырға мәжбүр булған замандарҙа, милләттәштәребеҙ Килешеү нигеҙендә автономия яулауға ирешә! Был бит шундай аҡыл, батырлыҡ һәм тәүәккәллек талап иткән оло, мәртәбәле эш.



**Башҡорттар, башҡорт лидерҙары "автономия" төшөнсәһен бик киң аңлаған. Ул иң беренсе "аҫаба"нан башланғыс алған. Быға иһә сәбәпсе була ала бер генә мәсьәлә - ер. Тимәк, автономияны ата-бабаларыбыҙ иҡтисади күҙаллауҙарҙан, иҡтисади ихтыяждарҙан сығып яулаған. Улар ерҙәрҙе һаҡлап ҡалһаҡ, йәшәйәсәкбеҙ икәнде аңлаған. Һәр бер сәйәси, ижтимағи хәрәкәт иҡтисади барлыҡты тормошҡа ашырыу ул. 1917 йылда, Романовтар властан киткәндән һуң, аҫабалыҡты бирәү ҙә гарантияламай. Шул осорҙа халыҡтан килгән иң беренсе импульс - ерҙәрҙе һаҡлап алып ҡалыу. Халыҡтың хәтере әле ҡайһы бер нәмәләрҙе яҡшы иҫләй. XIX быуаттың икенсе яртыһында Башҡортостанда ер мәсьәләһе буйынса "алтын лихорадка" була. Ерҙәрҙе тартып алалар, халыҡтың бар булмышын үҙгәртәләр.**

▸ **Совет тарих фәне 1917 йылғы Башҡорт милли хәрәкәтен революцияға ҡаршы, реакцион булған, тип нарыҡлай. Совет тикшеренеүселәре башҡорт хәрәкәтен, халыҡ менән ныҡлы бәйләнеше булмаған һәм тик буржуаз-юғары ҡатлам мәнфәғәттәрендә ойошторолған, тип иҫбатларға тырыша...**

**Азат Ярмуллин:** Был осраҡта улар башҡорт халҡының сәйәси һәм иҡтисади үҫеш кимәлен инҡар итеп, түбәнһетеп күрһәтергә маташа. Шулай итеп, башҡорт халҡының тарихи традицияһы, быуаттар дауамында ер һәм азатлыҡ өсөн, үҙенең хоҡуҡтарын яҡлап көрәшеүе бөтөнләй иҫәпкә алынмай. Икенсенән, башҡорттарға автономияны Октябрь революцияһы, большевиктар бирҙе, тигән фекер алға һөрөлә. Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтенең Февраль революцияһынан һуң барлыҡҡа килеүе, тәүге ҡоролтайҙар үтеүе һәм автономия, үҙбилдәләнеш мәсьәләләре Ваҡытлы хөкүмәт алдына ла ҡуйылыуы бындай фекерҙең ысынбарлыҡҡа тап килмәүен күрһәтә.

**Рәсих Зәйтүнов:** Октябрь революцияһынан һуң, илдәге килеп тыуған сәйәси хәлгә ярашлы, Башҡорт Милли Шураһы бөтә башҡорт халҡына тәғәйенләнгән 1-се фарманды ҡабул итә (11 ноябрь, 1917 йыл). Унда Октябрь инҡилабына бәреп төшөрөлгән Ваҡытлы хөкүмәткә баһа бирелә, автономия, ер һәм башҡа мәсьәләләргә ҙур иғтибар бүленә. Совет власының халыҡтарҙың үҙбилдәләнеш хоҡуғын яҡлап сығыш яһауына ҡарамаҫтан, большевиктар түңкәрелешенә лә, Ваҡытлы хөкүмәткә лә кире ҡараш белдерелә. Фарман буйынса, үрҙә күрһәтелгән ике көстөң бәрелеше кисектергеһеҙ булыуына иғтибар йүнәлтелә. Был осраҡта башҡорттар, әгәр илдә граждандар һуғышы башланһа, бер яҡҡа ла ҡушылмаясағын белдерә. "Беҙ большевик та, меньшевик та түгел, беҙ тик башҡорттар һәм бындай хәлдә үҙебеҙҙең мәнфәғәтте яҡларға тейешбеҙ", тигән фекер алға һөрөлә. Ошо принципҡа нигеҙләнеп, Башҡорт Милли Шураһы автономия иғлан итеүҙе һәм милли ҡораллы көстәр төҙөүҙе көн үҙәгенә ҡуя. 1-се фарманға ярашлы, 15 ноябрҙә Ырымбурға атаман Дутовтың казак ғәскәрҙәре килеп ингәс, шул уҡ көндә Шура үҙенең исеменән 2-се фарманды ҡабул итә. Был фарман "Ырымбур губернаһының Щадринск, Екатеринбург өйәҙҙәре башҡорттарына, округ һәм район башҡорт шураларына" тип атала һәм Ырымбур, Өфө, Пермь, Һамар губерналары сиктәрендә Башҡортостандың ерле автономияһын иғлан итә. Башҡорт халҡы автономия иғлан итеүҙе ҙур шатлыҡ, оло ҡыуаныс менән ҡаршы ала. Темәс, Мораптал, Борай һәм башҡа ҙур башҡорт ауылдарында, Бөрөлә ошо айҡанлы йыйылыштар ойошторола һәм Ырымбурға ҡотлау хаттары, телеграммалар ебәрелә.

▸ **Башҡорт халҡы өсөн "автономия" төшөнсәһе нимә ул? Аңлағанмы улар, һеҙҙеңсә, был төшөнсәне? Ҡабул итә йәки уға яраҡлаша алғанмы?**

**Азат Ярмуллин:** XVI быуаттың уртаһында Рәсәйгә ҡушылғандан һуң Башҡортостан шул уҡ автономияны тәшкил итә. Унда Рәсәй менән мөнәсәбәттәр бары яһаҡ түләү менән генә сикләнә. 1865 йылға, кантон системаһы юҡҡа сыҡҡанға саҡлы, башҡорт йәмғиәтендә автономия элементтары һаҡланған була әле. Йәғни халыҡ үҙ закондары менән йәшәй. 1865 йылдан һуң башҡорттар төрлө реформаларға дусар ителә. Әммә улар автономиялы йәмғиәтте хәтерендә һаҡлаған була әле. Башҡорт Өлкә Шураһының фарманында ла шулай тиелә: халыҡтың хәтерендә әле үҙаллылыҡ аңы һаҡланған. Шуға күрә лә, 1917 йылда автономия тураһында һүҙ күтәрелгәс, башҡорттар араһында "Ул нимә?" тигән һорау булмай. Хатта яңы ғәскәрҙе лә улар автономияның бер элементы булараҡ ҡабул итә.

**Рәсих Зәйтүнов:** Башҡорттар, башҡорт лидерҙары "автономия" төшөнсәһен бик киң аңлаған. Ул иң беренсе "аҫаба"нан башланғыс алған. Быға иһә сәбәпсе була ала бер генә мәсьәлә - ер. Тимәк, автономияны ата-бабаларыбыҙ иҡтисади күҙаллауҙарҙан, иҡтисади ихтыяждарҙан сығып яулаған. Улар ерҙәрҙе һаҡлап ҡалһаҡ, йәшәйәсәкбеҙ икәнде аңлаған. Һәр бер сәйәси, ижтимағи хәрәкәт иҡтисади барлыҡты тормошҡа ашырыу ул. 1917 йылда, Романовтар властан киткәндән һуң, аҫабалыҡты бирәү ҙә гарантияламай. Шул осорҙа халыҡтан килгән иң беренсе импульс - ерҙәрҙе һаҡлап алып ҡалыу. Халыҡтың хәтере әле ҡайһы бер нәмәләрҙе яҡшы иҫләй. XIX быуаттың икенсе яртыһында Башҡортостанда ер мәсьәләһе буйынса "алтын лихорадка" була. Ерҙәрҙе тартып алалар, халыҡтың бар булмышын үҙгәртәләр. Элек иркенләп мал көтһәләр, күсенеп, йәйләп-ҡышлап йөрөй алһалар, шул мәлдәрҙә ерҙәр бүленеп, баярҙарға бирелеп, заводтар төҙөлөп, малсылыҡ системаһы юҡҡа сыға. Һәм 1917 йылда тағы ла ошондай ҡурҡыныс янаған мәлдә, зыялыларыбыҙ ошо иҡтисади афәтте дөрөҫ баһалап, региондарҙы яҡлау өсөн автономия төҙөүгә ынтыла. Шунлыҡтан, ҡабатлап әйтәм, әлеге сайттарҙа яҙылған ғәйеп ташлауҙар, сәйәси йөй эҙләүҙәр - буш һүҙ. Автономия яулауҙың төп маҡсаты - иҡтисади мәсьәләләрҙе хәл итеү булған.

**Азат Ярмуллин:** Хатта Зәки Вәлидиҙең аҡтар йә ҡыҙылдар яғына сығыуы ла ана шул иҡтисади ҡараштан сығып эшләнә.

▸ **Бөгөн Башҡорт автономияһы етәкселәрен, атап әйткәндә, Әхмәтзәки Вәлидиҙең исемен ҡаралаусы ла, ҙурлау-**

*✔ Иң мөһим факторҙарҙың береһе - башҡорттоң ғәскәри көсө. Ата-бабаларыбыҙҙың үҙаллы йәшәй белеү аҡылы был. Улар үҙаллылыҡтың ҡоралы ғәскәрһеҙ яҡлауһыҙ булырын белгән. Беҙҙе Совет хөкүмәте ғәскәрһеҙ танымаҫ та ине.*



**сы ла аҙмалар күп. Тарихсылар күҙлегенән һеҙ уларҙың эшен, лидерҙарының хеҙмәтен нисек баһалайһығыҙ?**

**Азат Ярмуллин:** Башҡорт милли хәрәкәте етәкселәре шундай сикләнгән ресурстар, мөмкинлектәр менән бөйөк эштәр атҡарырға өлгәшкән. Әхмәтзәки Вәлиди был хәрәкәтте туплаусы, әйҙәүсе лидер булған. 1919 йылдың сентябрендә Ырымбур Губкомында большевиктар кәңәшмә үткәрә һәм шунда З. Вәлиди буйынса бик ҡыҙыҡлы фекер әйтелә. Башҡорт автономияһы төҙөлгәндә унда большевиктар булмай, уны улар төҙөмәгән. Һәм Совет власы килгәс, улар автономияны большевиклаштырырға маташа. Һәм улар шундай яҙма ҡалдыра: "Ҡаҙаҡ автономияһы менән артыҡ мәшәҡәт булманы, улар шундуҡ баш һалды. Ә бына башҡорттарҙы контролдә тотоуы ауыр, улар бер төптән, беҙҙең сәйәсәткә ыңғайламайҙар. Уларҙың Вәлидов тигән бәйғәмбәрҙәре бар". Йәғни, башҡорт халҡы әйҙәүсе, нимәгәлер күтәреүсе башлыҡтарына бәйғәмбәргә ышанғандай ышана һәм уның өсөн йән аямай утҡа ла, һыуға ла инә. Уларҙа шундай тоғролоҡ!

**Рәсих Зәйтүнов:** Бөгөн Вәлиди тураһында ниндәй генә фекерҙәр ҡалҡып сыҡһа ла, халҡыбыҙҙы мобилләштереп ғәскәргә туплауында, автономия эштәрен ойоштороуҙа уның роле баһалап бөткөһөҙ. Вәлиди хаҡында тарихты бәлмәүселәр тарафынан әйтелгән: "Ул бит ҡасып киткән", - тигән һүҙҙәргә яуап итеп: "Ә һеҙ уның урынында булып ҡарағыҙ. Хәленән килгәндең, мөмкин булғандың барыһын да эшләгән ул халҡы өсөн", - тип әйткем килә. Большевиктарҙың бер үҙенсәлекле алымы булған. Улар ҡурҡыныс янағандай лидерҙарыбыҙҙы Мәскәүгә саҡыртып алған да, халҡынан айырып, ситкә эшкә ебәргән. Вәлиди ҙә был хаҡта шулай тип яҙа: "Сталин саҡыртып алды ла: "Һеҙ шундай масштабтағы кеше, ул бәләкәй ерлектә нимә бар һеҙгә, әйҙәгеҙ, Рәсәй кимәлендәге мосолман халҡы менән шөғөлләнегеҙ", - тип, илемдән айырҙы..." Тимәк, Сталин Вәлидиҙең ҡеүәтен белгән. Шул уҡ ваҡытта Вәлиди ҙә эштең нимәгә юлланыуын аңлаған. Шулай итеп, уны Башҡортостанға ҡайтармайҙар. Артабанғы ваҡиғалар иһә беҙгә мәғлүм...

**▸ Үтә лә ҡатмарлы заманда, һуғыш, талаш-тартыш йылдарында автономия төҙөүгә бары тик башҡорттарҙың ғына өлгәшә алыуында ниндәйҙер бер мөһим факторҙар ҙа сәбәпсе булғандыр бит?**

**Азат Ярмуллин:** Иң мөһим факторҙарҙың береһе - башҡорттоң ғәскәри көсө. Ата-бабаларыбыҙҙың үҙаллы йәшәй белеү аҡылы был. Улар үҙаллылыҡтың ҡоралы ғәскәрһеҙ яҡлауһыҙ булырын белгән. Беҙҙе Совет хөкүмәте ғәскәрһеҙ танымаҫ та ине. Граждандар һуғышының ҡыҙған мәлендә уларға ана шул көс кәрәк була ла инде. Йәғни, төп фактор ошо була. Һәм ул ғәскәргә, йәғни башҡорт яугирына автономияның хаҡын төрлө фронттарҙа йөрөп "түләргә" лә тура килә. Шуға күрә лә, бер аҙ ситкә күсеп әйтеп киткем килә, автономияның гаранты булып, төрлө һуғыштарҙа, Ер шарының төрлө төбәктәрендә ятып ҡалған башҡорт яугирына һәйкәл ҡуйыу зарур.

**Рәсих Зәйтүнов:** Тағы ла бер фактор: автономияны эре ер биләүсе башҡорттар ҙа яҡлап сыға. Беренсе донъя һуғышы Рәсәйҙе иктисади, сәйәси көрсөккә килтерә. Ихтилал күтәрелә. Ваҡытлы хөкүмәттән артыҡ файҙа булмай. Унан большевиктар власҡа килә. Улар төрлө декреттар ҡабул итә. Халыҡтар быны эләктереп ала. Көньяҡ Уралда иһә был хәрәкәт башҡаларҙан айырмалы рәүештә икенсе юҫыҡтан китә. Бында ер хаҡынан юғарыраҡ төшөнсә булмай.

Лидерҙар мәсьәләһенә килгәндә, уларҙың артында ана шул эре ер хужалары, ер биләүселәр тора. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, Граждандар һуғышы тоҡанғас, байҙарҙы ҡыра башлайҙар. Был Башҡорт хәрәкәте лидерҙарын таяныcһыҙ ҡалдыра. Һуғыш осоронда ғына ла Башҡортостан туғыҙ тапҡыр аҡтарҙан - ҡыҙылдар, ҡыҙылдарҙан аҡтар ҡулына күсә. Унан ҡыҙылдарҙың еңере аңлашылғас, уңайлы мәлдә тотоп, Башҡорт хәрәкәте Советтар менән килешеү төҙөй.



**Башҡорт автономияһы төҙөлгәндә унда большевиктар булмай, уны улар төҙөмәгән. Һәм Совет власы килгәс, улар автономияны большевиклаштырырға маташа. Һәм улар шундай яҙма ҡалдыра: "Ҡаҙаҡ автономияһы менән артыҡ мәшәҡәт булманы, улар шундуҡ баш һалды. Ә бына башҡорттарҙы контролдә тотоуы ауыр, улар бер төптән, беҙҙең сәйәсәткә ыңғайламайҙар. Уларҙың Вәлидов тигән бәйғәмбәрҙәре бар". Йәғни, башҡорт халҡы әйҙәүсе, нимәгәлер күтәреүсе башлыҡтарына бәйғәмбәргә ышанғандай ышана һәм уның өсөн йән аямай утҡа ла, һыуға ла инә. Уларҙа шундай тоғролоҡ!**

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Тарихыбыҙҙың бик күп биттәрен белмәйбеҙ. Ул хаҡта аталарынан, олаталарынан ишеткән кешеләр булыуға ҡарамаҫтан, йөҙ йыл элек кенә булған был ваҡиғалар - Башҡорт автономияһын төҙөү тарихы ла онотола бара. Әммә бөгөн уларҙы хәтерләүгә сәбәп бар: 2019 йылда Башҡорт автономияһының 100 йыллығын байрам итәсәкбеҙ. Шул оло сара алдынан уҡыусыларыбыҙға хәтер һандығына күҙ һалырға тәҡдим итәбеҙ: кемдәрҙәндер ишеткән хәл-ваҡиғалар тураһында яҙып ебәрегеҙсе редакциябыҙға.**

**Миләүшә ХӘБИЛОВА**
**әңгәмәләште.**

*УЛАР АВТОНОМИЯ ЯУЛАНЫ*

# ҺӘЙКӘЛДӘРГӘ ЛАЙЫҠ ИСЕМДӘР



**1917-1920 йылдарҙағы Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте тарихы, унда ҡатнашҡан эшмәкәрҙәр тураһында һуңғы йылдарҙа байтаҡ яҙылды. Башҡорт халҡының күп кенә арҙаҡлы улдары: Әхмәтзәки Вәлиди, Муса Мортазин, Юныс Бикбов, Шәриф Манатов, Фәтхелҡадир Сөләймәнов, Ғәлимйән Таған, Хафиз Ҡушаев, Сәғит Мерәҫов, Мөхәмәтхан Ҡулаев һәм башҡаларҙың яҡты исемдәре халыҡҡа ҡайтарылды. Әммә шуға ҡарамаҫтан, автономия өсөн көрәштә ҡатнашҡан, милли-азатлыҡ хәрәкәте тарихында тәрән эҙ ҡалдырған күп кенә эшмәкәрҙәрҙең исемдәре киң йәмғәтселеккә билдәһеҙ ҡала килә.**

Башҡортостандың үҙәк дәүләт тарих һәм үҙәк дәүләт ижтимағи йәмәғәт берекмәләре архивтарында граждандар һуғышы осорондағы башҡорт ғәскәрҙәре тарихына ҡағылышлы фондтарҙы өйрәнгән саҡта милли-азатлыҡ хәрәкәтендә ҡатнашҡан шәхестәрҙең эшмәкәрлеге, биографияһын сағылдырған бик күп документтарҙы осратырға тура килде. Көтөлмәгән ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр ҙә осраны. Мәҫәлән, архив документтары башҡорттоң мәшһүр йырсыһы Ғәзиз Әлмөхәмәтовтың Башҡорт милли хәрәкәтендә әүҙем ҡатнашыуы тураһында бәйән итә. 1918 йылдағы Башҡорт хәрби шураһының фармандарында Ғ. Әлмөхәмәтов Ҡыпсаҡ кантонында ирекле башҡорт отрядын ойоштороусы булараҡ телгә алына

Тикшеренеүҙәр һөҙөмтәһендә тағы ла бик тә ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр тупларға насип булды. Мәҫәлән, Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтендә төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының да әүҙем ҡатнашыуы, етәксе вазифалар биләүе асыҡланды. Шуларҙың береһе - Илдархан Мутин. Тыумышы менән Өфө губернаһы Минзәлә өйәҙенең Үрге Таҡталасыҡ ауылынан (хәҙерге көндә был ауыл Татарстандың Аҡтаныш районында ҡарай). Гәрәй улусы старшиналары нәҫеленән, дворян. Автономия өсөн милли хәрәкәттең башынан йөрөй. 1917 йылдағы бөтөн башҡорт ҡоролтайҙарында ла ҡатнаша. 1918 йылда Башҡорт хөкүмәтенең финанс министры, Башҡорт хәрби шураһы рәйесе Әхмәтзәки Вәлидиҙең урынбаҫары вазифаларын башҡара.

Тағы бер милли хәрәкәт эшмәкәре - ул Хәлим Әмиров. Тыумышы менән Артауыл исемле башҡорт ауылынан (хәҙерге Яңауыл районы). Зәки Вәлидиҙең яҡын көрәштәше. 1918 йылда Башҡорт хөкүмәтендә эшләй. 1919 йылда Петроградтағы башҡорт ғәскәрҙәрендә Башҡорт Республикаһының махсус вәкәләтлеһе (особоуполномоченный) була.

Архив документтары автономия өсөн көрәштә милли интеллигенция ғына түгел, ә башҡорттоң бөтөн элитаһы ҡатнашҡанлығы тураһында һөйләй. Мәҫәлән, башҡорт дворяндарынан мөфтөй Мөхәмәтйәр Солтановтың улы юрист, адвокат Искәндәрбәк Солтанов 1918 йылда Башҡорт хөкүмәтенең хоҡуҡ бүлеген етәкләй, икенсе төрлә әйткәндә, юстиция министры була. Аҡтарҙың Себер хөкүмәте менән һөйләшеүҙәр алып бара.

Данлы Ҡыуатовтарҙан Усман Ҡыуатов 1919 йылда Башҡортостандың финанс һәм һаулыҡ һаҡлау халыҡ комиссары итеп һайлана, Ғүмәр Ҡыуатов иһә унан һуң республиканың һаулыҡ һаҡлау комиссариатын етәкләй, ә Хажиәхмәт Ҡыуатов 1918 йылда хәрби милиция начальнигы булып хеҙмәт итә. Батша армияһы подполковнигы дворян Шаһиәхйәҙәр Аҡсулпанов 1918 йылда 1-се Башҡорт пехота дивизияһы менән етәкселек итә. Шулай уҡ башҡорт ғәскәрендә Дәүләт думаһы депутаты Шаһиәхйәҙәр Сыртлановтың улы Йосоп та хеҙмәт итә. Ризаитдин Фәхрединовтың улы Ғәбдрахман 1918 йылда милли хәрәкәттең матбуғат органы - "Башҡортостан хөкүмәтенең теле" гәзитенең мөхәррире булып эшләй, данлы Ҡарамышевтар нәҫеленән ағалы-ҡустылы Гәрәй, Әмир, Мөхтәр, Сөләймән Ҡарамышевтар ҙа йәне-тәне менән автономия идеяһына фиҙаҡәр хеҙмәт итә.

Милли хәрәкәттең географияһы ла бөтөн башҡорт ерҙәрен үҙ эсенә ала. Илдархан Мутин, Хәлим Әмиров, Муллаян Халиҡов, Шәйехзада Бабич төньяҡ-көнбайыш башҡорттарынан булһа, Харис Йомағолов, Яхъя Сәлихов - Һамар губернаһынан, Сәғит Мерәҫов, Аллабирҙе Йәғәфәров, Хәсән Әхмәров - Ырымбур яҡтарынан, Ғәлимйән Таған, Сәйетгәрәй Мағазов - Ялан-Ҡатай (хәҙерге Ҡурған өлкәһе) башҡорттарынан, Нуриәғзәм Таһиров, Хафиз Ҡушаев, Ғәбделхай Иркәбаев, Ғәбделхаҡ Ғәбитов, Ғариф Мөхәмәтйәров иһә - Силәбе башҡорттарынан.

Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтендә ҡатнашыусыларҙың, ҡыҙылдар яғында йөрөһә лә, аҡтар яғында йөрөһә лә, ниәте бер - башҡорт халҡына азатлыҡ, автономия яулау, Башҡортостан дәүләтселеген ойоштороу булған. Уларҙың байтағы ошо изге көрәш юлында йәнен фиҙа ҡылһа, ҡалғандарының ғүмерен 30-сы йылдарҙың Сталин золомо өҙә. Бөгөн беҙ Башҡортостан тигән республикала йәшәүебеҙ менән 1917-1920 йылдарҙағы ошо Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте эшмәкәрҙәренә ғәйәт ҙур бурыслыбыҙ. Уларҙың яҡты иҫтәлеген мәңгеләштереү - уларға булған бурысты ҡайтарыу булыр ине. Милли хәрәкәт тарихында тәрән эҙ ҡалдырған ирҙаматтарының исемдәрен башҡалабыҙ Өфөлә лә, уларҙың тыуған яҡтарында, район үҙәге лә һәм ауылдарҙа ла мәңгеләштереү үтә зарур.

**Азат ЯРМУЛЛИН.**

***✓ Пилоткамды сисеп, йылмайған йөҙөмдө юғарыға сөйөп, күҙҙәремде йомдом. Йәнем кинәнес кисерҙе, күңелем исемһеҙ юлдашымды бейеүгә саҡырып, шашып-осоноп "Ямғыр вальсы"нда әйләнергә тотондо.***





# САҠЫР МИНЕ ЗӘҢГӘР КИҢЛЕКТӘРГӘ...

Хәйҙәр ТАПАҠОВ

(Повестан өҙөк)

– Киреһенсә, һеҙ мауыҡтырғыс хикәйәсе. Сандты уҡығаным бар ине, әммә яҙыусы менән композиторҙың мөхәббәте хаҡында белмәй инем.

Ишек ауыҙында теге икәү күренде. Ситкәрәк барып урынлаштылар. Себеш бойондороҡһоҙ ҡиәфәттә, ҡоласын йәйеп ултырғысҡа ҡунды ла бойорғандағылай һөрәнләп, ике һыраға заказ бирҙе. Сигарет сығарып тәтәтеп ебәрҙеләр. Хәләлен ят ҡатын менән тотоп рәнйегән ауыл бисәһе фиғелендәге Себеш тишерҙәй итеп нәфрәтләнеп миңә төбәлгән.

- Был ҡыҙҙар һеҙҙең таныштарығыҙға оҡшаған? - Һорау шыбырҙап тиерлек әйтелде.

- Эйе, уларҙы ҡайһылыр кимәлдә беләм, бөгөн иртән эскәмйә аша янымда ултырып киткәйнеләр.

- Мәкерлеккә бына тағы бер миҫал. Беҙ ир заттарын шәхси милкебеҙ һымаҡ ҡабул итеп өйрәнгәнбеҙ. Һәр ҡатын-ҡыҙ Ер шарының барлыҡ ир-аты менән бер үҙе, бер юлы хакимлыҡ итеүҙән дә баш тартмаҫ ине.

Официантты ҡарашым менән янıбыҙға саҡырҙым:

- Беҙгә...

Юлдашым башлағанымды ипле генә итеп бүлдерҙе:

- Ҡара кофе, ә старшинаға...

- Мөмкин булһа, ҡаты итеп яһалған һөтлө сәй. Тағы, күрше буш өҫтәлдәге сәскәләрҙе беҙҙең янға күсерһәгеҙ, һәйбәт булыр ине.

Һалҡау, теләр-теләмәҫ ҡымһырлаған официант ваҡытһыҙ бимазалауға ризаһыҙлығын белдереп, шешмәк йөҙөн турһайтһа ла, ҡабаланмай йөрөп әйтелгәндәрҙе үтәне.

- Астралар быйылғы көҙҙөң һуңғы йәме. - Нәфис бармаҡтар һыйпағандағылай сәскә бәбәктәренә ҡағылып алды.

Ул арала беҙҙе йонсотҡан пианист урынынан тороп, асыҡ ишек яғына йүнәлде. Моғайын да, тартып алырға иткәндер. Уның артынса шешәләрен үҙҙәре менән алған Себеш менән Өйрәк Бәпкәһе, үсеккәндәй, тырт та мырт баҫып сығып киттеләр. Нисектер тыныс, һил булып ҡалды.

- Һөтлө сәй... Һеҙ сығышығыҙ менән ауылданмы?

- Эйе.

- Мин Ленинградтан.

- ?..

- Ә кеше ҡулы ҡағылмаған тәбиғәт, күл буйындағы ҡайын ағастарына һыйынған ауыл, аҙбар һайғауына бәйләнгән ҡыл арҡан минең өсөн томан артында ҡалған мираж. Ҡайһы саҡ уның ысынбарлыҡҡа тап килгәнлегенә шикләнә биреп тә ҡуям.

- Мегаполис, төпкөл ауыл, кимәлдәребеҙ тап килмәй бит. Бер һүҙ менән әйткәндә цивилизация барып етмәгән провинция.

- Киреһенсә... нишләптер һеҙҙең менән рәхәт, үҙемде яҡлаулы һәм һаҡлаулы тоям. Беҙ бер-беребеҙҙе бала саҡтан, әллә ҡасандан белгән таныштар төҫлө. Быны йән яҡынлығы тиҙәрме әле? Әйткәндәремде, зинһар, әрһеҙ ҡыҙҙанлау тип ҡабул итмәгеҙ.

Официант счет килтерҙе. Һыйға түләүҙән тыш, этикетка ярашлы, меню папкаһының араһына "сәйлек" аҡса ҡыҫтырҙым да ҡатынға урынынан торорға ярҙамлаштым. Уның ҡул осо боҙҙай һалҡын ине, бәлки, шуғалыр, бармаҡтарын йылы усымдан алырға ашыҡманы.

Кафенан сыҡҡас, урам ҡаршыһында сәскәләр менән һатыу иткән ҡарсыҡты күреп ҡалдым.

- Бер мәлгә генә һеҙҙе ҡалдырайым инде. - Шулай тинем дә, тегенең янына ашыҡтым.

Һалынып төшкән мул итәкле күлдәк кейгән, тәбәнәк буйлы, көнгәрт, быжыр йөҙлө, сыбыҡланып һибелгән ҡара сәсле сиған ҡарсығы мине күргәс, күптәнге танышын осратҡандай, ҡоласын йәйҙе:

- Ай-аййяя, ласковый и добрый солдатик, дубридин чяво! Мишто йавьян!

Частә өсөнсө роталағы отделение командиры Цуркан һөйләшкәндә йыш ҡына туған телендә мөрәжәғәт итергә ярата, шуға, киң ҡулланылған молдаван һүҙҙәрен ҡайһылыр кимәлдә аңлайбыҙ.

- Һаумыһығыҙ?

- Беҙҙең һымаҡ йәштәгеләрҙең йәше лә булмай, сирләмәйҙәр ҙә. Һаумын әлегә, бирешкән юҡ.

Һылуы бизрәләге сәскәләрҙе ҡараған арала ҡарсыҡ һүҙ яңыртты:

- Бында сиған ҡарсығы ҡайҙан килеп юлыҡҡан тимәксеһеңме? Һуғыштан һуң туғандарһыҙ тороп ҡалғас, Бессарабиянан табор менән ил гиҙергә сығып киттем дә ошонда килеп төпләндем. Ҡалала бер туғандай ике тиҫтәгә яҡын милләт йәшәгәс, үҙ кешегә әүерелеп бөттөм күптән. Минең дә төпсөк улым Алеко армияла. Быйыл һына алдылар. Шуға хәрби кейемдәге берәйһен осратһам, яҡынымды күргәндәй, йөрәгем терт итә лә ҡала. Яныма буштан буш килмәнең бит инде, һиңә, моғайын да, сәскәләр кәрәктер?

- Бынау аҡ астраларҙы бирһәгеҙ...

- Улар анау аҡкүшкалыр? - Эйәге менән кафе ауыҙына ымланы.

- Эйе. Уға.

- Чергэнь... Ундайҙарға бәхет йылмая һалып бармай, ҡуҡтәге йондоҙ ише атылалар ҙа янып юҡҡа сығалар... - Ҡарсыҡ шулай үҙ алдына һөйләнеп, сәскәләр һайларға керешеп китте.

- Рәхмәт. Күпме түләргә?

- Сәскәләргәме? Әйтәм бит, улым армияла, шуға һеҙҙең һымаҡтарҙан аҡса алмайым. - Рәхмәтле йылмайҙым да китергә йыйынғайным ғына ҡарсыҡтың шыбырҙауы ҡайырылырға мәжбүр итте:

- Көҙгөләгеләй үтә күрәм, шуға, алдан киҫәтмәй ҡала алмайым. Тураһын әйткәнгә рәнйемә, егет, һеҙҙең осрашыуығыҙ оҙаҡҡа бармаҫ. Шуға икегеҙгә бүленгән ваҡытты ҡәҙерен белеп ҡалығыҙ. Аҡҡошоң парын юғалтҡан яңғыҙ йән. Ул һиңә мөхәббәттең нимә икәнен төшөндөрөргә юғарынан ебәрелгән фәрештә. Аҡ фәрештә. Һөйөүҙең асылын аңына һеңдерер ҙә юғарыға, асманға мәңгелеккә осоп китер... Йавэнте састэ!

- Һеҙ иғтибарлы. - Ҡатын сәскәләрҙе ҡабул итеп ҡәҙерләп күкрәгенә ҡыҫты ла миңә ҡарап һөйкөмлө йылмайҙы.

- Көҙ көнө умырзаялар үҫмәй шул, - тинем, үкенгәндәй.

- Ә һеҙ миңә сәскә бүләк иткән беренсе ир кеше. - Аңламай ҡарауымды күреп, дауам итте. - Алтын, ҡиммәтле әйберҙәр, кейем-һалым алып бирәләр, ә бына сәскә бүләк итергә оноталармы, әллә урыныңыҙ һанайҙармы, белмәйем.

- Беренсе булып сәскә бүләк итә алыуым менән бәхетлемен.

- Бәхетле булырға ашыҡмағыҙ...

Яй ғына атлап, ҡала ситендә урынлашҡан офицерҙар ҡаласығы яғына йүнәлдек, биш ҡатлы йорттоң урта подъезы тапҡырында туҡталдыҡ.

- Беҙ ошонда йәшәйбеҙ... - Өндәшеү рыя, тарҡау ишетелде. Ҡатындың арыуы йөҙөнә сыҡҡан. - Бая һеҙ бәхет хаҡында әйттегеҙ. Нимә һуң ул бәхет?

- Ул, моғайын, тапҡаныңа шатланыуҙан күңел осоноуылыр.

- Улай ғына түгел. Аңғармаҫтан өҫкә килеп ауған ҙур бәхет булмай. Көн һайын кисергән бәләкәй генә ҡыуаныстар йыйылмаһы ул бәхет.

Китергә лә ҡыймай, хушлашырға ла ашыҡмай, бинһая ваҡыт урыныбыҙҙа тапандыҡ.

- Исемләп танышманыҡ та. Быныһы артыҡ та, урынһыҙ ҙа, минеңсә, - тине ҡатын.

- Александр Блоктың "Прекрасная незнакомка" тип аталған шиғыры бар.

- Пушкинды яттан һөйләй алһағыҙ ҙа был юлы буталдығыҙ. Уның 1906 йылда яҙған киң билдәле шиғыры "Незнакомка" тип кенә атала:

*... И шляпа с траурными перьями,*
*И в кольцах узкая рука…*

Һеҙ бөгөн миңә бәләкәй генә бәхет осмотон бүләк иттегеҙ. Һау булығыҙ. - Нәзәкәтле хәрәкәтләнеп ҡулын һондо.

Был осраҡта тәрбиәле ир егет килешле эйелеп, ҡулды үбеп ала, гәҙәттә, ә мин бармаҡтарҙы усымда килешһеҙ йомарлап ҡуйыу менән генә сикләндем һәм ошонан да күбенә һәләтһеҙ икәнлегемде аҡларға теләгәндәй, танау аҫтынан мығырҙаным:

- Күңелле осрашыу өсөн рәхмәт.

- Ә һеҙгә ҡара кофе... һәм йылы ҡулығыҙ өсөн.

- Бәлки, бер ҡасан һөтлө сәй менән дә һыйлармын әле.

- Был мөмкин түгел... Хәйер, кем белә...

Томандай болот ҡаплаған бөләнгерт күк йөҙөнән берәм-һәрәм ваҡ тамсылар тамғылай башланы. Усымды ямғырға ҡуйҙым.

- Шопендың "Ямғыр тамсыһы" ла беҙгә килеп етте. Тимәк, яңғыҙығыҙҙы ғына ҡалдырмайым.

Бер ни тиклем ер киткәс, артыма ҡайырылдым. Талсыбыҡтай һын урынынан ҡуҙғалмай, мине ҡарашы менән оҙата ине.

Ә ямғыр яйлап ҡына көсәйгәндән-көсәйә барып, эргәләге йорттарҙың тәҙрә быялаларына бәрелдә, ҡалай ҡыйыҡтарҙы көйлә дыңғырҙатты, һыуылы устары менән ағас тәлгәштәренән һыйпаны, тамаҡҡа баҫҡандай суйырташ тротуар-һуҡмаҡта һикереште. Муйыным буйлап һарҡҡан һалҡын тамсылар, сирҡандырып, гимнастеркамды еүешләне. Ә мин юлымда осрағандар ише ышыҡҡа боҫманым, киреһенсә, пилоткамды сисеп, йылмайған йөҙөмдө юғарыға сөйөп, күҙҙәремде йомдом. Йәнем кинәнес кисерҙе, күңелем исемһеҙ юлдашымды бейеүгә саҡырып, шашып-осоноп "Ямғыр вальсы"нда әйләнергә тотондо.

Юғарыла атаған сержант мәктәбенә курсант сифатында хәрби хеҙмәткә килеп ике ай үттеме-юҡмы, санчаскә фельдшер итеп күсерҙеләр. Беҙҙең менән килеүселәр араһында алты медицина хеҙмәткәре бар ине, шуларҙың икәүһен генә конкурс нигеҙендә тикшереп ҡабул итеп, бында ҡалдырҙылар ҙа ҡалғандарын икенсе частәргә оҙаттылар. Уларҙың да һөнәрҙәре буйынса эшләре билдәле, сөнки медицина хеҙмәткәрҙәре бөтә урында ла кәрәк. Йәш һалдаттар, йәғни курсанттар, алты ай дауамында уҡыйҙар ҙа, имтихан тапшырғандан һуң, кесе сержант званиеһын алып, хеҙмәттәрен дауам иттереү маҡсатында илдең сик буйҙарына юлланалар. Мәктәптә команда составынан тыш, отделение командирҙары, взвод командирҙарының урынбаҫарҙары, уҡыу барышын тәьмин итеүсе хужалыҡ взводы ғына ҡала. Формаль рәүештә шул һуңғыһында иҫәптә торам: ҡорал бүлмәһендә бер тапҡыр ҙа ҡулыма алып, ҡороп-һүтеп таҙартмаған автоматым, кейеп ҡарамаған противогазым бар. Ни тиһәң дә, хеҙмәттәмен бит, шуға күрә хәрби комплектымдың ҡайҙа ҡуйылғанлығын аныҡ беләм, аҙна һайын тәҙөклөгән тикшерәм. Коллегаларым - фельдшер Андрей Диденко, аптека мөдире, прапорщик Николай Герасимов, ҡаланан килеп эшләп йөрөүсе теш табибы татар ҡатыны Римма Ильясова, өлкән йәштәге йыйыштырыусы, беҙҙеңсә әйткәндә, санитарка Анна Максимовна, начальнигыбыҙ Мәскәү кешеһе терапевт Лыков Иван Иванович. Һаҡаллы сабый фиғелле, уҫлаптай кәүҙәле, боронғо таш быуатта йәшәгән питекантроп нәҫеләнән күскән оло башлы, ҡаш өҫтә һөйәге сысайып алға сығыңҡыраған яҫы маңлайлы Герасимов үтә лә моңһоҙ йән. Николай өсөн үгеҙ үлһә - ит, арба ватылһа - утын, хеҙмәттәштәре уны һыртынан Тургеневтың "Муму"һындағы мыҡым геройға оҡшатып, Герасим тип кенә йөрөтә. Римма Ильясованың холҡо теш табибы һөнәренә бер ҙә генә лә тап килмәй, ул әртисләнергә яраткан, илауы ла, көлөүе лә бергә йөрөгән үтә хисле ҡатын. Анна Максимовна лурҡайып, күбәләй мөлкөп ултырғанда ғына түгел, онотҡанда бер баҫып атлап барғанында ла ой-ой киткеләй.

**(Дауамы бар).**

✓ *Иллә мәгәр әбейҙең юрағаны юш килде: ғүмерем буйы һүҙ менән эш иттем, туған телем хазиналарынан ҡыуаныс, кинәнес алып йәшәнем һәм эшләнем, Хоҙайға мең шөкөр.*



*Ш. ХОҘАЙБИРҘИН ИСЕМЕНДӘГЕ ПРЕМИЯҒА ТӘҠДИМ ИТЕЛДЕ*

# ҺҮҘ-ҠАНАТҠАЙҘАРЫМ, ҠӨҘРӘТ БИР...



**Журналистарҙың Ш.Хоҙайбирҙин исемендәге Хөкүмәт премияһына дәғүә итеүселәр араһында редакциябыҙ хәбәрсеһе - 1984 йылдан РФ һәм БР Журналистар союзы ағзаһы, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА ла бар. Ошо уңайҙан гәзит уҡыусыларыбыҙға хеҙмәттәшебеҙҙең ижадҡа илтеүсе юлдар, тәжрибә туплау серҙәре, остаздары, журналист һөнәренең үҙенсәлектәре хаҡындағы фекерҙәрен тәҡдим итәбеҙ.**

## Журналист һөнәре йәлеп итте

Яңғырауыҡ, ҡупырыҡ һүҙҙәр ятратмайым, шуға ла һис бер пафосһыҙ һәм арттырыуһыҙ әйтәм: гәзит эшенә мине әсәм теле алып килде. Бәләкәйҙән әсәйемдең тапҡыр, сәсән теленә илтифат бирҙем. Һүҙ ыңғайы әсәйем кинәйәле әйтем, мәҡәлдәр әйтеп ебәрһә, уйлап йөрөйөм-йөрөйөм дә, йомаҡты сисә алмаһам, әсәйемдән мәғәнәһен һорашам. Күңелдәрендә, телмәрҙәрендә, ҡарһүҙ әйтеү оҫталыҡтарында халҡыбыҙҙың рухи хазиналарын йөрөткән инәйҙәр менән дә күп аралаштым. Уң яҡ күршебеҙҙә Ғәйниямал инәй йәшәй ине. Һуҡыр булды. Ҡайҙа барһа ла: Йылайырҙан көйәнтәләп һыу ташыһа ла, ҡунаҡҡа барһа ла мин уны етәкләп йөрөттөм. Үҙенсә мине әүрәтеүе булдымы (сөнки ҡыҙҙар уйнарға саҡыра) - миңә күп итеп йомаҡ өйә йә әкиәт һөйләй - янынан ебәрмәү яғын ҡарай; кис үҙе янына ҡунырға саҡырһа, доғалар көйләп, минән ятлаттыра.

Тағы бер инәй хәтеремдә ныҡ ҡалған. Ҡараусыһыҙ булмаһа ла, алыҫыраҡ туғанының киленен өнәп бөтөрмәй, өй беренсә йөрөп ятыр ине. Әсәйемдәр бесәндә, миңә 7-8 йәштәр самаһы, өй көтәм. Шулай бер көн әлеге Гөлбәзир инәй беҙгә килеп инде. Тупһала һөйләшеп ултырабыҙ. Был илаулай, ауыр тормошонан, килененән зарлана, күгәргән тәнен күрһәтә. Уны бик йыуатҡым, күңелен ауларлыҡ йылы һүҙҙәр тапҡым килә. Шунан әсәйемдең йыш ҡабатлаған бер аҡылы иҫкә төшә: "Инәй, илама. Күргәнгә - түҙем бирһен, күрмәгәнгә - күрһәтмәһен", - тигән булам. "Ҡалай ҙур кешеләр һымаҡ әйттең, балам, телеңдән ҡыуан!"- тип, ҡат-ҡат арҡамдан ҡағыуын әле булһа тоям һымаҡ... Иллә мәгәр әбейҙең юрағаны юш килде: ғүмерем буйы һүҙ менән эш иттем, туған телем хазиналарынан ҡыуаныс, кинәнес алып йәшәнем һәм эшләнем, Хоҙайға мең шөкөр.

Мәктәпкә барғас, шиғырҙар яҙып маташҡан булдым, гел стена гәзите сығарырға ҡушалар ине миңә. Күңелемдән гел генә һүҙ уйната инем. Бөтөнләй бәләкәй генә саҡта ҡыҙҙар менән ярышып-ярышып сынаяҡ, быяла ярсыҡтары - тәтәйҙәр йыябыҙ: кемдеке матурыраҡ? Үҫә төшкәс, был бер ғәжәп аллегорияға әүерелде. Әлеге күңелемдән уйнатып йөрөгән һүҙҙәр миңә төрлө төҫтәге, төрлө биҙәкле тәтәйҙәрҙе күҙ алдына баҫтыра ине. **Эстән генә мәғәнәне дөрөҫ итеп кенә түгел, ә тапҡыр, экспрессив итеүсе һөйләмдәр төҙөү - бөгөн дә минең яратҡан күңел шөғөлөм.**

## Остаздарҙан алған һабаҡ

Эйе, йәш журналистың уңышлы эшләп китеүе-китмәүе йәнәшендәге остаздарына ла бәйле. Был йәһәттән мин үҙ остаздарымдан уңдым, тип әйтә алам. 1975 йыл БДУ-ның филология факультетын тамамлағас, йүнәлтмә буйынса үҙемдең тыуған районға Баймаҡҡа ҡайттым, тик бер ҙә генә мәктәпкә барғы килмәй, нишләптер, ҡурҡыта: оялсан, ҡыйыуһыҙ, етмәһә, ошондай бәләкәй генә уҡытыусы буламы, тип уйлайым. Ә дөрөҫөн әйткәндә, бигерәген дә гәзит үҙенә тарта. Юл сатында шул саҡ яҡшы кешеләр осраны - мин райондың "Октябрь байрағы" гәзитендә эшләп алдым да киттем. Мөхәррире Борхан ағай Сәмиғуллин менән башҡортсаға дубляж буйынса мөхәррир урынбаҫары Тәфтизан ағай Ушанов тәүге уҡытыусыларым булды. Үкенескә, икеһе лә мәрхүмдәр инде, ләкин хәтеремдә һәр ваҡыт тере килеш торалар. Гәзит тәүҙә урыҫ телендә яҙылып, унан башҡортсаға ауҙарыла ине. Мине тәржемәсе итеп алдылар. Бик фәһемле, киләсәк эшем өсөн файҙалы мәктәп булды был, сөнки журналист иң тәүҙә тәржемәне яҡшы үҙләштерергә, дөрөҫ итеп һөйләм төҙөй белергә бурыслы. Артабан кеше мәҡәләһен ауҙарып ваҡыт үткәрергә түгел, ә үҙаллы һәм үҙ телемдә яҙып ҡарағы килә башланы. Ошо хыялым мине баш ҡалабыҙға әйҙәне. Партияның өлкә комитеты нәшриәтендә корректор булып урынлаштым - барыбер ҙә Һүҙ ғали йәнәптәренә яҡыныраҡ. Әйткәндәй, буласаҡ журналисты корректор һөнәре лә бик күп нәмәгә өйрәтә. Шул ыңғайҙан курсташтарым шағирҙар Зөһрә Ҡотлогилдина, Рәмил Йәнбәк һәм Зөбәржәт Миңлебаева эшләгән "Башҡортостан пионеры" гәзитенә килеп, темалар ала, мәҡәләләр яҙа башланым. Мөхәррир шағир Сафуан ағай Әлибай ине. Яҙғандарымды хупланылар, күп тә үтмәне, иҫ киткес күркәм күңелле, һәр яҡлап матур бер апай - Һәҙиә Яҡупова етәкселек иткән мәктәп бүлегенә эшкә алдылар.

Мәҡәләләремде "Совет Башҡортостаны"нда ла иғтибар менән уҡып барғандар икән. Бер ваҡыт унда эшкә саҡыралар. "Совет Башҡортостаны"нда эшләү минең өсөн хыялдымдың иң юғары түбәһе булғандыр. Ул замандарҙа был гәзиткә "урамдан" осраҡлы кешеләрҙе алманылар. Бер ҡарт журналист әйтмешләй, "энә күҙәүенән" үткәрәләр ине. Мөхәрриребеҙ бик талапсан, ләкин ғәҙел кеше - Абдулла Исмәғилев. Бөгөн дә хәтерҙә: беҙ яҙғанды әлегеләй энә күҙәүенән үткәреп, материалдарҙы пинжәген сисеп ташлап, күлдәк еңдәрен һыҙғанып уҡыр ине. Верстканан һуң материалдар корректорҙарға килгәс, ҡыҙҙар янына инеп, шым ғына мәҡәләм нөсхәһен ҡарап сығам: мөхәррир ниндәй төҙәтмәләр индерҙе икән? **Яҙғаныңды берәй талапсан мөхәррирҙең төҙәтеүенә үпкәләмәү, киреһенсә, уны рәхмәтле булып ҡабул итеү шулай уҡ күп нәмә бирә башлап яҙыусыға.** Ғөмүмән, сирек быуаттан ашыу "Совет Башҡортостаны", унан "Башҡортостан" тип үҙгәртелгән гәзиттә эшләгән осор ғүмеремдең иң бәхетле йылдары булды. Остаздарымдың, исем һәм званиеларын әйтеп тормағанда ла  кем икәндәре яҡшы билдәле талантлы, көслө журналистар Дәүләт Мәһәҙиев, Рәүеф Насиров, Ризван Хажиев, Әниф Бикҡолов, Аҫылғужа Баһуманов ағайҙар менән бер коллективта эшләү үҙе бер оло тормош мәктәбе булды. Әлеге ваҡытта "Киске Өфө"лә бергә эшләгән Гөлфиә Янбаева хеҙмәт биографиямдағы 8-се мөхәррирем була. Шул уҡ ваҡытта"Башҡортостан" гәзите мөхәррирҙәре Мансур Әнүәр улы Әюпов менән Тәлғәт Ниғмәтулла улы Сәғитовҡа, мөхәррир урынбаҫары Марсель Әхсән улы Ҡотлоғәлләмовҡа рәхмәттәрем ҙур. Кешелекле, ярҙамсыл, талантлы (бөгөнгө тел менән әйткәндә)  менеджерҙар ҙа, журналистар ҙа булды улар.

## Ул замандың яҡшыһы ла булды

Һәр замандың үҙ йыры, тиҙәр бит. Беҙ, мәҫәлән, журналист һәм шәхес булараҡ та торғонлоҡ мисәте һуғылған замандарҙа формалаштыҡ, ләкин минең был заманды бер ҙә яманлағым килмәй. Бәхәсләшмәйем: яҡшыһы ла, насары ла аҙ булманы. Бер партиялы идара итеү системаһынан килә ине бөтөн бәлә: авторитаризм, бойороҡ-хакимлыҡ алымдары, партия етәкселегенең  серегән бюрократлыҡҡа  әүерелә барыуы һәм башҡалар. Яҡшы яҡтан мин ул замандағы хеҙмәт энтузиазмын билдәләп китер инем. Шул осорҙа ғына Башҡортостандан күпме Социалистик Хеҙмәт Геройҙары сыҡты: Риза Яхин, Гәүһәр Фәйзуллина, Фира Ниғмәтуллина һ.б. Беҙ, журналистар ҙа, ул замандарҙа шундай уҡ энтузиазм менән эшләргә өйрәндек. Бөгөн журналистиканың баһаһы төштө, тигән фекер менән килешә алмайым. Бөтөн ғилләә, бәлки, ошоға тиклем илдең сәйәси системаһында тәғәйен йүнәлеш,  аныҡ платформаның формалашып бөтмәүендәлер? Йыш ишетергә тура килә бит, юғиһә: беҙ ҡайҙа барабыҙ, ниндәй илдә йәшәйбеҙ? Нимәләр хаҡында яҙырға? Уның ҡарауы, бөгөнгө калейдоскоп кеүек күҙ эйәрмәҫ ваҡиғаларҙы яҡтыртыуҙа журналистарҙың оперативлыҡ һыҙаттары нығыраҡ асыла. **Ә журналист һөнәренең абруйы һәр заманда ла булды, бөгөн дә ул бар, тип уйлайым. Тик беҙгә хәҡиҡәткә тоғро булырға кәрәк. Журналист абруйы шундай шарт менән генә йәшәй ала.**

## Көн талабы - аналитика

Аналитик мәҡәләләр журналистан теге йә был мәсьәлә хаҡында  бәйән итеп, проблеманың сәбәптәре һәм эҙемтәләрен асыҡлауға ғына ҡоролмай, бәлки, ситуацияға  тәнҡит күҙлегенән ҡарауҙы ла талап итә. Ҡоро тәнҡит түгел, ә ижади, "кешелекле" тәнҡит урын алырға  тейештер, тигән уйҙамын, сөнки ҡыра һуғып бөтөнөһөн инҡар итеү өсөн күп аҡыл кәрәкмәй, ул тәнҡит түгел, фәҡәт инҡар итеү. Аналитикала проблема эсендәге ыңғай шытымдарҙы күреп алырға, унан күңел ҡыуандырғыс үҫенте килтереп сығарырға кәрәктер, моғайын. **Юғиһә, беҙ тик кире күренештәргә генә  баһа бирергә, ҡоро тәнҡиткә күнектек, ә күнегергә ярамай. Ыңғайға күнектерәйек күҙ-ҡолаҡтарыбыҙҙы, тимәксемен. Шул ғына.**

## Тағы ниндәй темалар?

Үҙемде борсоған күренештәр тураһында "Киске Өфө"нөң тәүге битендәге "Әйт, тиһәгеҙ...",  3-сө  биттәге  "Килешмәйем!" һәм "Тураһын әйткәндә..." тигән рубрикаларға яҙышам. Әлбиттә, башҡа темалар ҙа йәлеп итә. Әйтеүе ҡыйын: ҡул етмәйме, дарманмы, һәләтме... Гәзит жанрҙарын биш бармағыңдай үҙләштереү ҙә ҡәнәғәтлек бирмәй. Иң кәрәкле, иң аҫыл һүҙҙәр әле әйтелмәгән һымаҡ тойола миңә. Сер итеп кенә әйтәм инде: минең дә хеҙмәттәшебеҙ Әхмәр Үтәбай һымаҡ яҙғы килә бик тә... Тик  үҙ ҡалыбыңдан сығыу юлы ҡайҙа икән? Ижадсы өсөн иң ҡурҡынысы - ҡалыплашыу. Әҙип гәзиттә эшләй алһа ла, журналистар әҙәбиәткә һирәк килә, килһә лә, барыбер гәзит телле публицист булып ҡала. Ошо урында гел генә Максим Горькийҙың һүҙҙәре иҫемә килә лә төшә. Йүнәтеберәк, матурлабыраҡ әйткәндә, осор өсөн тыуғандар ғына оса ала, тигәнме шул? **Илһам ҡанаттары Хоҙайҙан бирелә, тибеҙ ҙә ул, ә бына баяғыса бөтөн булмышың менән һүҙ донъяһына, һүҙ тылсымына, һүҙ ҡөҙрәтенә ынтылғанда ярала бит ул ижад  ҡанаттары ла, һәләт тә, йондоҙло уйҙар ҙа, тик уны ваҡытында нығыта, үҫтерә, яҡтыраҡ балҡыта, үткерләй барырға ғына кәрәк.** Икенсе төрлө әйткәндә, кәмендә “осорға” тырышырға кәрәк. Һүҙҡанаттарыңа таянып...

ИНТЕРНЕТТАН



# ЗАМАНА БАЛАҺЫ...

## ул ниндәй?

■ Бристоль университеты ғалимдары бөгөнгө замандағы йәшәү рәүеше балаларға кире тәьҫир итә, тип белдерә. Һуңғы 16 йылда яман шеш менән ауырыусы йәштәр һаны 40 процентҡа арткан, быға атмосфераға бүленеп сыҡҡан зарарлы матдәләр, пестицидтар, дөрөҫ туҡланмау, радиация "гәйепле". Британия ғалимдары дәүләт статистикаһын анализлаған һәм илдә 1998 йыл менән сағыштырғанда яман шеш менән сирләүселәр иҫәбе 1300-гә артыҡ икәнен асыҡлаған. Яман шеш бигерәк тә 15 йәшлек үҫмерҙәрҙән алып 24 йәшкә тиклемге йәш кешеләр араһында күп. 1998 йылда 100 мең пациентҡа 10 осраҡ тура килһә, хәҙер был һан 16-ға еткән. Был насар сирҙең артыуын, әлбиттә, медицинала диагностикалау өсөн шарттарҙың яҡшырыуы менән дә аңлатып була. Әммә уның барлыҡҡа килеүендә тышҡы факторҙар ҙа бар. Был йәһәттән йәштәрҙең сәләмәтлегенә һауаның бысраныуы, төрлө йыһаздарҙан бүленеп сыҡҡан тулҡындар, бәлки, шулай уҡ кеҫә телефондары радиацияһы кире йоғонто яһай.

■ Ҡайһы бер кешеләрҙең баш мейеһе үҙенсәлекле характеристикаға эйә. Тап ошо үҙенсәлек уларҙы йәш көйө оҙаҡ һаҡлай икән. АҠШ-тың Төньяҡ-Көнбайыш университеты тикшеренеүселәре "ваҡытҡа бирешмәүсе" кешеләр тибын асыҡлаған. "Паспорт" йәшенән күпкә йәш күренеүселәр, ғәҙәттә, яҡшы хәтер менән маҡтана ала. Ғалимдар 80 йәште үткән 62 кешене тикшергән, уларҙың береһе лә хәтере насарайыуға зарланмаған. Һынауҙар барышында аҡыл көүәһе йәһәтенән тиҫтерҙәренән айырылып торған 15 кеше асыҡланған, тест һорауҙарына яуап биргәндә улар 55 йәшлектәргә хас һөҙөмтәләр күрһәткән. Ни өсөн холоҡтары, йәшәү рәүеше, ғәҙәттәре менән бер-береһенә бөтөнләй оҡшамаған кешеләр бер үк һөҙөмтәләргә өлгәшеүен асыҡлап ҡарағандан һуң, медицина хеҙмәткәрҙәре быныҡ баш мейеһенең үлсәменә бәйле булыуын фаразлаған. Ысынлап та, МРТ күрһәтеүенсә, был төркөмдөң баш мейеһе күләме буйынса ҙурыраҡ икәне билдәләнгән. Ғалимдар әйтеүенсә, 40 йәштән һуң баш мейеһе бәләкәйләнә башлай, 10 йыл дауамында ул 5 процентҡа ҡыҫыла, 70 йәште үткәс, процесс тағы ла тиҙәйә.

■ Бөгөнгө мәктәп уҡыусыларының сәләмәтлеге маҡтанырлыҡ түгел, ти Рәсәй белгестәре. Шуға ла белем алыу уларға ауыр бирелә. Ростов университеты ғалимдары билдәләүенсә, уҡыусыларға эмоциональ өлкә үҫеше үҙенсәлектәре менән бәйле психологик проблемалар хас. Уларҙың ҡайһылары ыңғай һәм кире тойғоларҙы ла ауыр айыра, йышыраҡ кире эмоцияларға бирелә, был иһә балалар стресы кимәлен арттыра. Социологтар асыҡлауынса, һәр унынсы бала мәктәпкә йөрөргә лә яратмай, 45 проценты кәрәк булған өсөн генә уҡый, 40 процент бала белем алыуға ыңғай ҡарай. Бөгөнгө заман балалары, ысынлап та, мәктәптән ныҡ арый. 27 проценты арыу кисерә, 4 проценты хроник арыу хәлендә була. 1 процент балалар иһә, киреһенсә, артыҡ әүҙем, был да организмдың һәм нервы системаһын арыта һәм кире эҙемтәләргә килтерә. Үткән быуаттың 70-се йылдарындағы мәктәп уҡыусылары менән сағыштырғанда, бөгөнгө уҡыусы бөтөнләй көсһөҙ. Уларҙың буйҙары ла бәләкәйерәк, физик торошо ла ҡәнәғәтләнерлек түгел. Быға балаларҙың аҙ хәрәкәтләнеүе, телевизорҙы күп ҡарауы, шулай уҡ дөрөҫ туҡланмау, эҫәр һыуҙын сифатһыҙ булыуы ла, ғаиләлә һәм мәктәптә кисергән стрестар булышлыҡ итә.

МОСОЛМАН ДОНЪЯҺЫ

# ҠОРБАН САЛЫУ...

## Аллаһыға яҡынлашыу ул



**Ғибәҙәттең тарихы Ибраһим бәйғәмбәргә ҡайтып ҡала. Аллаһы Тәғәләнең тоғро ҡоло һәм бәйғәмбәре Ибраһим ғәләйһис-сәләм итәғәтлек һәм тәҡүәлек өлгөһө була. Раббыбыҙға яҡын бәндәләрҙән булыуы арҡаһында уны Хәлил тип йөрөтәләр.**

Аллаһы Тәғәлә Ибраһим ғәләйһиссәләмгә уның иманын яңы бейеклектәргә күтәреү һәм итәғәтлеген беҙгә фәһем итеү маҡсатында һынауҙар ебәреп тора. Бәйғәмбәрҙең оҙаҡ ваҡыт балаһы булмай, ул: "Йә, Раббым, миңә пәк күңелле бер ул бирһәң ине", - тип доғалар уҡый. Аллаһы Тәғәлә уны үҙе көүек үк итәғәтле ул менән ҡыуандыра. Улына Исмәғил тип исем ҡушалар. Артабан Ҡөрьәндә был турала шулай бәйән ителә: "Ул (йәғни улы) йомошҡа ярарлыҡ булып үҫкәс, Ибраһим әйтте: "Улым, мин төшөмдә һине (Аллаһҡа) ҡорбан урынына салғанымды күрҙем. Һин был турала нимә уйлайһың?" - тине. Улы әйтте: "Атаҡайым, һиңә (Аллаһтан) килгән әмер нисек булһа, шуны ҡыл. Иншаллаһ, минең сабыр һәм Аллаһҡа итәғәтле икәнемде күрерһең", - тине. Шулай итеп, улар икеһе лә (Аллаһтың әмеренә) буйһондо һәм (Ибраһим) улын йөҙ түбән яткырҙы. Беҙ әйттек: "Эй, Ибраһим! - тинек. - Һин төшөңә тоғро ҡалдың. Шөбһәһеҙ, Беҙ изгелекле ғәмәлдә булғандарҙы бүләкләйбеҙ", - тинек. Хаҡтыр, был ҡәтғи бер һынау ине" (Саффат сүрәһе, 100-106-сы аяттар). Ҡорбан йәннәттән төшөрөлгән тәкә менән алыштырыла. Аяттарҙан күренеүенсә, Аллаһы Тәғәлә Ибраһим алдында ябай кеше аңына килмәслек һынау ҡуя. Ләкин оҙаҡ көткән ғәзиз балаһын, яратҡан улын Раббыһына ҡорбан итергә тигән әмер килеү менән дә ул, Аллаһ әмере мөһимерәк икәнен аңлап, яҙмышына күнә. Исмәғил дә сабырлыҡ һәм итәғәтлек күрһәтә. Ул атаһын йыуата, иблис ташлаған шөбһәләргә бирелмәйенсә, үҙенең рух көсөн күрһәтә. Әммә Аллаһы Тәғәләгә кеше ҡорбаны кәрәкмәй, ул бары үҙенең бөйөк ҡолдарының тоғролоғон ғына һынай. Ысынлап та, ҡорбан салыу сәннәте зөлхизә айының 10-12-се көндәре менән генә сикләнмәй. Дин юлында, Аллаһ рәхмәтен яулау маҡсатында ҡылынған фиҙәкәрлек, итәғәтлек мөъмин кешене тормошоноң һәр аҙымында оҙатып барырға тейеш.

Ҡорбан салыу - ул малдың йәнен алып, уның итен ашау, таратыу түгел. Ул кешенең итәғәтлеге, иманы емеше, ул - Аллаһы Тәғәлә алдындағы фиҙаҡәрлек. Раббыһын таныған, уның ниғмәттәренә рәхмәтле булған әҙәм балаларының үҙҙәрен Яратыусыһы алдындағы изге ғәмәле, Аллаһы Тәғәлә алдында дәрәжәләрҙең күтәрелеүенә сәбәп. Был изге ғәмәл Аллаһы Тәғәләгә ғибәҙәт һәм Уға яҡынлашыу ысулдарының береһе. Ҡорбан һүҙенең мәғәнәһе лә - "яҡынлашыу". Раббыңа үҙеңде, мөлкәтеңде, ғүмереңде фиҙа килтереү менән иҫбатлана. Уның нигеҙендә Аллаһы Тәғәләнең ихтыярына бойһоноу һәм ошоно тормошҡа ашырыу ята. Раббыһы әмеренә күңгәне өсөн генә мосолман изге ғәмәлдә үтәй. Изге Ҡөрьәндә: "Аллаға уларҙың (ҡорбанға килтерелгән малдың) ите лә, ҡаны ла һис барып етмәҫ, әммә уларға һеҙҙең тәҡүәлек барып етер", - тиелә.

Ҡорбанға килтерелгән малдың тәүге ҡаны менән изге ғәмәлде үтәүсе мосолмандың күп гонаһтары ярлыҡана. Кешеләрҙең иң насарҙары, мөмкинлектәре була тороп та, ҡорбан килтермәгән һарандар, тип әйтелә хәҙистәрҙең береһендә. Мөхәммәт бәйғәмбәр Ҡорбан ваҡытында ике малды һуғымға килтерер булған. Береһен - үҙе, икенсеһен өммәте өсөн. Аллаһы Тәғәлә рәхмәтенә өлгәшергә теләгән хәлле мосолмандар ҙа шулай уҡ ике ҡорбан килтерә, береһе - үҙҙәре өсөн, икенсеһе - Бәйғәмбәр хаҡына.

Күп аяттарҙа, хәҙистәрҙә һөйләнә ҡорбан тураһында. Уның мөһимлегенә ислам ғалимдары айырым баҫым яһай. Үҙен мосолман тип һанаған һәм мөмкинлеге булған кешенең изге ғәмәлдән ситтә тороп ҡалырға хоҡуғы юҡ, тиҙәр. Ҡорбанға беҙҙең ерлектә ике йәше тулған һыйыр малын, йәше тулған һарыҡ, кәзәне килтерергә була. Һыйыр малын ете кеше, һарыҡ-кәзәне бер кеше ҡорбанға килтерә. Мал көр, сәләмәт булырға тейеш. Бер күҙгә йәки ике күҙгә лә һуҡыр булған, мөгөҙҙәренең береһе йәки икеһе лә төбөнә тиклем һынған, ҡолағы йәки ҡойроғоноң яртыһынан күберәге өҙөлгән, йәки мал аяғына баҫа алмаһа, ауырыу, үтә ябыҡ, хәлһеҙ булһа, тештәре булмаһа, имсәктәре боҙолһа, уны ҡорбанға килтерергә ярамай.

Малдың ите өс өлөшкә бүленә. Беренсе өлөш мохтаждарға таратыла. Шулай уҡ белем алған йәштәргә, дин юлында йөрөгән кешеләргә биреү хуплана. Шулай уҡ ҡорбан таратыу менән шөғөлләнгән махсус хәйриә ойошмаларына тапшырырға мөмкин. Икенсе өлөш туғандарға һәм яҡындарға таратыла. Өсөнсө өлөш ғаиләлә ҡалдырыла.

Зөлхизә айының 10-сы көнөндә (12 сентябрҙә), байрам намаҙынан алып, өс көн дауамында, айҙың ун өсөнсө көнө башланғансы (14 сентябрь ҡояш байығансы) ҡорбан салырға була. Был сиктәрҙе теүәл үтәү мөһим. Сөнки байрам намаҙынан алда һәм байрамдың өсөнсө көнөндә ҡояш байығандан һуң килтерелгән мал ҡорбан итеп ҡабул ителмәй, ябай һуғым булып ҡала.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бер кеше йыл һайын Ҡорбан байрамында ҡорбан хаҡын мохтаждарға аҡсалата таратыр булған. Изге ғәмәлде урынына еткереп башҡармауын: "Мин хайуандарҙы үлтерә алмайым",- тип аҡлаған. Сираттағы байрамда ла шулай эшләгән. Байрамдан һуң төшөндә Ҡиәмәт көнөн күргән. Кешеләр малдарға атланып ултырғандар һәм уларҙы фәрештәләр ожмахҡа илткән. Был кеше йөйәүләп барған. Ул фәрештәләрҙән ни өсөн үҙенең йәйәү барыуы хаҡында төшөндөрөүҙәрен һораған. "Был кешеләр үҙҙәре ҡорбан итеп салған малдарға атланған", - тигән йәннәт хеҙмәтселәре. "Мин дә бит ҡорбан хаҡына торошло саҙаҡа тараттым", -тип ныҡышҡан кеше. "Белмәнеңме ни, ҡорбан килтереү менән саҙаҡа таратыу бер иш түгел. Ҡорбандың дәрәжәһе күберәк", - тип яуап биргәндәр уға фәрештәләр.**

**Мораҙым АЙСЫУАҠОВ.**

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# БЕРӘҮҘӘР - БАЙЛЫҠ МЕНӘН...

## икенселәр ярлылыҡ менән һынала



Хоҙай берәүҙәргә байлығын да, вазифаһын да, данын да бирә, икенселәрҙе ярлылыҡ һаҙлығына батыра. Күп нәмә кешенең үҙенә, һәләтлектәренә, намыҫ сифаттарына бәйләнгән. Мәҫәлән, ҡайһы берәүҙәр, һис һүҙһеҙ, аҡса эшләү һәләтенә эйә. Шуның менән бергә Хоҙай бик күп лайыҡлы кешеләргә аҡса менән ҡыуандырмаҫҡа ла мөмкин. Бер хәҙистә әйтелгәнсә, Аллаһы Тәғәлә байлыҡты кемгә теләй - шуға бирә, ә белемде кем талап итә, шул ала.

Бынан тыш, байлыҡты ниндәйҙер бүләк, унайлыҡ тип ҡарау мотлаҡ түгел. Эйе, Ҡөрьәтле Аллаһыбыҙ ҡайһы саҡта байлыҡҡа, донъяуи бәхеткә, тыныслыҡҡа ынтылған кешегә быларҙы бирә, ҡайһы саҡта - бирмәй. Ләкин Ул беҙҙе бүләкләгәндә лә, бүләктән мәхрүм иткәндә лә, быны, шулай тейеш, тип ҡабул итергә өйрәнергә кәрәк. Әгәр ҙә яҡшы кешенең һәм һиңә бирелгәндәр менән дөрөҫ ҡулланаһың икән, тимәк, байлыҡ һиңә файҙаға ғына. Әгәр ҙә инде һин дөрөҫ юлдан тайпылған, аҙашҡан кеше икәнһең, һиңә бер байлыҡ та ярҙам итмәйәсәк.

Унан һуң, юлың, ҡылыҡтарың дөрөҫ булмаһа, фәҡирлек тә һине иманһыҙлыҡҡа килтерер. Сөнки фәҡирлек һиндә Аллаға ҡаршы "бола байрағы" күтәреү теләге тыуҙырасаҡ. Тормошта дөрөҫ юлдан бармаған кеше өсөн байлыҡ та ҡайғыға һәм бәхетһеҙлеккә әйләнә.

✓ *Фәкирлекте лә Хоҙайҙың бүләге, тип баһаларға була. Бәйғәмбәребеҙ фәкирлекте ниндәйҙер оят нәмә тип иҫәпләмәгән. "Ерҙәге донъя - уларҙыҡы, ә мәңгелек донъя беҙҙеке булырын теләмәҫ инеңме ни?" тигән ул берәүгә.*



МӨҒЖИЗӘЛЕ ДОНЪЯ

# ХӨРӘФӘТИ ХИКӘЙӘЛӘР,

## йәки йәнәшәбеҙҙә кемдәр йәшәй?



### Ҡытый-ҡытый уйнайыҡ...

Һунарсының һөйләүенә ҡарағанда, уның үҙе кеүек үк, һунарсы олаһы шүрәлене көпә-көндөҙ һәм бик яҡындан ғына күргән. Йәй көндәренең береһендә, урманда йөрөгән ваҡытта, шарҡылдап көлгәнгә оҡшаш шомло бер тауыш ишетә. Шул уҡ ваҡытта балта тауышы ла сыға. Балта менән эшләүсенең кеше икәнен ул белә, ә бына йәмһеҙ тауыш кемдеке икәнен асыҡлау өсөн шул яҡҡа йүнәлә. Күп тә бармай, ул балта менән бүрәнә яһаусыны һәм уның алдында аталы-инәле ике шүрәлене күреп, баҫҡан урынында ҡатып ҡала. Ата шүрәле балта оҫтаһын ҡытый-ҡытый уйнарға саҡыра, ә үҙе шарҡылдап көлә һәм уның янында урағылана. Ошолай байтаҡ һатыулашҡандан һуң, улар бер-береһен ҡытыҡлай башлай һәм шарҡылдап көләләр. Улар ҡытыҡлашҡан арала, һунарсы шүрәләнең ҡултыҡ аҫтында ҙур тишектәр барлығын һәм ул тишектәрҙән уның үпкә-бауыры күренеп торғанын абайлай. Ҡытыҡлашыу ҡыҙа барыу менән шарҡылдап көлөүҙәр ҙә көсәйә. Ошолай ҡытыҡлаша торғас, шүрәле балта оҫтаһының ҡултыҡ аҫтына ҡулын тыға ла, йәһәт кенә уның йөрәк-бауырын тартып сығара, ә кеше аһылдап ергә ауа. Шүрәләләр йөрәк-бауырҙы бик тәмләп ашайҙар китергә йыйынғас, инә шүрәле үҙенең ярты аршындай оҙон түштәрен, атларға ҡамасауламаһын өсөн, иңбашына һалып, икәүләп урман эсенә инеп юғалалар. Шүрәләләр киткәс, һунарсы ағас ҡырҡыусы янына килә һәм уның ҡултыҡ аҫты тишек, ә үҙе үле булыуын күрә. Балта оҫтаһын егеүле торған атына һалып, ауылға алып ҡайта һәм шул арала йыйылып өлгөргән ауылдаштарына урманда күргәндәрен һөйләп бирә. Ауыл кешеләре:

- Ҡулыңда мылтығың була тороп, ни өсөн ул шүрәләләргә атманың? - тип ғауға ҡуптара. Һунарсы инә шүрәләгә атырға ярамағанлыҡты, атҡан хәлдә лә шүрәләнең үлмәүен, ә ергә тамған һоро ҡан тамсыһынан яңы шүрәле яралыуын һөйләп бирә. Ауылдың оло кешеләре быны дөрөҫләйҙәр, ғәйепте балта оҫтаһына ауҙаралар, сөнки ул шүрәләнән элек уның ҡултыҡ аҫтына ҡулын тыҡҡан, күренеп торған йөрәк-бауырын тартып сығарырға тейеш булған. Һунарсы шүрәләнең ялангас, төҫө күгелйем-ҡара, бармаҡтары бик оҙон, буйға ла нәҙек оҙон булыуын асыҡ күрә. Маңлайҙарында Туҡай шүрәләһенеке кеүек мөгөҙҙәре булыуын хәтерләмәй, ә кешеләрҙең йөрәк-бауырын тартып алыу өсөн ҡулай булһын өсөн бармаҡтарының оҙон булып яратылғанын раҫлай.

### Кем унда ут сәсә?

Ауыл ерҙәрендә коллективлашыу үткәрелгәс, оло йәштәге элекке һунарсы ла ғариза биреп колхозға инә. Ялан эштәрендә ҡатнаша алырлыҡ көсө булмау сәбәпле, уны ырҙын ҡарауылларға ҡушалар. Ырҙын табағына яҡын ғына урында уның ташландыҡ ридвандан (көлтә ташый торған арба) эшләнгән бик һәйбәт ҡыуышы ла була. Кистәрен ул ырҙын тирәләй уралғылай, йәшерен урында ултырып, бурҙарҙы һағалай, ә төндөң ҡалған өлөшөн ошо ҡыуышҡа инеп, уның ауыҙын әлхәм уҡып, һалам менән көпләп, йоҡларға ята. Ошолай бер төндө тәмле генә йоҡлап ятҡанда, ҡыуыштың япмаһы үтә кемдеңдер нимә менәндер бик ҡаты төртөүенә уянып китә. "Был кемдең аҙабы булыр икән, колхоз етәкселәренең береһе килеп, минең эште тикшерәме, тышта аяҡ тауыштары ишетелмәсме икән?" тип, байтаҡ ваҡыт өндәшмәй ята. Ләкин тышта бер кемдең дә йөрөгәне лә, тауышланғаны ла ишетелмәй. Ул ҡуркыуға төшә, доғаларын уҡып, ян-яғына төкөрә лә, ҡороулы һыҙма мылтығын баш аҫтынан алып, тышҡа сыға һәм... яҡында ғына күбә ҙурлыҡ мәскәйҙең янып ултырыуын күрә. Элек тә уның мәскәйҙәрҙе күргәне була, уларҙың зыяраттарҙа ғына булыуын яҡшы белә. Был мәскәйҙең ырҙын янына килеп ултырыуынан бик ныҡ аптырашта ҡала. Ҡарауылсы ҡурҡа башлай, мәскәйгә төҙәп атып та ҡарай, ә ул, бер ни булмағандай, һаман тирә-яғына яҡтылыҡ һибеп, баҙлап яныуын дауам итә. Һунарсы тамам аптырай, ҡурҡыуға ҡала. Доғаларының иң көслөләрен хәтергә төшөрөп, уларҙы ҡысҡырып уҡый, уҡып бөткәс, йән-яғына төкөрөп, үҙе менән булған ин ҡурҡынысло саҡта ғына эшләй торған эшен - иңер бауын өҙә тарта (күлдәк элмәгенең иң өҫкөһө). Ҡарауылсының ошолай эшләүе була, мәскәй тәрлә яҡҡа оскондар сәсеп, юҡ була. Һунарсы, доғаларының тылсымлы көсөнә маһайғандай, тамаҡ ҡырып ҡуя, яһауһыҙ булһа ла (һыҙма мылтыкты яңынан яһау бик мәшәҡәтле эш) мылтығын тотоп йөрөй башлай. Зыяраттарҙа ғына була торған мәскәй ни өсөн бында килеп ултырҙы икән, тигән һорау һаман да уның башынан сыҡмай. Ошолай йөрөй торғас, кинәт кенә был хәлдең сәбәбе ҡарауылсының хәтеренә килеп төшә. Бәктиһәң, ошо мәскәй янып ултырған урында элегерәк һыуға батып үлгән кешенең ҡәбере була.

Ырҙындан дүрт-биш йөҙ метр алыҫлыҡта Ағиҙел йылғаһы ағып ята, был тапҡырҙа уның бик киң һәм тымыҡ урыны. Ошо урында элегерәк әртил менән һал ҡыуыусыларҙың бер нисә тиҫтә һалы килеп туҡтай. Әртил кешеләренең береһе, ниңәлер, Ағиҙелдә биш тапҡыр йөҙөп сыға алам, тип, бәхәсләшә. Ул, әлбиттә, оҫта йөҙөүсе була, шулай ҙа Иҙелде бишенсе мәртәбә йөҙөп әйләнгәндә, һыуға бата. Иптәштәре уның үле кәүҙәһен һыуҙан алып сыға, ләкин шәриғәт ҡушыуы буйынса, уны зыяратта түгел, ә батып үлгән тапҡырға, ошо урында ерләйҙәр. Һалсы ясинһыҙ үлә, йыназаһыҙ ерләнә. Шуға күрә, һалсының йәне мәскәйгә әйләнеп, тәнен ташлап, ҡәберҙән сығып китә. Ғөрөф-ғәҙәт буйынса был бик насар эш, ошо ғибрәтте күрһен, тип, ниндәйҙер бер көс, бәлки, ҡарауылсыны уятҡандыр, кем белә...

**Рауил АСЫҒОЛОВ.**
**Бөрйән районы.**

Быға саҡлы бик аҙҙар ғына Хоҙайҙың байлыҡ менән һынауын үтә алды. Байлыҡҡа сумыусылар араһында йөрәгендә бер ниндәй изгелек, рәхмәт, матурлыҡ булмағандар бихисап. Тимәк, был кешеләргә байлыҡ биреп, Хоҙай уларҙы һынау алдына ҡуя, ә улар һынауҙы үтә алмай. Сөнки улар үҙҙәренең рухын, йөрәген үлтергән, Алла тарафынан бирелгән һәләтлектәрен юҡҡа сығарған.

Бында ҡайһы бер хәҙистәрҙе иҫкә алыу урынлы булыр. "Һеҙҙең арағыҙҙа ҡулдарын күкрәгенә ҡуйып, Аллаға табынғандар бар, Ул уларҙың антын бер ваҡытта ла үтәмәйенсә ҡалдырмай. Бара ибн Малик - шуларҙың береһе". Әбит Әнәстең ағаһы Бараның бер нәмәһе лә булмай. Бара кеүек ҡарап тороуға йәмһеҙ һәм бәхетһеҙ кешеләр аҙ түгел, әммә уларҙы изге йөрәктәре һәм асыҡ күңеле өсөн хөрмәт итәләр. Тап бына ошондай кешеләрҙең доға үтенестәрен Хоҙай Тәғәлә үтәмәй ҡалдырмай ҙа инде.

Тимәк, байлыкты һәм фәкирлекте ҡайғы йә бәхет тип атап булмай. Ҡайһы саҡта фәкирлекте лә Хоҙайҙың баһалап бөткөһөҙ бүләге, тип баһаларға була. Бәйғәмбәребеҙ, мәҫәлән, фәкирлекте ниндәйҙер оят нәмә тип иҫәпләмәгән. "Ерҙәге донъя - уларҙыҡы, ә мәңгелек донъя беҙҙеке булырын теләмәҫ инеңме ни?" тигән ул берәүгә. Хәҙистәгесә, Ғүмәр тигән бер әҙәм күп илдәрҙән ағылып килгән байлыҡ ҡаҙнаһына хужа булыуға ҡарамаҫтан, иң ябай йәшәү рәүешен һайлаған һәм бер ни ҙә теләмәгән.

Шулай итеп, ҡайһы саҡта байлыҡ, ҡайһы саҡта ярлылыҡ бүләк була ала. Иң мөһиме, кеше үҙенең йөрәге менән Хоҙайға тоғро булырға тейеш. "Йә, Хоҙайым,- тип әйт,- ни ебәрһәң дә ҡабул итәм. Һин ебәргән һәр бүләк, кейемме ул, кәфенме, сәнскеләрме, раузалармы, ярлыҡаумы, әлә асыумы, барыһы ла теләп ҡабул ителәсе". Көнсығыш Анатолияла әйтеүҙәренсә, "Һинән килгән һәр нәмә - бүләк".

Кеше муллыкта ҡойона ала. Был саҡта күңеле менән Аллаһының янында булһа, ул, әлбиттә, Абделҡадир Ғийлән һымаҡ, аяҡтары менән хакимдар ауырынына таянып, башы менән Хоҙай Тәғәләнең итәгенә ҡағылыр. Ә инде фәкир кеше Хоҙайға ышанмай икән, уның был донъяла ла, теге донъяла ла яҙмышы шәптән булмаҫ. Күңелендә Аллаһы Тәғәлә булмаған бай кеше ер донъяһында бәхетле булып тойолһа ла, теге донъяла тамуҡ ҡорбаны буласаҡ.

УҢЫШ ҠАҘАН

# ҮҘ-ҮҘЕҢӘ ЫШАНЫУҘЫҢ ТӨП СЕРҘӘРЕ

### Үҫешегеҙҙең биш йыллыҡ планын төҙөгөҙ

Аныҡ ғәмәлдәр схемаһынан тыш, биш йыллыҡ үҫеш планын эшләгеҙ. Уны Яҙмышым программаһы тип атағыҙ. Был программа яңы психологик һәм рухи көйләнеште, яңы кешеләрҙе, яңы эште, яңы дуҫтарҙы, юғары килемде һәм юғары тормош кимәлен үҙ эсенә алырға тейеш. Ул һеҙ үҙегеҙгә теләгән иң яҡшы тормошто һүрәтләү булһын. Ҡуйылған маҡсаттарығыҙға өлгәшеүгә ярҙам иткән мөмкинлектәрҙе ҡараштыра башлағыҙ һәм дөрөҫ юлда икәнлегегеҙгә ышаныу өсөн даими рәүештә планығыҙ менән сағыштырығыҙ. Ғүмерегеҙ ахырына тиклем планығыҙға өҫтәмәләр индерегеҙ, уны тамамланмаған симфония итеп күҙ алдына килтерегеҙ һәм камиллашыу өҫтөндә туҡтауһыҙ эшләүегеҙҙе дауам итегеҙ. Һеҙөмтә көттөрмәҫ.

### Хәҙер үк башлағыҙ

Кеше эшләй алған бөйөк асыштарҙың береһе - хәҙерге мәлдә йәшәү. Хәҙер - әлеге мәлдәге берҙән-бер ваҡыт. Шуға ҡарамаҫтан, беҙ уйхыялдарыбыҙ менән үткәндәрҙә йәшәп, уны бушҡа уҙғарабыҙ, сөнки үткәндәрҙе бер нисек тә үҙгәртә алмайбыҙ, ә инде киләсәктән ҡурҡабыҙ. Маҡсат ҡуйыу процесында ошо ҡапҡанға эләкмәҫ өсөн бик һаҡ булырға кәрәк. Кисәге хаҡындағы уйҙарҙы хәтерҙән юйып ырғытығыҙ. Ә киләсәк әле ысынбарлыҡ түгел һәм уны ашыҡтырырға ярамай. Күптәр киләсәк менән йәшәп, бөгөн нимә эшләргә кәрәклеген онота. Һәм тормош бары тик күңел ҡайтыуына, хәүефкә һәм уңышһыҙлыҡҡа килтерә, сөнки кеше ысынбарлыҡтан ҡасырға тырыша.

Киләсәктә гармониялы һәм ижади йәшәү өсөн мотлаҡ булған нәмәләрҙе бөгөн эшләүҙе ҡағиҙә итеп алығыҙ. Камиллыҡҡа ынтылығыҙ. Әгәр ағымдағы һәр эште еренә еткереп эшләргә өйрәнһәгеҙ, ул ни тиклем күңелегеҙгә ятмаһа ла, был һеҙгә шәхси үҫешегеҙ өсөн яҡшы һабаҡ буласаҡ. Шуға ҡарамаҫтан, күптәр икенсе эште еренә еткереп эшләй алыуына ышанып алдана. Әммә улар: "Ғәмәлдәге хәлторошто контролдә тотоуығыҙҙы раҫламай тороп, һеҙгә тормоштоң иң яҡшы мөмкинлектәре асылмаясаҡ", - тигән универсаль принципты үҙгәртә алмай. Ағымдағы барлыҡ эштәрҙе һөҙөмтәле һәм рациональ хәл итә алмау уңышты тотҡарлай, ул ғына ла түгел, артҡа һөйрәүсе шарттар булдырыуға булышлыҡ итә. Хәҙергенән әле иҫәптә лә булмаған яҡшы киләсәккә ҡасырға тырышмағыҙ. Һеҙҙең бөгөн эшләйәсәк эшегеҙ - иң мөһиме.

### Күп булыуы түгел, яҡшы булыуы мөһим

Көн һайын алдыбыҙға килеп баҫҡан мөмкинлекте ҡулдан ысҡындырмайынса, уларҙы мөмкин тиклем файҙалы итеп ҡулланырға өйрәнеп, беҙ Ғаләмдең ижади процесына үҙ өлөшөбеҙҙе индерәбеҙ. Беҙҙән бары тик көн һайын мөмкин ҡәҙәр тырышлыҡ һалырға ғына кәрәк. Эш бында ни тиклем күп эшләүҙә түгел, ә һәр эште ни тиклем яҡшы һәм сифатлы башҡарыуҙа. Икенсе төрлө әйткәндә, ғәмәлдәребеҙҙең сифаты ғына ысын әһәмиәткә эйә.

**Роберт ЭНТОНИ.**
**(Дауамы бар).**




Бесплатная площадь предоставлена кандидату в депутаты Совета городского округа г. Уфа Республики Башкортостан четвертого созыва **ГАЙСИНОЙ ЭЛЬЗЕ РАЗИФОВНЕ** согласно ст.65 Кодекса Республики Башкортостан от 6 декабря 2006г. N380-з "О выборах".




Бесплатная площадь предоставлена Башкортостанскому региональному отделению политической партии **"ПАТРИОТЫ РОССИИ"** согласно ст.65 Кодекса Республики Башкортостан от 6 декабря 2006г. N380-з "О выборах".




Бесплатная площадь предоставлена региональному отделению Политической партии **СПРАВЕДЛИВАЯ РОССИЯ** в Республике Башкотостан согласно ст.65 Кодекса Республики Башкортостан от 6 декабря 2006г. N380-з "О выборах".




Бесплатная площадь предоставлена кандидату в депутаты Совета городского округа г. Уфа Республики Башкортостан четвертого созыва **НАДРШИНОЙ ЭЛЬВИРЕ АБДУЛ-ВАРИЕВНЕ** согласно ст.65 Кодекса Республики Башкортостан от 6 декабря 2006г. N380-з "О выборах".

## МАРАЧ ИОСИФ МИХАЙЛОВИЧ



**самовыдвиженец, кандидат в депутаты Совета городского округа город Уфа Республики Башкортостан четвертого созыва по одномандатному избирательному округу №16.**

Иосиф Марач прошел трудовой путь от рабочего до крупного хозяйственника и руководителя. Он человек с огромным опытом решения ежедневных, рутинных проблем и с реальными возможностями по их устранению. Иосиф Марач имеет серьезный опыт работы в Уфимском городском Совете, где всегда помогал самым разным людям в их насущных вопросах. На персональную помощь которым Иосиф Михайлович направляет значительные благотворительные средства.

**ДОРОГИЕ ЖИТЕЛИ СОВЕТСКОГО РАЙОНА!**

Выберем 18 сентября Иосифа Марача, проголосуем не за партию, а за человека! За словом - дело!

Бесплатная площадь предоставлена кандидату в депутаты Совета городского округа г. Уфа Республики Башкортостан четвертого созыва **МАРАЧУ ИОСИФУ МИХАЙЛОВИЧУ** согласно ст.65 Кодекса Республики Башкортостан от 6 декабря 2006г. N380-з "О выборах".




Бесплатная площадь предоставлена кандидату в депутаты Совета городского округа г. Уфа Республики Башкортостан четвертого созыва **ИВАНОВУ ВЛАДИМИРУ АНАТОЛЬЕВИЧУ** согласно ст.65 Кодекса Республики Башкортостан от 6 декабря 2006г. N380-з "О выборах".




Бесплатная площадь предоставлена кандидату в депутаты Совета городского округа г. Уфа Республики Башкортостан четвертого созыва **ВЛАСЕНКО МАКСИМУ АЛЕКСАНДРОВИЧУ** согласно ст.65 Кодекса Республики Башкортостан от 6 декабря 2006г. N380-з "О выборах".




Бесплатная площадь предоставлена кандидату в депутаты Совета городского округа г. Уфа Республики Башкортостан четвертого созыва **АНАНЬЕВОЙ ВЕРОНИКЕ ВАЛЕРЬЕВНЕ** согласно ст.65 Кодекса Республики Башкортостан от 6 декабря 2006г. N380-з "О выборах".




Бесплатная площадь предоставлена кандидату в депутаты Совета городского округа г. Уфа Республики Башкортостан четвертого созыва **МИННИАХМЕТОВУ РЕНАТУ РАВИЛЕВИЧУ** согласно ст.65 Кодекса Республики Башкортостан от 6 декабря 2006г. N380-з "О выборах".

Политическая партия

**"ПАТРИОТЫ РОССИИ"**

Кандидат в депутаты Совета городского округа город Уфа Республики Башкортостан четвертого созыва избирательного округа №17



## Латыпов
### Марат Минуллович

**"В богатой стране не должно быть бедных!"**

Всем решениям власти – патриотическую экспертизу!

Бесплатная площадь предоставлена кандидату в депутаты Совета городского округа г. Уфа Республики Башкортостан четвертого созыва **ЛАТЫПОВУ МАРАТУ МИННУЛОВИЧУ** согласно ст.65 Кодекса Республики Башкортостан от 6 декабря 2006г. N380-з "О выборах".

## ТОПАЕВ СЕРГЕЙ

**13-сө һайлау округынан кандидат**

Топаев Сергей Николаевич 1964 йылдың 26 апрелендә Өфө калаһында инженер һәм укытыусы ғаиләһендә тыуған.

Тәүҙә Өфө авиация техникумын, һуңынан Башҡорт дәүләт медицина институтын тамамлаған, стоматолог булып эшләй. Сергей Топаев 15 йыл элек медицина һәм лабораториялар өсөн йыһаз эшләү производствоһын асып ебәрә һәм уны етәкләй. Шулай итеп бөгөнгө көндә кешеләрҙең сәләмәтлеге тураһында хәстәрләү уның тормош мәғәнәһе булып тора.

Бөгөн Сергей Топаев - Өфө kала Советына "Үсеш партияһы"нан депутатлыkka кандидат. Ул үҙенең 13-сө округының проблемаларын бик яkшы белә: балалар баkсаһына ярҙам, өйҙәр эргәһендәге территорияларҙы һәм мәктәп яңы спорт майҙансыktарын йыһазландырыу.

Бесплатная площадь предоставлена кандидату в депутаты Совета городского округа г. Уфа Республики Башкортостан четвертого созыва **ТОПАЕВУ СЕРГЕЮ НИКОЛАЕВИЧУ** согласно ст.65 Кодекса Республики Башкортостан от 6 декабря 2006г. N380-з "О выборах".

## САФИУЛЛИН ТАГИР

**Кандидат в депутаты Совета городского округа город Уфа РБ по одномандатному избирательному округу № 4**

Сафиуллин Тагир Наилевич родился 17 ноября 1972 года. Окончил УТИС по специальностям: "Проектирование и сервис бытовых машин и приборов" и "Финансы и кредит". С 2014 г. по настоящее время - генеральный директор ОАО "Уфимский ЖБЗ-2". Женат, два сына.

**Основные задачи на посту депутата Совета городского округа город Уфа РБ:**

- содержание придомовых территорий, озеленение дворов, решение вопроса парковок, борьба с парковкой машин на тротуарах, газонах, детских площадках.

Бесплатная площадь предоставлена кандидату в депутаты Совета городского округа г. Уфа Республики Башкортостан четвертого созыва **САФИУЛЛИНУ ТАГИРУ НАИЛЕВИЧУ** согласно ст.65 Кодекса Республики Башкортостан от 6 декабря 2006г. N380-з "О выборах".




Бесплатная площадь предоставлена кандидату в депутаты Совета городского округа г. Уфа Республики Башкортостан четвертого созыва **САЛИМОВОЙ АДЕЛЕ РАДИКОВНЕ** согласно ст.65 Кодекса Республики Башкортостан от 6 декабря 2006г. N380-з "О выборах".




Бесплатная площадь предоставлена кандидату в депутаты Совета городского округа г. Уфа Республики Башкортостан четвертого созыва **ШАРОНОВОЙ ЭЛЬВИРЕ МАДИЛОВНЕ** согласно ст.65 Кодекса Республики Башкортостан от 6 декабря 2006г. N380-з "О выборах".

## ФРОЛОВ КОНСТАНТИН



**Кандидат в депутаты Совета городского округа г.Уфа по избирательному округу №9**

Родился 2 февраля 1982 г. в г. Уфе. Закончил Институт права БГУ. С 2010 г. возглавляет строительную компанию "ПетройлГрупп". Решил участвовать в выборах потому, что убежден в том, что для развития города необходимо совершенствовать муниципальные правовые акты. Он хочет, чтобы Уфа была более благоустроенной и комфортной для жизни. Чтобы во дворах было больше детских игровых и спортивных площадок. Чтобы магазины, аптеки и поликлиники были доступны для людей с ограниченными возможностями здоровья. Решением этих насущных проблем он и хотел бы заниматься, будучи депутатом Уфимского городского Совета.

Бесплатная площадь предоставлена кандидату в депутаты Совета городского округа г. Уфа Республики Башкортостан четвертого созыва **ФРОЛОВУ КОНСТАНТИНУ ПЕТРОВИЧУ** согласно ст.65 Кодекса Республики Башкортостан от 6 декабря 2006г. N380-з "О выборах".

✔ ***Хаталарҙан ҡасыу өсөн тәжрибә туплау кәрәк; тәжрибә туплау өсөн хаталанырға кәрәк.***

***(Лоуренс Питер).***



*ХОККЕЙ*

# ҠАБЫНҺЫН ЙӘШЕЛ МАШИНА!

**Өфөнөң "Салауат Юлаев" хоккей командаһы баш тренерҙары Игорь Захаркин ҡанаты аҫтында үҙенең йондоҙло сәфәрен - КХЛ-дың "Гагарин" кубогы өсөн көрәш юлын башланы.**

2016-2017 уйын миҙгелен башлау менән юлаевсылар тамашасыларға бик илһамландырғыс видео-яҙма менән мөрәжәғәт итте, ошо яҙмала тамашасыларға, "Яндыр!" ("Зажигай!") тигән саҡырыу ташланды. Йәғни, "өйҙә" уҙғарған осрашыуҙар ваҡытында Өфө-Аренаны "кыҙҙырып", Өфө командаһын дәртләндереүҙәрен һораны юлаевсылар. Әммә уйын ваҡытында тамашасыларҙың тәрәге, алҡыштары, һөрәнләүе командаға ярҙам итһә лә, команда әлегә ни өсөндөр "дөрләп" китә алмай - "быҫҡый" ғына. Турнир таблицаһында юлаевсылар 8 мәрәй менән Көнсығыш конференцияла - 5-се, ә дөйөм турнир таблицаһында - 14-се урында килә.

Континенталь хоккей лигаһының IX миҙгеленең беренсе этабын Өфөнөң "Салауат Юлаев" хоккей командаһы үҙ боҙонда Череповецтың "Северсталь" командаһын 3:2 иҫәбенә еңеүе менән башлап ебәргәйне, әммә 6 сентябргә тиклем уҙған ҡалған биш уйында ла уңышһыҙлыҡҡа тарыны. СКА, ЦСКА, "Югра", "Автомобилист", "Динамо" (Рига) командаларын Өфө хоккейсылары еңә алманы.

"Салауат Юлаев" хоккей командаһы составы шулай:

**Тренерҙар:** И.Захаркин (баш тренер), А.Емелин (өлкән тренер), Н.Борщевский, К.Коренков;

**Ҡапҡасылар:** Н.Сведберг, А.Литвинов, А.Гаврилов;

**Һаҡсылар:** Д.Воробьев, С.Леписте, А.Логинов, К.Корнеев, Д.Куляш, Д.Бодров, Р.Петрищев, М.Гончаров, З.Арзамасцев, С.Гәрәев;

**Һөжүмселәр:** С.Соин, Э.Лисин, А.Лазарев, Е.Бодров, А.Энгквист, М.Майоров, К.Капризов, М.Воробьев, И.Григоренко, С.Хрипунов, А.Нестеров, Е.Алешин, М.Котляревский, А.Кудреман, Л.Умарк, Т.Хартикайнен, А.Чернов, И.Макаров.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Игорь Захаркин тәрбиәләнеүселәренең әлегә еңеү дилбегәһен бушатыбыраҡ уйнауының сәбәбе ниҙә? Уларҙың уйын тәртибен йыш боҙоп, "эскәмйә"лә ултырырға яратыуындамы? Әллә, кем әйтмешләй, был тактик хәйлә генәме? Һәр хәлдә, көйефте төшөрөргә ашыҡмай торайыҡ. "Йәшел машина" ҡабынып әле, "боҙоҡ" деталдәрҙе - хаталарҙы асыҡлаһындар ҙа...**

**Байым РӘХИМЙӘНОВ.**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1437 һижри йыл.*

| Сентябрь (Зөлхизә) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 12 (10) дүшәмбе | 5:15 | 6:45 | 13:30 | 18:08 | 19:38 | 21:08 |
| 13 (11) шишәмбе | 5:17 | 6:47 | 13:30 | 18:05 | 19:35 | 21:05 |
| 14 (12) шаршамбы | 5:19 | 6:49 | 13:30 | 18:03 | 19:33 | 21:03 |
| 15 (13) кесе йома | 5:21 | 6:51 | 13:30 | 18:00 | 19:30 | 21:00 |
| 16 (14) йома | 5:22 | 6:52 | 13:30 | 17:58 | 19:28 | 20:58 |
| 17 (15) шәмбе | 5:24 | 6:54 | 13:30 | 17:55 | 19:25 | 20:55 |
| 18 (16) йәкшәмбе | 5:26 | 6:56 | 13:30 | 18:52 | 19:22 | 20:52 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*




## ВАСИЛЬЕВ ПАВЕЛ ЮРЬЕВИЧ

Депутаты бывают разные. Словоохотливые. Щедрые на лозунги и обещания. Есть еще депутаты ДЕЙСТВУЮЩИЕ, в самом прямом смысле этого слова: без лишних слов и пустых обещаний, каждый день методично решающие реальные проблемы жителей своего округа. Однозначно, что к этому виду можно отнести **Павла Юрьевича ВАСИЛЬЕВА - ДЕЙСТВУЮЩЕГО депутата городского Совета**, в прошлом - комсомольского лидера, сейчас - директора индустриального парка ООО "ПромЦентр".

Бесплатная площадь предоставлена кандидату в депутаты Совета городского округа г. Уфа Республики Башкортостан четвертого созыва **ВАСИЛЬЕВУ ПАВЛУ ЮРЬЕВИЧУ** согласно ст.65 Кодекса Республики Башкортостан от 6 декабря 2006г. N380-з "О выборах".




Бесплатная площадь предоставлена кандидату в депутаты Совета городского округа г. Уфа Республики Башкортостан четвертого созыва **СУЛЕЙМАНОВОЙ АЛИНЕ НАИЛЬЕВНЕ** согласно ст.65 Кодекса Республики Башкортостан от 6 декабря 2006г. N380-з "О выборах".


*СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ*

# ЗАМАНСА БАЛЕТ

**Өфөлә "Саошиант тураһында легенда" ("Урал батыр") тип аталған заманса балет ҡуйыла.**

Күптән түгел уны Ҡырымда үткән "Таврида" Бөтә Рәсәй йәштәр мәғариф форумында Өфө сәнғәт институтын тамамлаған йәш балерина Аҙәлина Алсынова тәҡдим итте. Проект федераль форумдың 100 мең һумлыҡ грантына лайыҡ булды. Грант шарттарына ярашлы, "Саошиант тураһында легенда" 2017 йылда Өфө сәхнәләренең береһендә ҡуйылырға тейеш. "Саошиант тураһында легенда" ("Урал батыр") проекты - мультимедиялы хореографик спектакль. Музыка авторы - танылған башҡорт композиторы Азамат Хәсәншин. "Саошиант идеяһы ("киләсәкте ҡотҡарыусы") - зороастризм эпосы геройы Урал батыр образы аша һынландырылған. Мөһимлек темалар: туғандар араһындағы дошманлыҡ, Изгелек менән Яуызлыҡтың көрәше һәм, ниһайәт, Геройҙың үҙ-үҙен ҡорбан итеү идеяһы бер кемде лә битараф ҡалдыра алмай", - тип һөйләй Азамат Хәсәншин.

# ХӘТЕР КИСӘҺЕ

**Өфөлә арабыҙҙан киткән композиторҙар иҫтәлегенә бағышланған концерт ойошторола. 14 сентябрҙә Өфө сәнғәт училищеһының концерт залында Абрар Ғабдрахманов, Айрат Кәримов, Салауат Низаметдинов ижад иткән көйҙәр яңғыраясаҡ.**

Программала - күренекле башҡорт композиторы һәм пианист Айрат Кәримовтың тыуыуына 75 йыл тулыу уңайынан фронтовик шағир Хәким Ғиләжевтың "Ҡырҡ алтынсы һалдат" поэмаһы буйынса "Ҡаһарманлыҡ" симфоник картиналары, Заһир Исмәғилевтың уҡыусыһы һәм традицияларын дауам итеүсе композитор Абрар Ғабдрахмановтың мираҫынан "Вальс-фантазия", 2013 йылда ваҡытһыҙ вафат булған композитор Салауат Низаметдиновтың "Биш ҡатын-ҡыҙ портреты" циклы. Концертта хәҙерге башҡорт композиторҙарының яңы әҫәрҙәре лә яңғыраясаҡ. Улар - Илдар Хисаметдиновтың "J.S. Bach Galaxy" һәм Рәшит Йыһановтың "Салауат Юлаевҡа йыр" 4-се симфонияһы. Сара киске сәғәт 7-лә башлана. "Башҡорт ереңдә исемдәре республиканың милли ҡаҙанышына әүерелгән байтаҡ танылған сәнғәт әһелдәре донъяға килгән, - тип билдәләне Милли симфоник оркестрҙың музыкаль бүлеге мөдире Эльмира Ишбулдина. - Әлеге мәҙәни акция йәш быуын өсөн мөһим, сөнки ошо ваҡиға үҙгәндә - тыуған илебеҙҙең яҙмышы".

*ҠЫҪҠАСА*

# БАЙРАМДАР, ХАҠТАР...

✔ **Өфөлә йылытыу миҙгеленә әҙерлек буйынса бөтә эштәр ҙә тамамланған тиерлек. Ҡаҙанлыктар әҙер. Өфө хакимиәте башлығының беренсе урынбаҫары Салауат Хөсәйеновтар матбуғат конференцияһында ошо хаҡта хәбәр итте.** "Йылытыу миҙгелен ваҡытында башлай алмаҫбыҙ тип хәүефләнеү урынһыҙ. 15 сентябргә тиклем бөтә эштәр тамамланасаҡ", - тип белдерҙе Салауат Хөсәйенов. Коммуналь хеҙмәттәр күрһәтеү ҡағиҙәләренә ярашлы, биш көн буйына һауа температураһы 8 градус йылы торһа, йылытыу миҙгеле башланырға тейеш. Дауаханаларҙа, балалар баҡсаларында, балалар йорттарында, мәктәптәрҙә һәм башҡа социаль объекттарҙа уңайлы шарттар тыуҙырыу өсөн йылылыҡ биреү учреждение етәкселәренең ғаризаһы нигеҙендә тормошҡа ашырыла. Бөгөнгә баш ҡалала 5849 күп фатирлы йорт йылытыу миҙгеленә әҙер. Шуларҙың 5174-е - үҙәкләштерелгән йылытыу системаһы менән. Салауат Хөсәйенов әйтеүенсә, авария-диспетчер хеҙмәттәрен әҙерләү мөһим йүнәлеш булып тора. Ҡыҫҡа ваҡыт эсендә Өфөнөң ресурстар менән тәьмин итеүсе һәм торлаҡ предприятиелары йәшәү эшмәкәрлеге системаһы эшендә боҙоуҙарҙы бөтөрөү өсөн 888 кешенән торған 63 авария-тергеҙеү бригадалары ойошторған. 234 берәмек махсус техника диагностика ҡорамалдары, сығым материалдары һәм бәйләнеш саралары менән йыһазландырылған. Предприятиеларҙа сығым материалдарының авария запасы булдырылған.

✔ **Өфөлә 12 сентябрҙә Ҡорбан байрамы уңайынан "Ватан" этно-паркында тәүге тапҡыр республика Kurban Halal Fest ойошторола.** Фестиваль программаһында спорт ярыштары (көрәш, волейбол, уҡтан атыу, регби, пейнтбол), балалар һәм өлкәндәр өсөн уйындар, Ҡөрьән уҡыусыларҙың оҫталыҡ дәрестәре, Юғары мөфтөй Тәлғәт Тажетдиндың байрам телмәре, концерт ҡаралған. Ошонда уҡ хәләл туҡланыу фудкорттары, мобиль мәсет, көнсығыш йәрминкәһе асыла. Фестивалдә йыйылған аҡса "Юғалтыуҙар юҡ" хәйриә фондына йүнәлтелә. Сараны ойоштороусылар - Өфө ҡала округы хакимиәте ярҙамында "Ферзь эшлекле клубы" йәмәғәт ойошмаһы, Рәсәй мосолмандарының Үҙәк Диниә назараты, Башҡортостан мосолмандарының Диниә назараты, APL компанияһы.

✔ **Июль айында Башҡортостанда күп йылдар эсендә тәүге тапҡыр дефляция теркәлгән.** Республиканың Сауҙа һәм ҡулланыусылар хоҡуғын яҡлау буйынса дәүләт комитеты рәйесе Гүзәл Аҫылова хәбәр итеүенсә, аҙыҡ-түлеккә хаҡтар 0,1 процентҡа төшкән. "Байтаҡ йылдар инде ҡытлыҡ күҙәтелмәй. Ғинуар-июль айҙары йомғаҡтары буйынса, аҙыҡ-түлеккә ҡулланыусылар хаҡы индексы 103,4 процент тәшкил иткән. Июлдә инфляцияның кире күрһәткесе теркәлгән - 99,9 процент. Бындай хәлдең күптән булғаны юҡ ине. Тауар запастары күләме 22,9 миллиард һум тәшкил иткән. Ҡабаттан иҫәпләү һһағанда был 42 сауҙа көнө тәшкил итә. Ошондай күрһәткестәр беҙгә бер ни ҙә янамай тип раҫларға хоҡуҡ бирә", - тип иҫәпләй Гүзәл Аҫылова. Аҙна һайын хаҡтар кимәленә мониторинг үткәреү буйынса саралар үҙғарыла, тип хәбәр итә дәүләт комитеты етәксеһе. Контролерҙар бер тапҡыр ҙа тауарҙарға ҡытлыҡ арҡаһында хаҡтарҙың артыуын теркәмәгән. Башҡортостанстат мәғлүмәттәре буйынса, бөгөн аҙыҡ-түлектең арзанлығы буйынса республика һигеҙенсе урынды биләй.

✔ **Башҡортостанда журналистика өлкәһендә Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге Хөкүмәт премияһына дәғүә итеүселәр исемлеге билдәләнде.** Улар - "Кызыл таң" гәзитенең штаттан тыш хәбәрсеһе Рим Әхмәтов, "Российская газета"нан -Гөлназ Данилова, "Шоңҡар" журналынан -Рәшит Зәйнуллин, "Киске Өфө" гәзитенән - Фәүзиә Мөхәмәтшина, "Өмөт" гәзитенән - Алһыу Төхвәтуллина, Башҡортостан юлдаш телевидениеһынан - Гүзәл Хәмитова. Дәғүә итеүселәр араһында шулай уҡ Башҡортостан Республикаһы Милли архивы директоры урынбаҫары Ниязбай Сәлимов, Әлшәй районы Ураҙмәт ауыл клубы етәксеһе Клара Тукаева, Башҡорт дәүләт медицина университеты доценты Азат Кинйәбулатов бар. Премияға тәҡдим ителеүселәр тураһындағы фекерҙәрегеҙҙе матбуғат биттәрендә, радио-телевидениела, йә булмаһа, 450076, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13, 10-сы ҡат адресы буйынса хат аша ла белдерә алаһығыҙ. Телефон-факс: 276-42-66.

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# ҠОЛҒОНАЛАР ҠЫУАНЫСЫ,

## йәки Өс байрамдың бергә тура килгәне



**Маҡар ауылынан Ҡолғонаға тиклем беҙҙә Ишембай районы Ағинәйҙәр ҡоро етәксеһе, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, композитор Мәрйәм Солтанова оҙата барҙы һәм юл буйына: "Эх, юлдары ла юлдары! Ҡасандыр хыялда ла булмаған юлдар былар!"- тип, тел сартлатып һоҡланып, тәбиғәт күренештәре менән кинәнеп барҙы. Һәм Мәрйәм апайҙың әйтеүенсә, ауылдаштарын юллы итеү өсөн тап әлеге сәйәхәтебеҙҙең сәбәпсеһе - оло яҙыусыбыҙ Ноғман ағай Мусин ҙур тырышлыҡ һалған да инде.**

Ауылдың үҙәгенә, мөһабәт мәҙәниәт бинаһы янына килеп төштөк. Был бина яңы ғына төҙәлеп бөткән, тап әҙиптең юбилейы көнөндә асыуға планлаштырылған икән. Тимәк, Ҡолғоналарҙа был юлы бер түгел, өс сәбәптән байрам: яҙыусының 85 йәшлек юбилейы, Маҡар менән Ҡолғона араһында төҙәлгән юл һәм яңы мәҙәниәт үҙәге!

Беҙҙе мәҙәниәт йорто эргәһендәге өйгә саҡырҙылар. Заманында иждад йорто итеп төҙәлгән был торлаҡ йортто Ноғман Сөләймән улы ауыл биләмәһе хакимиәтенә тапшырған һәм ауылдаштары унан музей яһап ҡуйған икән. Ноғман ағай ҡунаҡтарын музей буйлап йөрөтөп, ундағы экспонаттар менән таныштыра: "Бына был сабаталарҙы һуғыш йылдарында минең кеүек итеп үргән кеше булманы ауылда, галуш һымаҡ итеп, күтәрмәле итеп тороп үреп ҡуя торғайным", - ти кескәй сабата өлгөләренә төртөп күрһәтә. Унан балта менән башҡарған ҡорамалдарын, ҡортсолоҡ кәрәк-ярағын беҙгә күрһәтеүҙән бигерәк, үҙе ентекләп ҡарап, үткән заман истәлектәренә төшөп китә. Ә шулай ҙа музейҙың төп экспонаттары - китаптар. Бында уларҙың иҫкеләре лә, яңылары ла, ҡулдан-ҡулға йөрөтөлөп шымарып, теткеләнеп бөткәндәре лә, әле типография буяуы еҫе китмәгәндәре лә кәштә-кәштә булып тора...

Китапханаһы ла, почта бүлексәһе лә, участка полицияһы ла, башҡа төрлө йәмәғәт ойошмалары ла урынлашҡан яңы мәҙәниәт бинаһын ҡотларға, оло яҙыусы Ноғман Мусинды тәбрикләргә байтаҡ халыҡ йыйылғайны. Тантаналы кисәне тәбрикләп, Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте Премьер-министр урынбаҫары Салауат Сәғитов шулай тине:

- Кеше бына ошондай данлы хеҙмәте, күркәм тормошо менән биҙәргә тейеш үҙ исемен. Кемдәрҙер, бына, китаптар яҙа, кемдәрҙер - юлдар, икенселәр бына ошондай матур биналар төҙөй. Улар барыһы ла башҡалар өсөн, халыҡ өсөн янып хеҙмәт итә. Ә инде Ноғман Сөләймән улының иждады, хеҙмәте ябай һүҙгә, ябай хуплауға ғына һыймай, ул үҙенең "мәңгелек урманын" үҫтергән шәхес. Был "мәңгелек урман" - ул беҙ, уның уҡыусылары, беҙҙең киләсәгебеҙ, беҙҙең өмөттәр ул. Мин шуға ла Ноғман ағайҙың әҫәрҙәрен ҡат-ҡат уҡыйым, әле генә "Шунда ята батырҙар һөйәге" тигән китабы ҡулымдан төшмәне. Ноғман ағай кеүек, уның әҫәрҙәрендәге геройҙар кеүек халыҡҡа хеҙмәт итә белеү өлгөһө бик кәрәк бөгөн йәш быуынға...

Артабан Ишембай муниципаль район хакимиәте башлығы Марат Ғайсин, уның урынбаҫары Гүзәл Шаһиева, шулай уҡ районның ун өс ауыл биләмәһе етәкселәре яҡташтарын ололап һүҙ алды. Район етәксеһе әлеге байрам сәбәпсеһе булған юл һәм бина төҙәлөүгә ярҙам итеүселәргә - республика Башлығы Рөстәм Хәмитовҡа, республика Хөкүмәтенә һәм "Капиталстрой" яуаплылығы сикләнгән ойошмаға (етәксеһе А.С. Лесин) рәхмәтен белдерҙе. Артабан әҙиптең ҡәләмдәштәре, төрлө гәзит-журналдарҙың баш мөхәррирҙәре - Наил Ғәйетбаев, Сабир Шәрипов, Мөнир Ҡунафин, Рәлиф Кинйәбаев, Гөлфиә Янбаева, Гөлназ Ҡотоева, Фәрит Фәтҡуллин, Илһам Йәндәүләтов, ғалимә Зәйтүнә Шәрипова, "Юрматы" ырыуы ҡор башы Риф Иҫәнов сәхнәгә күтәрелде. Әйткәндәй, З. Биишева исемендәге "Китап" нәшриәте директоры сәхнәгә Н. Мусиндың әҫәр-яңы "Һайланма әҫәрҙәр"ененң XII икенсе томлығын тотоп сыҡты. Уның: "Нәшриәт тарихындағы тәүге XII томлыҡ был", - тигән һүҙҙәрен зал көслө алҡыштарға күмде.

Тамашала яҙыусының дуҫтары ла, туғандары ла, һабаҡташтары ла, ауылдаштары ла бик күп булды. Баласағаға урын етмәне, улар баҫып та торҙо, иҙәнгә теҙелешеп тә ултырышты. Тик берәү ҙә сараны ташлап сыҡманы, һәр береһе йылы итеп алҡышлап, арҙаҡлы яҡташына үҙенең хөрмәтен, кемдәрелер йылы һүҙен еткереп ҡалырға тырышты. Күҙҙәргә йәш тығылдырып, ирекһеҙҙән ҡулъяулыҡтарҙы дымлар мәлдәр ҙә, рәхәтләнеп көлдәрер хәлдәр ҙә булды. Байрам ахырында ла әле халыҡ таралыша һалмай, байрам сәбәпсеһенең уртаға төшөрөп, үҙҙәре лә ҡушылып, яңы клубтарын бер итеп бейешеп алды.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Тормоштар ауыр, уныһы-быныһы насар, тиһәләр ҙә, һыңғай һәм матур күренештәр күберәк шулай ҙа. Бына бит, төпкөл ауылға ниндәй юл һалынған, ҡайһылай күркәм мәҙәниәт усағы төҙөп ултыртылған! Һәм башҡорт әҙәбиәтенең көнөн һынағандарға яуап итеп, шуны ла әйтке килә: милләтенә ошондай абруйлы, мәртәбәле иждад бүләк иткән яҙыусыларыбыҙ һәм уның залдар тултырып килгән уҡыусылары бар әле! Бына ошоларҙы иҫбатланы беҙгә ишембайҙар.**

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә әйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ДӘРТҺЕҘ КЕШЕ - КҮҪӘК,

## йәрһеҙ кеше - ишәк

Урынлы йомартлыҡ - ҙурлыҡ, урынһыҙ һаранлыҡ - хурлыҡ.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Кеше ярһыуы көрәшкә егелмәгән байлыҡ юҡ, кешенең күҙ йәштәренә мансылмаған ҡыуаҡлыҡ юҡ, кеше ҡаны түгелмәгән бер кисәк кенә лә ер юҡ.

**(А. Грюн).**

Үткәндәге хаталарҙы төҙәтеүгә ҡарағанда... тәңҡитләү еңелерәк.

**(Джованни Боккаччо).**

Һәр кем үҙ фекерен әйтә ала, ләкин закон барыһы өсөн дә берәү.

**(Теренций).**

Кем ниндәйҙер эште башлар алдынан уҡ үҙен яртылаш еңелгән тип иҫәпләй, ул, ысынлап та, көрәшкә тотонғанда уҡ яртылаш еңелгән була.

**(Д. Писарев).**

Айыҡ саҡта эскән ваҡытта биргән бар вәғәҙәләрегеҙҙе үтәргә тырышығыҙ, был телегеҙҙе тыйып тоторға ярҙам итер.

**(Эрнест Хемингуэй).**

Кем үҙ тормошон тулы ҡанлы итеп файҙаланған? Уның яртыһын - хыялланып, күпмелер өлөшөн ахмаҡтар менән әңгәмә ҡороп, күпмеһендер мөхәббәт утында тилереп, буштан-бушҡа ваҡыт әрәм итеп үткәрмәгән берәйһе бармы?

**(Платон).**

Хаталарҙан ҡасыу өсөн тәжрибә туплау кәрәк; тәжрибә туплау өсөн хаталанырға кәрәк.

**(Лоуренс Питер).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл:"Батша бер кешене үлем яҙаһына хөкөм итә. Әммә тегеһе батшаның алдына теҙләнеп:**

**- Батшам, әгәр минең ғүмеремде өҙмәһәң, ике йыл эсендә һинең атыңды осорға өйрәтер инем,- тип ялбара.**

**Батша быный тәҡдимде ҡыҙығып ҡабул итә һәм хөкөм ителеүсегә:**

**- Ярай, тәҡдимеңә күнәм. Ләкин вәғәҙәңде үтәмәһәң, барыбер хөкөм итергә бойорасаҡмын, - ти.**

**Хөкөмдән ҡотолоуына шатланып, был кеше өйөнә йүгерә. Әммә туғандары "Вәғәҙәңде нисек үтәмәксе булаһың инде?" тип, тағы ла оло ҡайғыға ҡала. Шунда был кеше:**

**- Ҡайғырмағыҙ юҡҡа, - ти. - Был ике йыл эсендә кем бар ҙа кем юҡ: батшаның да, минең дә донъя ҡуйыуыбыҙ ихтимал. Аттың да ятып йән биреүе мөмкин. Бәлки ул... осорға ла өйрәнер әле! "**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттен Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@mail.ru**
«ПечатниК» яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте типографияһында баҫылды (450059, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Комсомол урамы, 27/1).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 9 сентябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4417
Заказ - 1690/09